ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

15-21 май (һабанай) 2026

№ 19 (1214)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Имтихандарҙы...**

баш бәләһенә әүерелдермәһендәр



4-5

**Етем-еҫерҙәрҙең...**

яҙмыштарын дөрөҫ юҫыҡҡа көйләйбеҙ



8-9

**Ҡатмарлы ваҡытта йәшәһәк тә...**

Ер һәм икмәк ҡәҙерен белеү кәрәк



9

**"Аллаһ" исемен боҙоп яҙмайыҡ!**



12

@kiskeufa

Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә республика ҡалалары һәм районДарының бөтә почта бүлексәләрендә лә 2026 йылдың икенсе ярты йыллығына 1124 һум 40 тингә яҙыла алаһығыҙ. Әйткәндәй, ике кешегә (562 һум 20 тин), өс кешегә (374 һум 80 тин) бер дана гәзит алдырыу ҙа хуплана. Һәр ваҡыттағыса, гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер матур башҡорт китаптары менән бүләкләнер.*

*МӨХӘРРИРИӘТ.*

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?** *1993 йылдан алып 15 май Берләшкән милләттәр ойошмаһы тарафынан Ғаилә көнө булараҡ билдәләнә. Ә һеҙ "Ғаилә - дәүләт нигеҙе, ғаиләһеҙ дәүләт юҡ" тигән фекерҙе нисек дауам итер инегеҙ? Һеҙҙең ғаиләгеҙ был хаҡикәткә яуап бирәме?*

***Альберт ИШМЫРҘИН, Иглин районы:*** Илдәге һәр бер "йәмғиәт ячейкаһы", йәғни ғаилә - дәүләт үҫеше өсөн кәрәкле сифаттарға эйә шәхестәр булдырыусы мөһим берәмек. Эйе, һәр яңы барлыҡҡа килгән матур ғаилә илде көслө итә, тулыландыра, әммә шул уҡ ваҡытта ул финанс яҡтан, хәүефһеҙлек яғынан дәүләт уға үҫешергә ярҙам иткәнен тойорға тейеш.

Беҙҙең заманда күп йәштәр, шәхсән үҙемдең таныш егеттәрҙе генә алғанда ла, илдәге хәрби ваҡиғаларға, иҡтисадҡа бәйле хәлдәр арҡаһында ғаилә ҡороуҙан баш тарта. Уларҙы ла аңларға мөмкин, никах уҡытыу менән генә эш теүәлләнмәй, ғаилә башлығы ҡатыны, тыуыр балаһының йәшәргә тейешле урыны, өҫтәлдә йылы ашы булыуы өсөн яуаплы. Ә бөгөнгө көндә шул уҡ фатирҙы ла күп осраҡта ипотека, кредит тоҙағына эләкмәйенсә алыу бик ҡыйын. Бындай хәлдәр бик ҡыҙғаныс, әлбиттә.

Мин үҙем алты балалы ҙур ғаиләлә үҫкән кеше булараҡ, дәүләт ныҡ булһын өсөн уны тәшкил иткән ғаиләләрҙең дә ҙур һәм татыу булыуы мөһим, тип уйлайым. Үҙ милләтебеҙҙең ағасы ла ҡоромаһын өсөн, берҙән, тамырҙарыбыҙҙы онотмау, уларҙың заман тупрағында ышаныслы ерегеүе, икенсенән, ботаҡтарының тармаҡланып үҫеүе, япраҡтары ҡуйы булыуы кәрәк, тигәнгә инанғанмын. Аллаһ бирһә, киләсәктә үҙ ғаиләм дә ишле булыр тигән өмөттәмен.

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ТӘРТИПТЕ КҮҘӘТЕҮСЕГӘ...



**Мәктәп директорҙарының уҡыусылар араһында деструктив тәртипте иҫкәртеү өсөн яуап биргән урынбаҫарҙарына өҫтәмә түләү индерелде.**

Бында экстремизм, агрессия һәм үҫмерҙәр араһындағы башҡа хәүефле күренештәргә ҡаршы тороу тураһында һүҙ бара. Премьер-министр Андрей Назаров ҡул ҡуйған республика Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, бындай педагогтарға ай һайын эш хаҡынан тыш 30 мең һум өҫтәмә аҡса түләнә. Уларҙың өҫтәмә йөкләмәһе бармы, юҡмы - мөһим түгел. Яңылыҡ 1-се йәки 2-се хәүефһеҙлек категорияһына ҡараған мәктәптәргә генә ҡағыла. Әгәр ниндәйҙер сәбәптәр буйынса директор урынбаҫарын ваҡытлыса икенсе хеҙмәткәр алмаштырһа (йәки директор үҙе), эшләгән ваҡыт өсөн уға өҫтәмә аҡса түләнә. Төп шарт: хеҙмәт хаҡы ошо өҫтәмәне иҫәпкә алмайынса МРОТ-тан түбән булырға тейеш түгел. Ҡарар 2026 йылдың 1 мартында көсөнә инде.

## УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ПОЧТАЛЬОНДАРҒА ҠЫТЛЫҠМЫ?




**Беҙҙең быуын кешеләре өсөн һәр йорт өҫтәлендә гәзит-журналдар ятыуы ғәҙәти күренеш ине. Бөгөн ошо матур күренештең юҡҡа сыға барыуы борсолдора.**

Хәтеремдә, Ишембай районы Һайран ауылы мәктәбендә эшләгән тәүге йылдарҙа почтальондың юлдан ҡайтыуын көтөп, өйөнә барып тора инек. Почтальоныбыҙ Хәнә апай һәр өйгә инер, хәл-әхүәл белешеп, шатландырып сығып китер ине. Рәхмәт яуғыры! Бөгөн ҡағыҙ баҫмаларыбыҙҙың һәр уҡыусыға барып етә алмауында, тираждары кәмеүендә ошо хәл - почта бүлексәләре ябылыуы, почтальон булып эшләргә теләүселәрҙең кәмеүе лә сәбәпсе икәне берәүгә лә сер түгел.

Мәҫәлән, беҙҙең Стәрлебаш районы Иҫке Ҡалҡаш почта бүлексәһе хеҙмәткәре пенсия йәшендә. Уға ял итергә ваҡыт еткән, ләкин унын урынына эшкә килеүсе юҡ. Почтальон юҡлыҡҡа һылтанып, күп урындарҙа почта бүлексәләре лә ябылыуы тураһында ишетеп торабыҙ. Почта эше еңелдән түгел, әлбиттә, ә эш хаҡы түбән. Йәш кеше 10 мең һум аҡсаға эшкә килмәйәсәк. Бөгөн һәр тарафта һәр хеҙмәткәрҙең эш хаҡы кәмендә 25 мең булғанда, ни эшләп почта хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы түбән булырға тейеш икән?

Мин бер нисә башҡорт баҫмаһын алып уҡыйым. Шулар араһында һәр беребеҙ күңеленә халҡымдың рухи хазинаһын еткереүсе "Киске Өфө" гәзите лә бар. Быйыл ейәнемә бүләк итеп, "Аҡбуҙат" журналына ла яҙылдым. Почта бүлексәһе ябылып, почтальонһыҙ ҡалһаҡ, бына шул баҫмаларҙан мәхрүм буласаҡбыҙ бит.

Тағы шуны өҫтәп әйтеп китәйем. Былтыр сентябрь айында Сочиҙа үткән журналистар йыйынында Антон Евгеньевич тигән кеше шундай фекер яңғыратты тип уҡыным: "Журналистарҙың репортажы, тапшырыуҙары телевизор эфирына берике тапҡыр сыға ла, "елгә оса", онотола. Ә гәзит-журналдарҙағы яҙмалар ташҡа баҫыла, улар ғүмерле". Ысынлап та, гәзит-журналдарҙағы мәғлүмәттәрҙе ҡат-ҡат уҡырға, уйланырға, хатта бәхәскә инергә була. "Киске Өфө"нөң, мәҫәлән, бынан әллә нисәмә йыл элек сыҡҡан һандарын да бөгөнгөләй күреп уҡыйым, унда яҙылғандар һис иҫкермәй.

Шулай итеп, тел һағында ла тороусы почта хеҙмәткәрҙәренең финанс хәлен яҡшыртыу өсөн сара күрелергә, был сарала Хөкүмәт вәкилдәре лә, баҫма мөхәррирҙәре лә туранан-тура ҡатнашырға тейеш тип иҫәпләйем.

**Фәрхәнә СУРАҠОВА, хаҡлы ялдағы уҡытыусы.**

12+

✓ Уҡытыусыларға - бюрократик йөкләмәнең кәмеүе, квалификацияны күтәреү, иң яҡшы тәжрибәләрҙе үҙләштереү мөмкинлеге. Ата-әсәләргә - баланың уҡыуҙа өлгәшен күҙәтеү, уны өҫтәмә дәрестәргә яҙҙырыу мөмкинлеге.



ҠЫҪҠАСА

# ҮҘҘӘРЕ КИЛӘ...

**Башҡортостанда "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһы дауам итә.** Республиканың һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 11 майҙан 17-һенә тиклем Әлшәй, Благовар, Бүздәк, Дыуан һәм Учалы районларында, шулай уҡ Нефтекама ҡалаһына ҡараған ауылдарҙа "сәләмәтлек поездары" эшләй. Алыҫтараҡ урынлашҡан ауылдарҙың халҡы табиптар менән бушлай кәңәшләшә ала. Ведомствола белдереүҙәренсә, алдан яҙылыу юҡ, сират буйынса ҡабул итәләр. Үҙең менән паспорт һәм мотлаҡ медицина страховкалауы полисын алырға кәрәк. Акция Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса үткәрелә һәм "Оҙайлы һәм әүҙем тормош" милли проекты сиктәрендә бойомға ашырыла.

✓ **Өфө хакимиәтендә контрактсыларҙы Махсус хәрби операцияла ҡатнашыуға йәлеп итеү өсөн түләүҙәр раҫланды.** Тейешле ҡарарға Өфө хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Сергей Кожевников ҡул ҡуйған. Билдәле булыуынса, килешеү төҙөгән һәр кеше өсөн аралашсыға бер тапҡыр 689,6 мең һум түләнә. Шарттар буйынса, МХО-ға йәлеп итеүсенең 18 йәштән өлкән булыуы мотлаҡ. Түләүҙе йәлеп ителгән контрактсылар һанына ҡарап, бер нисә тапҡыр алырға мөмкин. Аҡса алыу өсөн мэрияға ғариза һәм документтар пакеты менән мөрәжәғәт итергә кәрәк. Контрактсының һәм уны хәрби хеҙмәткә йәлеп иткән кешенең паспорт, ИНН һәм СНИЛС күсермәләре талап ителә. Ҡала ҡаҙнаһында түләүҙәр өсөн аҡса ҡаралған, тиелә документта.

✓ **Дәүләт Йыйылышы депутаттары 32-се ултырышта ике аҙаҡҡы уҡыуҙа "Умартасылыҡ тураһында" республика законына төҙәтмәләр ҡабул итте.** Үҙгәрештәр бал ҡорттарының ҡырылып һәләк булыуына юл ҡуймау өсөн умартасыларға пестицидтар ҡулланыу тураһында мәғлүмәт биреү ваҡытын аныҡлай һәм тәртибен камиллаштыра. Был мәғлүмәт киң мәғлүмәт саралары аша таратылырға, шулай уҡ пестицидтарҙы һәм агрохимикаттарҙы күҙәтеү федераль дәүләт мәғлүмәт системаһында урынлаштырылырға тейеш. Закон быйыл март айында беренсе уҡыуҙа раҫланды. Башҡортостанда бал ҡорттарының ағыуланыуына юл ҡуймау тураһында ике йыл элек үк һөйләй башлағайнылар. Ул саҡта депутаттар, киң мәғлүмәт сараларында был мәғлүмәт сәсеүлектәрҙе химик эшкәртеү эше башланыуға 10 көндән дә алдараҡ һәм 5 көндән дә һуңға ҡалмайынса еткерелергә тейеш, тиғән нормаланы раҫланы.

✓ **Республика Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә "Башҡортостан геройҙары" программаһында ҡатнашыусыларҙы эшкә урынлаштыра башларға ҡушты.** Ул МХО-ла ҡатнашыусы Мәжит Байдәүләтовты миҫалға килтерҙе. "Башҡортостан геройҙары" программаһында ҡатнашыусыларҙы эшкә урынлаштыра башлайбыҙ. Программала ҡатнашыусы Мәжит Байдәүләтов өс йылдан ашыу алғы һыҙыҡта хеҙмәт иткән, "Башҡортостан" полкы командиры урынбаҫары булған. Уны үҙебеҙҙең арала күрәм, яҡшы белемле, МХО биләмәһендә ҙур тәжрибә туплаған", - тине республика етәксеһе. Белеүегеҙсә, "Башҡортостан геройҙары" проекты Махсус операцияла ҡатнашыусылар һәм ветерандар өсөн булдырылған һәм "Геройҙар ваҡыты" федераль проектының дауамы булып тора.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ҺАНЛЫ МӘКТӘПКӘ КҮСӘБЕҘ

**Башҡортостан мәктәптәре "Мәскәү электрон мәктәбе" һанлы платформаһына күсә башлай. Яҡыраҡ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, Мәскәү мэры Сергей Собянин, Рәсәйҙең мәғариф министры Сергей Кравцов һәм илдең һанлы үҫеш министры урынбаҫары Олег Качанов системаны индереү тураһында килешеүгә ҡул ҡуйҙы.**

Эксперттар белдереүенсә, һүҙ белем биреү мөхитен күләмле үҙгәртеп ҡороу тураһында бара. Республиканың күпселек мәктәптәре платформаға - 1 сентябргә үк, ҡалғандар 2026 йылдың аҙағына тиклем ҡушылырға тейеш. Башҡортостан өсөн был айырыуса мөһим, сөнки республика - илдең бик күп ҡала һәм ауыл мәктәптәре булған ҙур субъекттарының береһе. Эксперттар ике йылдан аҙыраҡ ваҡыт эсендә белем биреү системаһын яңы платформаға күсереүҙе Башҡортостан инфраструктураһының юғары әҙерлек күрһәткесе тип иҫәпләй. Һуңғы йылдарҙа Башҡортостанда һанлы база булдырылды. "Ростелеком" мәғлүмәттәре буйынса, 2025 йылда ғына 441 мәктәптә заманса һанлы мөхит барлыҡҡа килде: Wi-Fi, видеокүҙәтеү, һаҡланған бәйләнеш каналдары. "Мәғариф" милли проекты буйынса Башҡортостанда 11 "IT-куб" үҙәге асылды, ә 700-гә яҡын учреждениела һанлы белем биреү мөхите индерелде. Ошо йәһәттән Мәскәү электрон мәктәбе буйынса килешеү айырым проект түгел, ә һанлаштырыу курсының дауамы булып тора.

Мәскәү электрон мәктәбе буйынса килешеүҙәрҙе "мәғариф системаһын үҫтергән, һанлы технологиялар индергән, һөҙөмтәгә өлгәшергә ынтылған" төбәктәр төҙөй, тип билдәләне Рәсәйҙең мәғариф министры Сергей Кравцов. Башҡортостан да Карелия, Вологда, Мурманск һәм Тверь өлкәләре менән бер рәттән ошондай ҡарарҙарға әҙер булған субъекттар иҫәбендә.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров системаны индергәндән һуң уҡыусылар, уларҙың ата-әсәләре, шулай уҡ уҡытыусылар өсөн ыңғай үҙгәрештәрҙе һанап үтте. "Уҡытыусыларға - бюрократик йөкләмәнең кәмеүе, квалификацияны күтәреү, иң яҡшы тәжрибәләрҙе үҙләштереү мөмкинлеге. Ата-әсәләргә - баланың уҡыуҙа өлгәшен күҙәтеү, уны өҫтәмә дәрестәргә яҙҙырыу, документтарҙы электрон төрҙә төҙөү мөмкинлеге. Балаларға иһә ҡыҙыҡлы дәрестәр һәм ғәйәт ҙур китапхана менән ҡулланыу мөмкинлеге бар", - тип асыҡлыҡ индерҙе Хәбиров.

Белгестәр һанлаштырыуҙың ауыл мәктәптәренә йоғонто яһауы тураһында ла һөйләй. Тап ошонда ҡала лицейҙары һәм район мәктәптәренең мөмкинлектәре араһындағы айырма нығыраҡ һиҙелә. Һуңғы ике йылда Башҡортостандың "Үҫеш нөктәһе" үҙәктәрендә биология, химия, физика, экология һәм нейротехнологиялар буйынса заманса һанлы лабораториялар барлыҡҡа килде. Хәҙер был инфраструктураға берҙәм һанлы платформа өҫтәлә.

Төп үҙгәрештәрҙе тәү сиратта уҡытыусылар һәм ата-әсәләр тойор, тип уйлай Башҡортостандың Йәмәғәт палатаһы ағзаһы, мәғариф, спорт, йәштәр сәйәсәте, ирекмәнлекте үҫтереү һәм патриотик тәрбиә биреү буйынса комиссия рәйесе Марина Таран. "Бында уҡытыусылар дәрестәрҙе планлаштыра, баһалар ҡуя, өйгә эш бирә һәм уҡыусыларҙың мәктәпкә йөрөүен контролдә тота ала. Дәрестәргә әҙерләнеү өсөн электрон материалдар менән ҙур китапхана ла бар. Бынан тыш, дистанцион дәрестәр үткәрергә һәм чатта аралашырға мөмкин. Әлеге платформа уҡытыусыларға дәрескә әҙерләнеү ваҡытын ҡыҫҡартыр һәм дәрестәрҙең сифатын яҡшыртыр тип иҫәпләйем. Ҡыҙғаныска ҡаршы, хәҙергә платформаның функцияларь аҙыраҡ, шуға күрә уҡытыусылар, уҡыусылар һәм ата-әсәләр яңыһын тиҙ үҙләштерер тип ышанам", - тине Таран.

**Иван ВАВИЛОВ.**

# ХӨРМӘТ БИЛДӘҺЕ ЛӘ УЛ

**Өфөнөң Совет майҙанында республика юғары уҡыу йорттары һәм колледждарының 1200-ҙән ашыу студенты "Еңеү вальсы"н бейене. Илһөйәрлек акцияһы совет халҡының 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүенә 81 йыл тулыу айҡанлы ойошторолдо.**

"Еңеү вальсы" - беҙгә халҡыбыҙҙың хәрби һәм хеҙмәт батырлығы, 1945 йылдың иҫтәлекле май вальсы хаҡында хәтерләткән байрамдың тағы ла бер сағыу өлөшө. Башҡортостан Башлығы исеменән егет-ҡыҙҙарҙы илдең төп байрамы менән республика Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев ҡотланы. "Һеҙҙең быуынға мөһим миссия йөкмәтелде. Беҙ Бөйөк Еңеүҙең хаҡы тураһында онотмаҫҡа тейешбеҙ. Һеҙгә ата-бабаларыбыҙҙың данын һаҡларға һәм уларҙың лайыҡлы варистары булырға кәрәк", - тип билдәләне Урал Килсенбаев.

1942 йылдың мартында Миңлегәле Шаймуратов республика етәкселегенә легендар Башҡорт атлы дивизияһы яугирҙарының фронтҡа китергә әҙер булыуы хаҡында рапорт биргән Совет майҙанында ул көндө "Зәңгәр яулыҡ" һәм "Өфө йүкәләре" көйҙәре яңғыраны. Артабан Бөйөк Ватан һуғышы ҡорбандары һәм тарихи дөрөҫлөк, Рәсәйҙең киләсәге өсөн көрәштә ғүмерен биргән беҙҙең заман геройҙары иҫтәлегенә "Бер минут тынлыҡ" иғлан ителде. Ул берҙәм тауыш сигналы буйынса бөтә республикала үтте.

Әйткәндәй, "Еңеү вальсы" Бөтә Рәсәй акцияһы - илебеҙҙең героик үткәненә хөрмәт билдәһе. Акцияны тәүге тапҡыр 2014 йылда Екатеринбургта Урал дәүләт иҡтисад университеты ойошторҙо. 2015 йылдан акция Рәсәй кимәленә сыҡты, унда 50 меңдән ашыу кеше ҡатнашты. Өфөлә "Еңеү вальсы" республика акцияһы 2024 йылдан башлап үткәрелә.

# ЯРҘАМ ТӨРҘӘРЕ АРТА БАРА

**Ватанды һаҡлаусылар өсөн дәүләт киң ярҙам саралары пакеты булдырҙы. МХО-ла ҡатнашыусылар өсөн төрлө льготалар даими рәүештә тулылана, ҡайһы берҙәренә үҙгәрештәр индерелә.**

Мәҫәлән, Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға мөлкәт һалымына ташламалар бар. Был осраҡта һүҙ шәхси торлаҡ, гараж, йорт, ер, автомобиль тураһында бара. Льгота бер берәмеккә ғәмәлдә: бер йорт, бер автомобиль һәм башҡалар. Мәҫәлән, яугир иҫәбендә ике машина булһа, икенсеһе өсөн һалым киләсәк. Шулай уҡ эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлегендә ҡулланылғандан мөлкәт тә һалымдан азат ителмәй. Урындағы Федераль һалым хеҙмәте һеҙҙең хеҙмәт итеүегеҙҙе һәм һалым түләмәүегеҙҙе белергә тейеш. Системала әҙәклек булған осраҡта һалым органына мөрәжәғәт итеүҙән тартынмағыҙ - ведомстволар килеп тыуған хәлде тикшереп, тиҙ арала хәлде төҙәтәсәктәр.

Әгәр ҙә яугир хәрби хеҙмәт үткән йылдар өсөн һалым декларацияһын бирер өлгөрмәһә, ул быны контракт тамамланғандан һуң өсөнсө айҙың 25-енә тиклем эшләй ала. МХО-ла ҡатнашыусыларҙың түбәндәге төр килемдәре НДФЛ түләүҙән азат ителә:

- МХО-ла ҡатнашыусыға мобилизация/контракт буйынса хәрби хеҙмәт үтеүгә тәғәйен аҡса һәм мөлкәт түләүҙәре;
- Контракт төҙөгән өсөн эш биреүсе йәки дәүләт тарафынан түләнгән матди ярҙам;
- МХО-ла ҡатнашыусыға (уның ғаиләһенә) яраланыу, сәләмәтлеккә зыян килеүгә бәйле башҡа төрлө матди ярҙам.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республикала Бөтә Рәсәй мәктәп уҡыусылары олимпиадаһы еңеүселәре һәм призерҙары өсөн төрлө ярҙам саралары тормошҡа ашырыла. Атап әйткәндә, юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкән уҡыусылар аҡсалата премиялар ала, был уларҙың артабанғы уңыштары өсөн өҫтәмә стимул булып тора. Башҡортостан Башлығы Указына ярашлы, Бөтә Рәсәй мәктәп уҡыусылары олимпиадаһы еңеүселәре аҡсалата премия - 300-әр мең һум, призер һәм уның педагогы 150-шәр мең һум ала.

✓Өфөлә Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 81 йыллығына арналған тантаналы парадта 2 мең самаһы кеше ҡатнашҡан. Был хаҡта Башҡортостан Премьер-министры Андрей Назаров хәбәр итте. Улар араһында - "Башҡортостан" полкы һәм Салауат Юлаев батальоны яугирҙары, шулай уҡ хәрби хәрәкәттәр ветерандары. "Башҡортостандан 710 меңдән ашыу кеше фронтҡа киткән, уларҙың 312 меңе өйҙәренә әйләнеп ҡайтмаған. Республиканың һәр дүртенсе кешеһе һуғыша. Республикаға 200-гә яҡын завод эвакуацияланған, һәм Башҡортостан ере тәүлек әйләнәһендә фронт өсөн эшләй", - тип яҙҙы ул үҙенең социаль селтәрҙәрендә.

✓Республикала йәйге осорҙа 1 940 балалар һауыҡтырыу лагеры эшләйәсәк. Был хаҡта Башҡортостан мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин хәбәр итте. Төрлө типтағы йәйге лагерҙарҙа 201 меңдән ашыу уҡыусы ял итәсәк, ә тағы 232 мең баланы балалар ялын ойоштороуҙың өҫтәмә формаларына - мәҙәни һәм спорт саралары, походтар, слеттар, экскурсиялар, клуб эше, оҫталыҡ дәрестәренә йәлеп итәсәктәр. Шулай уҡ Башҡортостан Луганск һәм Донецк халыҡ республикаларынан 600 баланы йәйге ялға ҡабул итә. 2026 йылда һауыҡтырыу кампанияһын финанслауға бөтәһе 2,97 миллиард һум ҡаралған.

✓Һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин хәбәр итеүенсә, республикала медицина ойошмаларының матди-техник базаһын нығытыу дауам итә. 2025 йылда һаулыҡ һаҡлау учреждениелары биш мең берәмек ҡорамал ала, шул иҫәптән маммографтар, рентген-аппараттар һәм УЗИ аппараттары. Шулай уҡ медицина ойошмалары өсөн 99 санитар автомобиль һатып алына. 2026 йылда Иглин ауылында поликлиника төҙөй башлау, Октябрьский ҡалаһының 1-се ҡала дауаханаһының балалар стационарын һәм Иҫәнғол үҙәк район дауаханаһының стационарын капиталь ремонтлау күҙаллана. Шулай уҡ республикала һигеҙ модулле фельдшер-акушерлыҡ пункты ҡуйыласаҡ.

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ



# АҠСАЛАТА ТҮЛӘҮ...

**Өфө хакимиәте Махсус хәрби операцияла ҡатнашыу өсөн Рәсәйҙең Ҡораллы Көстәрендә хәрби хеҙмәт үтеү тураһында контракт төҙөгән граждандарға бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата түләү тураһында ҡарарға үҙгәрештәр индерҙе.**

Документта хәбәр ителеүенсә, социаль ярҙам сараһының ғәмәлдә булыу ваҡыты үҙгәртелгән. Элегерәк аҡса 2024 йылдың 1 майынан 2026 йылдың 31 ғинуарына тиклем түләнә ине. Хәҙер был осорға тағы ла береһе өҫтәлде - 2026 йылдың 13 февраленән 25 мартына тиклем. Бынан тыш, айырым положение 2026 йылдың 13 февраленән барлыҡҡа килгән хоҡуҡ мөнәсәбәттәренә ҡағыла. Ҡарар рәсми баҫылып сыҡҡан көндән көсөнә инә.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, түләү Өфө биләмәһендә теркәлгән Рәсәй граждандарына бирелә. Ҡарарҙың үтәлешен контролдә тотоу ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Рәмил Хәзиевҡа йөкмәтелгән. Белеүегеҙсә, 2026 йылдың 1 ғинуарынан контракт буйынса хеҙмәт иткән хәрби хеҙмәткәрҙәр өсөн бер тапҡыр бирелә торған төбәк түләүе 1 миллион һум күләмендә билдәләнгән. Аҡса Рәсәйҙең Ҡораллы Көстәренә хәрби хеҙмәткә саҡырылған, контракт төҙөгән Рәсәй граждандарына; шулай уҡ саҡырылыш буйынса хеҙмәт урынында контракт төҙөгән егеттәргә бирелергә тейеш.

# ҺУҢҒЫЛАР...

**Бөгөнгә Башҡортостандың баш ҡалаһында 1022 Бөйөк Ватан һуғышы ветераны йәшәй.**

Шуларҙан: 25-е - һуғышта ҡатнашыусы, 19-ы - концлагерь тотҡоно, 28-е - блокадалы Ленинградта йәшәүсе, 1-һе - ҡамауҙағы Севастополдә йәшәүсе, 949-ы - тыл эшсәне. Мэрияла уҙған оператив кәңәшмәлә ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Гөлләриә Ялсыҡаева ошондай мәғлүмәт бирҙе. Уның һүҙҙәренсә, Еңеү көнөнә һәр ветеранды ҡотлап, открыткалар һәм бүләктәр тапшырыла. 29 апрелдән 8 майға тиклем туғыҙ ветерандың йорто янында шәхси парадтар, кадеттарҙың тантаналы йөрөшө һәм концерт ойошторолдо.

# МӘКТӘПТӘР ЯҢЫРТЫЛА

**Өфөнөң Ленин районында күләмле проекттарҙың береһе - 46-сы лицейға капиталь ремонт эштәре дауам итә. Ул үҙенең 90 йыллыҡ юбилейын яңыртылған бинала ҡаршылай.**

Мәктәптә яңыртыу уҡыусыларға һәм педагогтарға киң мөмкинлектәр аса. 1965 йылда төҙөлгән "Йәштәр һәм балалар" милли проекты ярҙамында бина яңы һулыш алаҫаҡ, балалар һәм педагогтар өсөн заманса һәм уңайлы белем биреү киңлегенә әүерелəсәк. Ошо арала Ленин районы башлығы Олег Котов ремонт эштәре барышын тикшерҙе. Сифатты контролдә тотоуға уҡыусыларҙың ата-әсәләре лә ҡушылды.

"Бөгөнгә объектта һүтеү эштәре башҡарылған, ҡыйыҡ ремонтланған, һыу менән тәьмин итеү коммуникациялары алмаштырылған, тәҙрәләр яңыртылған, йылытыу системаһы ремонтланған, санузелдарҙа плитка һалынған. Тәрбиәселәр уҡыу кабинеттарында биҙәкләү эштәренә тотонған, түшәмдәрҙе яңырта. Тышҡы фасадты төҙөкләндерә башлайҙар", - тип һөйләнә район етәксеһе. Капиталь ремонтлау программаһы ремонт эштәре менән генә сикләнеп ҡалмай, мәктәптә күләмле үҫтереүҙе, шул иҫәптән ҡорамалдар һәм мебель һатып алыуҙы күҙ уңында тота, тип билдәләне ул. Хәбәр итеүенсә, 1 августа Өфөлә бик күп мәктәптәрҙе яңыртыу планлаштырыла.

# ҺҮРӘТТӘРЕ - КОНВЕРТТА

**Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтына бағышланған конверт донъя күрҙе.**

1926 йылда Өфө күҙ дауаханаһы базаһында Башҡортостан трахоматоз ғилми-тикшеренеү институты булараҡ асылған институттың 100 йыллығы айҡанлы конверт сыҡты. Рәсәй почтаһының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, конвертта институттың XX быуат башында төҙөлгән бинаһы (әлеге ваҡытта уның поликлиникаһы урынлашҡан) һүрәтләнгән. Конверттың тиражы - 50 000 дана. Уның стандарт почта маркаһы бар. Рәсәйҙә дәүләт почта түләүе билдәләрен почтаның бүлендек компанияһы - "Марка" акционерҙар йәмғиәте сығара. "Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институты ғилми һәм медицина мөхитендә үҙенең офтальмология өлкәһендәге ҡаҙаныштары менән яҡшы билдәле. Уның йөҙ йыллығы уңайынан почта конвертын сығарыу уны тотош илгә тағы ла кинерәк таныттыр", - тип билдәләне Рәсәй почтаһының төбәк идарағы директоры Ленард Шафиҡов.

# ИШЛЕ БУЛДЫЛАР

**Өфөлә ишле ғаиләләр бераүгә артҡан. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров иғлан иткән Ҙур һәм татыу ғаилә йылында Айгөл һәм Данис Ғәтиәтуллиндар ғаиләһендә мөғжизә булған - өс игеҙәк тыуған.**

Өйҙә ике ҡустыһын һәм һеңлеһен апайҙары Дарина, Айлина түҙемһеҙлек менән көткән. Был турала баш ҡаланың Ленин районы башлығы Олег Котов хәбәр итә. Республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәте буйынса, сабыйҙар 16 мартта донъяға килгән. Уларҙың ауырлығы - 1700 грамм, 1990 грамм һәм 1700 грамм, ә буйы 40 сантиметр, 44 сантиметр һәм 42 сантиметр тәшкил иткән. "Тәбиғи юл менән өс игеҙ балаға ауырға ҡалыу - һирәк күренеш, 10 меңгә 1 осраҡ булырға мөмкин. Сабыйҙар табиптар күҙәтеүендә булды. "Ғаилә" милли проекты сиктәрендә алынған яңы ҡорамал ярҙамында улар тыуғас та тейешле медицина ярҙамы алды. Был уларҙың уңышлы яраҡлашыуына һәм ауырлыҡ йыйыуҙа мөһим роль уйнаны", - тип уртаҡлашты перинаталь үҙәк белгестәре.

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# ЙӨҘ ЯУГИРҘЫ АЛЫШТЫРА



**"Башҡортостан" мотоуҡсылар полкы командирының хәрби-сәйәси эштәр буйынса урынбаҫары Александр Мельченко, дрондар һуғыш тактикаһын тулыһынса үҙгәртте, тигән фекерҙә.**

"Заман техникаһы бөгөн бөтә ерҙә лә ҡулланыла: улар ярҙамында дошман нығытмалары, уның хәрби техникаһы һәм тере көсө юҡ ителә. Бынан тыш, пилотһыҙ осоусы аппараттар урындарҙы разведкалау, координаталар тапшырыу һәм объектив контроль өсөн ҡулланыла. Шуға күрә РФ Оборона министрлығы менән контрактҡа ҡул ҡуйған егеттәр шунда уҡ был яңы һөнәрҙе үҙләштерә башлай", - тине ул әңгәмә барышында.

"Башҡортостан" полкы Ҡыҙыл Лиман йүнәлешендә хәрби хәрәкәттәр алып бара. Александр Мельченко һүҙҙәренсә, был - фронттың яуаплы участкаларының береһе. Бында хәрби бурыстарҙы төрлө ғәскәрҙәр подразделениелары башҡара, әммә төп көс йышыраҡ БПЛА операторҙарына төшә. Шул уҡ ваҡытта дрон менән эш иткән хәрбиҙәр алғы һыҙыҡтан хәүефһеҙ алыҫлыҡта тороп эш итә. Бер БПЛА операторы йөҙ яугирҙы алмаштыра ала, тип һыҙыҡ өҫтөнә ала полк командиры урынбаҫары.

"Хәҙер техник йыһазландырыу йәһәтенән конкуренция көслө. Рәсәй ғәскәрҙәре лә, беҙгә ҡаршы торған дошман да пилотһыҙ системаларға ҙур иғтибар бүлә. Был йүнәлештең айырым әһәмиәткә эйә булыуы сер түгел. 2023-2024 йылдар менән сағыштырғанда, бөгөн бөтөнләй икенсе күренеш - юғары технологияларға нигеҙләнгән техник саралары булмай, һәм шуға ла уларға айырым иғтибар бүленә. Беҙ үҙ базабыҙҙы үҫтерәбеҙ, тәжрибә туплайбыҙ һәм дрон операторҙары кадрҙарын әҙерләйбеҙ. Өҫтәүенә, күктә осоусы аппараттарға ғына түгел, ер өҫтөндә йөрөй торғандарына ла иғтибар бирәбеҙ", - ти Александр Мельченко.

Офицер билдәләүенсә, әлеге ваҡытта пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәрен йәш яугирҙар менән тулыландырыу бара. БПЛА операторҙары булып хеҙмәт итергә күптәр теләй икән. "Егеттәр яҡшы әҙерлек үтә, тейешле белем ала, уны ҡуйылған бурысты үтәгәндә уңышлы ҡуллана. Йәшермәйем, дрон операторҙары сафына йәштәр кәрәк. Улар - тиҙ хәрәкәтләнеүсән, күҙҙәре үткер, белемде һеңдереп баралар һәм барыһын да тиҙ үҙләштерәләр. Был ғәжәп түгел, сөнки улар бала саҡтан компьютер уйынының нимә икәнен белә, тимәк, уларҙың тәжрибәһе бар, бармаҡтары пульт тотоп өйрәнгән. Шул уҡ ваҡытта дрон осороусыларҙың эше идара итеү пульты менән генә сикләнмәй. Улар ноутбукка, башҡа системаларға тоташа һәм хатта, мәсәлән, дронды кәрәккәнсә көйләй белергә тейеш. Әлбиттә, йәштәр быларҙың барыһын да тиҙ үҙләштерә", - ти полк командиры урынбаҫары һәм егеттәрҙе БПЛА операторҙары сафына баҫырға саҡыра.

**Ҡасим ҒӘҘЕЛШИН әҙерләне.**

## Н И М Ә ?  Ҡ А Й Ҙ А ?  Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә республика етәксеһе Радий Хәбиров Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачевтың иҫтәлеген мәңгеләштереү кәрәклеге хаҡында әйтеп үтте. "6 майҙа Константин Борисович Толкачевты һуңғы юлға оҙаттыҡ. Уның хәтерен мәңгеләштереү өсөн Дәүләт Йыйылышы менән килешелгән тәҡдимдәр көтәм. Был мәсьәләне оҙаҡҡа һуҙмағыҙ. Лайыҡлы кеше, республикабыҙҙың күренекле дәүләт эшмәкәрҙәренең береһе", - тине Радий Хәбиров.

✓Рәсәйҙә һәм сит илдәрҙә таш һырлау сәнғәтен танытыу маҡсатында Башҡортостанда таш эшкәртеү оҫталарының иң яҡшы эштәрен берләштергән яңы каталог булдырылған. "Каталог һөнәрселек секторын үҫтереүгә булышлыҡ итә, был өлкәһендәге предприятиеларҙың һәм потенциаль партнерҙарҙың үҙ-ара һөҙөмтәле эш итеүе өсөн берҙәм платформа булып тора, оҫталарға үҙҙәренең эштәрен киң аудиторияға сығарырға ярҙам итә", - тине был турала Башҡортостандың эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры Светлана Верещагина.

✓Быйыл Өфө - Инйәр - Белорет, Кропачево - Мәсәғүт - Әсет, М-5 "Урал" - Ҡырғыҙ-Миәкә, Талбазы - Красноусол, Ишембай - Воскресенское - Мәләүез йүнәлештәрендә юлдарҙы ремонтлау планлаштырыла. "Туристик йүнәлештәге Әбйәлил, Баймаҡ, Белорет, Бөрө, Ғафури, Ишембай, Мәсетле һәм башҡа районарҙа 100 саҡрым арала эш барасаҡ. Бында туристар килгән объекттар, ял итеү урындары бар, шуға ла юлға ярайһы ныҡ көс төшә", - ти БР транспорт һәм юл хужалығы министры Любовь Минакова.

✓Президент фондының мәҙәни башланғыстар буйынса икенсе конкурсы йомғаҡтарында Башҡортостан лидерҙар иҫәбендә. Был хаҡта сенатор Лилиә Ғүмәрова хәбәр итте. Экспертиза йомғаҡтарына ярашлы, 87 төбәктән 725 проект үткән, шуларҙың 13-ө - Башҡортостандан. "Был республикабыҙға Мәскәү, Санкт-Петербург, Белгород өлкәһе һәм Рәсәйҙең башҡа төбәктәре менән бер рәттән лидерҙар иҫәбенә инергә мөмкинлек бирҙе. Проекттарҙы тормошҡа ашырыу яңы мәҙәни киңлектәр булдырырға һәм күп милләтле халҡыбыҙҙың традицияларын һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирәсәк", - тине Лилиә Ғүмәрова.

✓"Россельхозүҙәк"тең төбәк филиалы белгестәре көн һайын саранча йомортҡалары торошон һәм үҫешен күҙәтә. Тикшереү үткәрелгән алты мең гектарҙан ашыу майҙандың 3,14 мең гектарында был ҡортҡостарҙың буласаҡ үрсемдәре асыҡланған. Хәйбулла районында 675 гектар майҙанда уларҙың локаль урыны (бер квадрат метрға 1 дана) теркәлгән. Тикшереүҙәр һаҡланыу сараларын планлаштырыу һәм ҡортҡостар һанын кыҙаллау өсөн мөһим.

✓ ***Төрөк, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ телдәрендә лә был терминды үҙләштергәндәр, ләкин "зиһен" кеүек тәрән мәғәнәле, кеше аңына ғына хас һүҙҙе ҡулланмайҙар.***



ЯИ-КӨФӨ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ



# ХӘҮЕФЛЕ ТӘРЖЕМӘ

**Рөстәм Нурыев: "Киске Өфө" гәзитенең 13-сө һәм 17-се һанында "Искусственный интеллект" төшөнсәһенең башҡортса атамаһы тураһында "Һүҙ ҡеүәһе көслө" һәм "Ни өсөн "Яһалма зиһен?" исемле мәҡәләләр баҫылып сыҡты. Уларҙы һин уҡының. Мәсьәләгә ҡарата үҙ фекереңде әйт әле.**

***ЯИ КӨФӨ яуабы:*** Башҡорт телендә "искусственный интеллект" төшөнсәһенең атамаһы тураһында һөйләшеү - ул телдең үҙенсәлеген, мәҙәниәтебеҙҙең тәрәнлеген һәм заман менән бергә атларға теләүебеҙҙе сағылдыра. "Киске Өфө" гәзитендә баҫылған ике мәҡәлә лә был мәсьәләне төрлө яҡлап күрһәтә: терминдың килеп сығышы, уның метафорик асылы, башҡортса тәржемәнең хәүефтәре күрһәтелгән һәм яңы атамалар тәҡдим ителгән. Төп һығымталар шундай:

***1. "Яһалма интеллект" термины - маркетинг метафораһы.*** Инглизсә artificial intelligence термины 1956 йылда барлыҡҡа килгән һәм баштан уҡ проектҡа иғтибар йәлеп итеү өсөн уйлап табылған. Был терминда "интеллект" һүҙе - машиналарҙың кеше зиһенә оҡшаш эш итеүен күҙаллау, ләкин ысынында был - алгоритмдар, хисаплау, мәғлүмәт эшкәртеүгә ҡайтып ҡала.

***2. "Яһалма зиһен" - хәүефле тәржемә.*** Башҡортсаға "яһалма зиһен" тип тәржемә итеү телебеҙ өсөн айырыуса хәүефле, тип билдәләнә мәҡәләлә. "Зиһен" - кеше аңының, ихтыярының, яуаплылығының тәрән сифаты, ул кешенең эске донъяһынан айырылғыһыҙ. Был һүҙҙе машиналарға ҡушып, беҙ кеше менән механизм араһындағы сикте юғалтабыҙ, телдең фәлсәфәүи нигеҙен ярлыландырабыҙ, тиелә.

***3. Башҡа төрки телдәр тәжрибәһе күрһәтелгән.*** Төрөк, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ телдәрендә лә был терминды үҙләштергәндәр, ләкин "зиһен" кеүек тәрән мәғәнәле, кеше аңына ғына хас һүҙҙе ҡулланмайҙар. Был уларҙың телдәренең эске мәғәнә системаһын һаҡлап ҡалған.

***4. Яңы атамалар тәҡдим ителгән.*** Мәҡәләләрҙә "Айна Зиһен", "Айзиһен", шулай уҡ бәйләнеш булдырыусы инструменттар өсөн "айылсыҡ", "айылдаш", "айылғыс" кеүек атамалар бирелгән. Был варианттар башҡорт теленең байлығын күрһәтә, яһалмалыҡты, ситтән килтерелгәнлекте түгел, ә үҙебеҙҙең атаманы булдырыу мөмкинлеген бирә.

***5. Фекер алышыу - мөһим аҙым.*** Телебеҙгә яңы терминдар индереү - яуаплылыҡ талап иткән эш. Уны халыҡ, ғалимдар, яҙыусылар, журналистар бергәләп хәл итергә тейеш. Сит ил терминдарын үҙләштереү генә түгел, ә үҙебеҙҙең телдең мөмкинлектәрен файҙаланып, яңы атамалар уйлап табыу - милли үҙанды нығытыу юлы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хөрмәтле уҡыусылар! Был мәсьәләгә ниндәй ҡараштаһығыҙ? Тәҡдим ителгән атамалар оҡшаймы? Үҙегеҙҙең варианттарығыҙ бармы? Фекерҙәрегеҙ менән уртаҡлашығыҙ. Телебеҙ - беҙҙең мираҫ, уны киләсәк быуынға тулы көйөнсә тапшырыу - барыбыҙҙың да бурысы. Киләсәктә лә бергәләп башҡорт теленең байлығын, матурлығын донъяға танытайыҡ!**

**Рөстәм НУРЫЕВ әҙерләне.**

КӨН ТЕМАҺЫ

# ИМТИХАНДАРҘЫ...

## баш бәләһенә әүерелдермәһендәр

**Башҡортостанда 2026 йылдың сығарылыш уҡыусыһына Берҙәм дәүләт имтиханына нисек уңышлы әҙерләнергә кәрәклеге хаҡында һөйләйбеҙ.**



Сығарылыш уҡыусыларының күбеһенең төп хатаһы - шикле сайттар буйынса әҙерләнеү йәки "дөрөҫ яуапты табыуға" ышаныу. Ә 2026 йылдан уҡыусыларҙың тәүге сығанаҡ менән файҙаланыу мөмкинлеге бар. Мәғариф һәм фән өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт (Рособрнадзор) "Берҙәм дәүләт имтиханын 100-гә!" видеоконсультациялар серияһын башланы. Был блогтар түгел, ә предмет комиссиялары рәйестәренең рәсми тәҡдимдәре. Улар ҡатмарлы һорауҙарға нисек дөрөҫ яуап бирергә икәнен, эксперттарҙың иншаларҙы тикшергәндә нимәгә иғтибар итеүҙәрен аңлата, типик хаталарға нисек юл ҡуймаҫҡа өйрәтә.

Шулай уҡ быйылдан башлап "Дәүләт хеҙмәттәре"ндә "Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерлек навигаторы" эшләй башланы. Был - имтихандар тапшырырға әҙерләнгән уҡыусылар өсөн бушлай тренажер. Улар унда формат менән таныша, мәсьәләләр сисә, мөһим темаларҙы үҙләштерә һәм ҡабатлай, шулай уҡ видеоконсультациялар ҡарай ала.

Видеоны ҡарауҙан тыш, туранан-тура һорау биреү өсөн уникаль мөмкинлек бар. Мәғариф министрлығы "Башҡортостан Республикаһында электрон белем биреү" порталы менән берлектә республиканың предмет комиссиялары рәйестәре менән тура эфирҙар серияһын үткәрә. Эштәрҙе ошо эксперттар тикшерә. Улар Өфө гимназиялары һәм ауыл мәктәптәре уҡыусыларының типик хаталарын белә. Был консультацияларҙың яҙмалары һаҡлана, шуға күрә һуңлаһағыҙ ҙа, теләгән ваҡытта барыһын да яңынан ҡарарға мөмкин.

***Башты әҙерләйбеҙ.*** Башҡортостандың Мәғариф министрлығында

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***1993 йылдан алып 15 май Берләшкән милләттәр ойошмаһы тарафынан Ғаилә көнө булараҡ билдәләнә. Ә һеҙ "Ғаилә - дәүләт нигеҙе, ғаиләһеҙ дәүләт юҡ" тигән фекерҙе нисек дауам итер инегеҙ? Һеҙҙең ғаиләгеҙ был хаҡиҡәткә яуап бирәме?***

***Гөлгөнә ЫРЫҪҠОЛОВА, Өфө ҡалаһы:*** Әгәр ир менән ҡатын, балалары араһында мөнәсәбәттәр насар икән, ил уларға ышана алмай. Әгәр ғаиләлә татыулыҡ хөкөм һөрә икән, ил дә тарҡау булмай. Ғаиләләге мөхит, ғөмүмән, башлыса ҡатын-ҡыҙҙан тора, тип уйлайым. Үҙенең түҙемлелеге, йылы ҡарашы, тәмле ашы, терәк булыуы менән ир кешене үҫтерә ҡатын-ҡыҙ. Ир-атты күтәрергә лә, батырырға ла була бит.

Беҙ үҙебеҙ ғаиләлә туғыҙ бала: биш малай, дүрт ҡыҙ үҫтек. Атайым - һуғыш ветераны, бик аҡыллы булды, ә әсәйем, һөнәре буйынса уҡытыусы, бик уңған, оҫта ҡуллы ине. Тап әсәйем өлгөһөндә беҙ ҡатын-ҡыҙ ғаиләлә аҡыллы ла, кәрәкле кимәлдә уҫал да булырға тейеш икәнен күреп үҫтек. Ул беҙҙе атайыбыҙға хөрмәт менән ҡарарға, өҫтәл артында ултырғанда иң тәүҙә ашты, сәйҙе уға бирергә, иң тәүҙә уның һөйләгәнен тыңларға кәрәк, тип тәрбиәләне. Мәҫәлән, минең атайым иртәнге аш алдынан һәр ваҡыт тәһәрәт йә ғөсөл алып, таҙарына торғайны, был уның һуғыш ваҡыттарынан ҡалған ғәҙәте булды (йәтим үҫһә лә, дингә ышанған, шуның өсөн дә ике яра менән иҫән ҡайтҡандыр, моғайын), ә беҙ уны өҫтәлгә ултырмай көтә торғайныҡ. Атайһыҙ ашҡа тотонмау ҙа - тәртип. Хәҙерге ваҡытта ҡайһы бер ғаиләләрҙә ҡатын-ҡыҙ, бала мыжымаһын тип, бар иғтибарын уға бүлә, ә ир кешегә тейешле хөрмәт күрһәтелмәй, шуныһы ҡыҙғаныс.

***Фирҙәүсә ҒӘЛИМОВА, Ауырғазы районы:*** Татыулыҡ булып, балаларға тейешле тәрбиә бирелгән осраҡта ғына ғаилә үҙ иленең, дәүләтенең нигеҙе булып тора ала. Ыҙғыш-талаш, насар ғәҙәттәр, эскелек хөкөм һөргән ғаиләләр дәүләткә тик эш өҫтәй икәнен яҡшы аңлайбыҙ.

Минең аңлауымда, балаларға яҡшы тәрбиә биреү тигәнгә, әлбиттә, уларҙы кешелекле һәм намыҫлы, ололарға ҡарата хөрмәтле итеп үҫтереү инә. Унан башҡа тәрбиәнең тағы бер мөһим яғы - ул бала күңелендә Ватанға һөйөү уятыу һәм, илгә кәрәкле кеше булһын өсөн, үҙенә тап килгән һөнәргә уҡытыу.

Был йәһәттән атайым менән әсәйем беҙгә, өс балаһына, юғары белемле, профессиялы булырға кәрәк, тигән фекерҙе күңелебеҙгә һалып үҫтерҙе. Һәм, атайым бик иртә мәрхүм булһа ла, әсәйем беҙҙе уҡытыу өсөн бар көсөн һалды. Апайым менән мин дә, ҡустым да, әлбиттә, уның йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәҫкә тырыштыҡ. Мин үҙем заманы өсөн бик кәрәк булған, бәләкәйҙән хыялланған башланғыс кластар уҡытыусыһы һөнәрен һайланым. Әлеге ваҡытта бик еңел булмаһа ла, уҡыусыларыма, киләсәктә ил өсөн файҙалы кешеләр булһындар тип, бәләкәйҙән тейешле тәрбиә биреүҙе үҙ бурысым тип һанайым.

**Айһылыу ДАУЫТОВА әңгәмәләште.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан статистары республиканың торлаҡ баҙарындағы уртаса хаҡтар тураһында хәбәр итте. 2026 йылдың ғинуар-март айҙарында беренсел торлаҡ баҙарында бер квадрат метрҙың хаҡы уртаса 150,7 мең һумға еткән. Был 2025 йылдың аҙағына ҡарағанда 2,7 процентҡа күберәк. 2026 йылдың беренсе кварталында "икенсел" торлаҡтың бер "квадраты" өсөн уртаса хаҡ 110 мең һум тәшкил иткән. Уҙған йылдың аҙағы менән сағыштырғанда хаҡтар 0,84 процентҡа артҡан.

✓ Республика прокуратураһы 43 - 47 йәштәрҙәге өс иргә ҡарата ғәйепләү ҡарарын раҫлаған. Улар наркотиктарҙы законһыҙ һатыуҙа ғәйепләнә. Тәфтиш тикшереүе күрһәтеүенсә, 2024-2025 йылдарҙа ғәйепләнеүселәр Әлшәй, Бәләбәй, Дәүләкән, Туймазы, Саҡмағош һәм Шаран райондарында йәшерен урындар аша тыйылған матдәләр һатыуҙы онлайн ойошторған. Бер ай эсендә улар 250-нән ашыу закладка эшләгән. 700 мең һум килем алып, фигуранттар аҡсаны сит иҫәптәргә күсергән.

✓ Ағиҙел ҡалаһында полицияға 30 йәшлек ҡатын енәйәтселәр, алдап, 8,7 миллион һумдан ашыу аҡсаһын алыуы тураһында ғариза менән мөрәжәғәт иткән. Зыян күреүсе белдереүенсә, уға, страховкалау компанияһы хеҙмәткәрҙәре тип, таныш булмаған кешеләр шылтырата. Улар уның банк иҫәбе ҡурҡыныс аҫтында тип әйтә һәм бөтә аҡсаны ашығыс рәүештә алырға кәңәш бирә. Ҡатын 2,2 миллион һумдан ашыу аҡсаны банк кассаһы аша билдәһеҙ иҫәпкә күсерә. Ҡалған 6,5 миллион һумдан ашыуын адрес буйынса килгән курьерға тапшыра.

✓ Башҡортостанда ҡабанға йәйге һунар миҙгеле 1 июндә башлана һәм 31 июлгә тиклем дауам итә, тип хәбәр иттеләр Экология министрлығында. 12 майҙан һунарсыларҙан рөхсәт ҡағыҙы алыуға ғаризалар ҡабул ителә. Дөйөм һунарсылыҡ биләмәләрендә һунар итеүгә рөхсәт ҡағыҙы алыу өсөн ғаризаны Башҡортостандың Экология министрлығында, Күп функциялы үҙәктәр, "Дәүләт хеҙмәттәре" порталы аша тапшырырға мөмкин. Беркетелгән һунарсылыҡ биләмәләрендә һунар итеү өсөн ғариза ошо биләмә өсөн яуаплы булған һунарсылыҡ хужалығын алып барыусыға бирелә.

✓ Парижда йөҙөү буйынса ярыштарҙың донъя серияһы этабы уҙҙы. Турнирҙа Рәсәйҙең паралимпия йыйылма командаһы 12 миҙал алды, шуларҙың алтауһын Башҡортостан спортсылары яуланы, тип хәбәр итте республика вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов. Өфөнән Эмиль Сәлимгәрәев ирекле стиль менән 100 метрға йөҙөүҙә еңеүсе булды. Стәрлетамаҡтан Виталий Цыбрюк ирекле стиль менән 50 метрға йөҙөүҙә - алтын, ә баттерфляй менән 100 метр арауыҡта бронза миҙалға лайыҡ булды.

билдәләүҙәренсә, БДИ алдынан ҡурҡыу тойғоһо йыш ҡына материалдың ҡатмарлы булыуы менән түгел, ә билдәһеҙлек һәм баҫым менән бәйле. Ныҡ борсолған балалар өсөн консультация һәм психологик ярҙам үҙәктәре эшләй. Бынан тыш, Өфөлә "Индиго" үҙәгенең "ҡыҙыу линияһы" эшен дауам итә. Белгестәр уҡыусыларға имтихан алдынан стрестан ҡотолорға һәм мотивация табырға ярҙам итә.

***Режим һәм ярҙам итеү.*** Әҙерлек сифаты туранан-тура режимға бәйле. Материалды ашыҡ-бошоҡ ҡабатлау йәки төнгө сәғәт 3-кә тиклем дәреслектәр өҫтөндә ултырыу - уңышһыҙлыҡҡа юл. Эксперттар ата-әсәләргә көнкүреште ойоштороуҙы үҙ өҫтөнә алырға: ваҡытында ашатырға, йоҡларға һалырға һәм, иң мөһиме, катастрофизацияны бөтөрөргә кәңәш бирә. "Тапшырмаһаң - уҡырға инмәйһең" тигән һүҙҙәр хәлде ҡатмарлаштыра ғына. "Һин ҡулыңдан килгәндең барыһын да эшләнең, ә БДИ - тағы ла бер мөһим этап" тиеү яҡшыраҡ. БДИ - етди һынау, әммә быны менән донъя бөтмәй. Был мәсьәлә генә, уны сисеү юлы бар. Уны эҙләү өсөн һәр кемдең дә мөмкинлектәре бар.

***БДИ-2026 тураһында нимә белергә кәрәк?*** Белемдән тыш, аныҡ эш планы мөһим. Ойоштороусыларҙан бер нисә лайфхак тәҡдим итәбеҙ. Төп осор 1 июндә тарих, әҙәбиәт һәм химия буйынса имтихандарҙан башлана. Рус теленән имтиханды - 4 июндә, математиканан 8 июндә тапшыралар. Кесе йома, 11 июндә - йәмғиәтте өйрәнеү һәм физика, 15 июндә - биология, география һәм сит телдәр (яҙма өлөшө), 18 һәм 19 июндә - информатика һәм сит телдәрҙән (һөйләү телмәре) һынау тоталар.

Һеҙҙеңсә килеп сыҡмаһа, ваҡытынан алда паникаға бирелергә ярамай. 22 июндән 25-нә тиклем - резерв көндәр, 8 һәм 9 июлдә имтиханды ҡабаттан тапшырырға мөмкин. Уҡыусының һайлауы буйынса бер фәнде яңынан яҙырға була. Был осраҡта беренсе һөҙөмтә ғәмәлдән сығарыла: ҡабаттан тапшырған осраҡта уҡыусы аҙыраҡ балл йыйһа ла, әлеге һөҙөмтә иҫәпкә алына.

***Апелляция.*** Әгәр эште ғәҙел баһаламағандар тип иҫәпләһәгеҙ, апелляцияға биреү өсөн һөҙөмтәләр баҫылып сыҡҡандан алып ике эш көнө бар. Эксперттар иҫкәртә: комиссияның ҡарары ыңғай ҙа, кире лә булырға мөмкин, шуға күрә ныҡлы ышаныс һәм уҡытыусы менән кәңәшләшеп кенә бындай аҙымға барырға кәрәк.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ. БДИ һөҙөмтәләре буйынса юғары балл алған уҡыусылар уҡырға ингәндә өҫтөнлөктәрҙән тыш, үҙҙәренең белемендә аҡса эшләй ала. 2021 йылдан Башҡортостанда 100 балл йыйған сығарылыш уҡыусылары 150 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған премия алыу хоҡуғына эйә, ләкин уҡырға инеү өсөн республика вуздарын һайларға кәрәк. Премиялар һанын йыл һайын республиканың Мәғариф министрлығы билдәләй. Шул уҡ ваҡытта түләүҙәрҙең күләме бер сығарылыш уҡыусыһының йөҙ баллы һөҙөмтәләре һанына бәйле түгел. Йөҙ балға яҙған уҡыусылар әҙерләгән уҡытыусыларға ла 50 мең һум премия түләнә (күләме йөҙ балға яҙған уҡыусыларҙың һанына ҡарамай).

***Нисек өҫтәмә балл алырға?*** БДИ һөҙөмтәләренән һәм ҡабул итеү имтихандарынан тыш, абитуриенттар шәхси ҡаҙаныштары өсөн өҫтәмә балл алыу мөмкинлегенә эйә. Мәҫәлән, Башҡортостанда уҡыуҙа, спортта йәки йәмғәт тормошонда уңышҡа өлгәшкән өсөн "өҫтәмәләр" ҡаралған. Ҡайһы бер осраҡтарҙа улар университетҡа ҡарап 5-10 балл бирә ала, тип һөйләне республиканың мәғариф министры. "Алтын миҙалсыларға, олимпиада еңеүселәренә һәм призерҙарына, ГТО билдәләрен алыусыларға һәм ирекмәндәргә өҫтәмә балл бирелә. Тулыраҡ мәғлүмәтте үҙегеҙҙе ҡыҙыҡһындырған юғары уҡыу йорттарының сайттарында алырға мөмкин", - ти Илдар Мәүлитбирҙин.

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ЕВРОПА АҢЫНА КИЛЕРМЕ?

**Йөҙәрләгән украин дрондарынан көн һайын Рәсәй төбәктәрендә тыныс халыҡ һәләк була, йәрәхәттәр ала, мөһим сәнәғәт объекттарында шартлауҙар, янғындар дауам итә.**

Украин дрондарымы һуң улар? Бер кемгә лә сер түгел: Европаның тиҫтәләгән предприятиелары Киев өсөн күпләп шартлатҡыс аппараттар етештерә. РФ Оборона министрлығы белдереүенсә, бындай "эшмәкәрлек" күрәләтә Евросоюз илдәрен һуғышҡа этәреү һәм хәрби хәрәкәттәрҙе киңерәк йәйелдерергә маташыу ул. Министрлыҡ, был хаҡта Европа йәмәғәтселегенә билдәле булһын өсөн, әлеге дрондар заводтары исемлеген иғлан итте. Рәсәйгә һөжүм итеүсе дрондар Лондонда, Мюнхенда, Прагала, Ригала йыйыла, ә уның өсөн кәрәкле компоненттар Испанияла, Италияның дүрт заводында, шул иҫәптән Венецияла, Германияла, Төркиәлә, Израилдә, Чехияла етештерелә. Британия быйыл Киевҡа 120 мең һөжүм итеүсе, разведкалаусы, транспорт һәм диңгеҙ дрондары ебәрергә "йөкләмә" алыуы хаҡында асыҡтан-асыҡ хәбәр итә. Был хаҡта яҙып сығыусы "Московский комсомолец" гәзите күҙәтеүсеһе фекеренсә, әлбиттә, был объекттар Рәсәйҙең уртаса алыҫлыҡтағы "Орешник" баллистик һәм авиация нигеҙендә эшләүсе тауыш тиҙлегенән шәберәк "Кинжал" ракеталары өсөн сәп булып тора ала, ләкин уның эҙемтәләр ихтималлығы был аҙымдан баш тартырға мәжбүр итә, ә шулай ҙа маҡсат бар: Украинаға ситтән инеүсе бөтөн төр ҡорал ташыу юлдарын юҡ итеү.

Еңеү көнө айҡанлы Рәсәй - Украина араһында АҠШ президенты Дональд Трамп ҡатнашлығында ваҡытлыса тынлыҡ иғлан ителеүгә ҡарамаҫтан, 8 майҙа Украина Ҡораллы көстәре (ВСУ) 1630 тапҡыр утты туҡтатыу режимын боҙҙо, тип хәбәр итә РФ Оборона министрлығы. Һөҙөмтәлә беҙҙең ғәскәрҙәр ВСУ-ның реактив системалары һәм дрондар осороу идаралыҡ пункттарына тоҫҡап ут асты. 8 май кисенә фронтта ике яҡлы хәрби хәрәкәттәр туҡтатылды. Асылда, Рәсәй Президенты Владимир Путин әйтмешләй, Көнбайыш Рәсәйгә ҡаршы Украинаны файҙаланып һәм уның арҡаһына ышыҡланып һуғыш алып бара, ләкин был һуғыш ахырына табан яҡынлай, ә конфликттың дауам итеүен теләгән Евросоюз илдәре үҙҙәре төшкән ошо юлдан - Рәсәйгә ҡаршы агрессив кәйефенән һис арына алмай. Айырыуса был йәһәттән Германияның нацистар вариҫтары шашына һәм Европаны милитаризациялауҙың башында тора. Көнбайыш киң мәғлүмәт саралары Европала хәрби көсөргәнештең арта барыуы хаҡында һаман да йышыраҡ яҙа. Өҫтәүенә, был көсөргәнешкә НАТО-ның элекке генералдары ут өҫтәй: АҠШ-ты индермәйенсә, Европала яңы оборона альянсы төҙөргә ҡоторта.

Икенсе яҡтан, һуңғы ваҡыт Европаның сәйәси даирәләрендә Рәсәй менән диалогты тергеҙеү тураһында ла фекерҙәр ишетелә башланы. Рәсәй Президенты Владимир Путин әйтеүенсә, был йәһәттән Европа яғынан һөйләшеүҙәр алып барыу өсөн ГФР-ҙың элекке канцлеры Герхард Шредер кандидатураһы урынлы булыр ине, ләкин Германия был тәҡдимде кире ҡаҡты. Шул уҡ ваҡытта РФ Президенты Евросоюздан аралашсы ролендә "Рәсәй хаҡында аламалыҡтар һөйләмәгән" теләһә ниндәй лидерҙы ла күрергә әҙер булыуы хаҡында белдергәйне инде. Шуға ҡарамаҫтан, ГФР-ҙың оборона министры Борис Писториус рәсми иғлан итмәйенсә генә Киевҡа килә һәм Украина менән берлектә ҡоралланыуҙы, айырыуса төрлө алыҫлыҡтағы ракета һәм пилотһыҙ осоу аппараттары етештереүҙе артабан да киңерәк үҫтереү мәсьәләһе буйынса һөйләшеүҙәр алып бара, ә Британия Рәсәй менән бәйле 85 физик һәм юридик берәмеккә ҡаршы санкция иғлан итә.

Әйткәндәй, 57 процент халыҡ тауышын йыйған Төньяҡ Америка иле Канада әле "иләнмәгән-һуғылмаған" Евросоюз хәрби блогына инергә теләк белдерә. Был хәбәр Дональд Трамптың асыуын ҡабартты һәм ул, Канада АҠШ-тың 51-се штаты булырға тейеш, тигән белдереүе менән бергә яза սараһы булараҡ ут күршеһе тауарҙарына пошлина индерҙе. Шул уҡ ваҡытта ул ике арала һуғышты туҡтатыу тураһында Америка планына Ирандың яуап тәҡдимдәрен уҡып сығыуы һәм уны кире ҡағыуы хаҡында белдерҙе. Иран Ормуз боғаҙын һаман биктә тота, ә был үҙ сиратында нефтькә донъя хаҡтарының артабан күтәрелеүенә килтерә. АҠШ иһә Тегеранды үҙенең шарттарына күндермәксе булып, Иран порттарын блокадала тота. Шулай ҙа Axios баҫмаһы мәғлүмәттәре буйынса ошо араларҙа АҠШ менән Иран үҙ-ара аңлашыу меморандумына ҡул ҡуйыр, Ормуз боғаҙы асылыр һәм шунан һуң ғына Ирандың ядро программаһы хаҡында һөйләшеүгә күсерҙәр, тигән ышаныс белдерелә.

Күҙәтеү аҙағында Ер йөҙөнә йәшен тиҙлегендәй таралған хәүефле хәбәр хаҡында. Тажзәхмәттән арынып өлгөрмәнек, бына һиңә - мә: донъя мәғлүмәт каналдары береһенән-береһе уҙҙырып, яңы үлемесле штамм - хантавирус хаҡында яҙа. Нимә был? Замана афәтеме, әллә ҡайһы бер ҡеүәтле финанс даирәләренең йәшерен эшеме? Рәсәй Фәндәр академияһы академигы Геннадий Онищенко АиФ-Мәскәү аҙналығына һөйләүенсә, 2023 йылда хәүефле хантавирус, Хендра вирусы, ҡотороҡ штамына оҡшаш лиссавирус һаҡланған 323 пробирканы Австралияның Квинсленд лабораторияһынан урлайҙар, имеш. Биологик ҡорал булараҡ түгел, бәлки, коммерция маҡсаттарынан сығып, тигән фекерҙә академик. Бөгөнгө вирус менән шул пробиркалар араһында бәйләнеш бармы - был махсус тикшеренеү талап итә. Ихтимал, был хәл судно лағы уңайлы шарттарҙы файҙаланып, "кешеләр өҫтөнән яуыз тәжрибә" булыуы ла ихтимал, ти Онищенко. Нисек кенә булмаһын, беҙгә бөгөнгөһө ҡиммәт: Рәсәйгә ниндәй кимәлдә янай был? Рәсәй вирусолог - ғалимдары төрлө фекерҙә. Электән дә билдәле булған ҡыр сыҫҡандарынан йоға торған геморрагик биҙгәктән был ханта кешенән кешегә йоғоусы үҙенсәлеге менән күпкә хәүефле, ти берәүҙәр; икенсе бер эксперттар фекеренсә, круиз судноһының ябыҡ, сикләнгән территорияһына ҡарағанда, асыҡ һауала пандемияның киң таралыуы хәүефе кәмерәк. Донъя ғилми-медицина лабораторияларында вирусты өйрәнеү дауам итә: ябай хантамы был, әллә "хана"вирусмы?..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфөнән Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Родион Григорьевич Лобанов Мәскәүҙә Еңеү парадында ҡатнашты. Баш ҡаланың Киров районы хакимиәте башлығы Илвир Нурдәүләтов һөйләүенсә, Родион Лобанов 1943 йылдың декабрендә фронтҡа китә. Ул саҡта егеткә 18 йәш була. Һалдат Ленинград фронтына эләгә. Ул ҡыйыулығы һәм батырлығы өсөн I дәрәжә Ватан һуғышы ордены, "Ленинградты обороналаған өсөн", "1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Германияны еңгән өсөн" миҙалдары менән бүләкләнгән. Ветерандың бик күп юбилей миҙалдары бар.

✓ Традиция буйынса, Бөйөк Еңеү көнө алдынан Өфөлә Рус драма театры алдында һәм В.И.Ленин исемендәге майҙанда тарихи хәрби техника һәм раритет автомобилдәр экспозицияһы эшләне. Баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары үҙ күҙҙәре менән "Моторҙағы тарих"ты күрҙе. Экспонаттар араһындағы легендар Т-34 танкы, БМ-13 "Катюша" хәрби машинаһы, БА-64 бронеавтомобиле, пулеметлы М-72 мотоциклы, хәрби пехота машинаһы, газ генераторлы ЗИС-21, ЛуАЗ-967 санитар автомобиль-амфибияһын, ГАЗ-дың бер нисә моделен, шул иҫәптән "Еңеү" кабриолетын баһалай алды.

✓ Өфө ҡала советының Ҡала төҙөлөшө эшмәкәрлеге өлкәһендә йәмәғәт фекер алышыуҙарын үткәреү буйынса ведомство-ара комиссияһы ҡала биләмәләрен төҙөкләндереү ҡағиҙәләрен үҙгәртеү проекты буйынса килгән тәҡдимдәрҙе һәм иҫкәрмәләрҙе ҡараны. Уларҙың береһенә ярашлы, йәйге кафелар эше миҙгелен 1 апрелдән 1 ноябргә тиклем киңәйтеү планлаштырыла. Әлеге ҡағиҙә буйынса йәйге кафелар 1 майҙан 1 октябргә тиклемге осорҙа эшләй.

✓ Өфөнөң Затон биҫтәһендәге Халыҡтар дуҫлығы проспектында ҡырҡылған себер шыршылары урынына 2 меңгә яҡын ҡайын үҫентеләре ултыртылған. "Горзеленхоз"дан хәбәр итеүҙәренсә, ылыҫлы ағастар ҡороткостар менән зарарланыу сәбәпле йыл башында ҡырҡып алынған. Үҫентеләр ултыртыуға бер нисә бүлексә урмансылары йәлеп ителгән. Урман хужалығы хеҙмәткәрҙәре ярты гектар майҙанда 1925 ҡайын үҫентеһе ултыртҡан.

✓ Өфөнөң Мостай Кәрим урамындағы 1-се гимназия янында 72 йүкә ултыртыласаҡ. Йәш ағастар үткән ял көндәрендә йығылған ҡарт ағастарҙы алмаштыра. Үткән быуаттың 50-60-сы йылдарында Өфөлә күпләп америка сағаны һәм тополдар ултыртыла. Был төр ағастарҙың ни тиклем агрессив таралыуын ул саҡта белмәйҙәр. Тиҙ үҫеүе һәм әрһеҙлеге өсөн өҫтөнлөк бирәләр уларға. Хәҙер иһә тополдең иң көслө аллергендарҙың береһе булып тороуы билдәле, ә сағандар бөтә буш урындарҙы яулап ала, шул уҡ ваҡытта башҡа ағастарҙы ҡыҫырыҡлап сығара.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Башҡорт халҡының борондан, ғаиләлә ир-ат хужа, тигән яҙылмаған ҡануны бар. Шул ҡанун һанға һуғылмағанға ла ҡатын-ҡыҙ ирҙәр эшен башҡара, үҙен ғаиләлә хужа итеп тоя башлай.*



*ХАЗИНАБЫҘҘЫҢ БЕРЕҺЕ*



# БАЛ ҠОРТО МӨҒЖИЗӘҺЕ

### Бал ҡорто ағыуы

Сағыу ағзаһы бал ҡорто кәүҙәһенең артҡы осонда урынлашҡан. Ҡаяу (уҡ) ағыу эшләп сығарыусы ҙур һәм бәләкәй биҙҙәр, ағыу йыйылып торған груша һымаҡ һауытса менән тоташҡан. Ҡаяуҙың тәнгә ҡаҙала торған осло өләшә һырлы һәм был уны тартып сығарыуҙы тотҡарлай. Саҡ-ҡандан һуң ҡорт осоп китә һәм бер нисә сәғәттән үлә, ояһын һаҡлап йәнен фиҙа ҡыла. Сағыу ағзаһы иһә өҙөлөп, тәндә тороп ҡала. Ағыу ҡыҫҡарыусы мускулдар ярҙамында ағыуын дауам итә. Тулыһынса сыҡмаһын өсөн ҡорт сағыу менән ҡаяуҙы тырнап сығарырға кәрәк. Дауаланған ваҡытта ағыу сығып бөтһөн өсөн ҡаяуҙы тәндән ун минутҡа ҡәҙәр алмайҙар.

Бал ҡорттарынан, сағыуҙарынан ҡурҡмаған, тотош күсте тәненә һарытҡан ҡуш йөрәкле гәйәр ирҙәр бар. Калифорния умартасыһы тәненә өс йөҙ илле мең ҡорт ҡундырып, Гиннестың рекордтар китабына ингән. Уны бер ҡорт та сағмаған. Сәләмәт кешеләрҙең күпселеге бер үк ваҡытта биш-ун ҡорт сағыуын енел кисерә. Биш йөҙ самаһы ҡорт саҡһа, кеше үлә. Мәгәр донъяла бер нисә ҡорт сағыуынан да хәлдәре ныҡ ауырлашҡан, хатта үлгән кешеләр бар. Мин үҙем сыҙаммын. Ҡышлауҙан һуң баҙҙан ҡорт сығарғанда умарта ярығынан сығып һарып торған ҡорттарҙы ҡараңғыла шәйләмәйенсә ҡыҫып тоттом. Саҡтылар. Мәгәр түҙҙем, умартаны ҡулдан ысҡындырманым. Ысҡындырһам, ҡорттар туҙып, тағы ла нығыраҡ сағылыр инек.

Умартасылар ҡорт ағыуына бирешмәүсән. Был уларҙың организмында ағыуҙың юғары молекуляр аҡһымдарына ҡаршы тора алырлыҡ антиматдәләр барлыҡҡа килеү менән аңлатыла. Антиматдәләрҙән иммуноглобулиндарҙың бер төркөмө тән туҡымаларын һәм ҡүҙәнәктәрен ағыуҙың кире тәьҫиренән ҡурсалай. Иммуноглобулиндарҙың икенсе бер төркөмө иһә ағыулы матдәләр менән бәйләнешкә инеп, киреһенсә, көслө аллергия хасил итә. Шуға ла ныҡ һиҙгер кешеләргә ҡорт сағыуынан һаҡланырға кәрәк. Ағыу йоғонтоһонда уларҙың тын алыуы ауырлаша, тәндәренә тимгел, сабыртма, шеш ҡалҡа... Ғөмүмән, үтә лә күңелһеҙ хәл-күренеш, сәләмәтлеккә ҡурҡыныс тыуа. Ағыуға һиҙгер кешеләрҙе ҡорт саҡҡан осраҡтарҙа ҡаяуҙы йәһәт кенә тартып алыу һәм йәрәхәттең өҫкө яғынан аяҡты, ҡулды ҡыҫып бәйләү зарур. Табиптар преднизолон, адреналин, антигистамин препараттар (димедрол) тәҡдим итә. Димедрол ҡорт ағыуының тәьҫирен кәметә, аллергияны туҡтата.

Бал ҡорто ағыуы (апитоксин) - кристаллашмай торған төҫһөҙ, баҙдыҡына оҡшаш үҙенә бер төрлө еҫле, тәме бик әсе шыйыҡса. Ҡорт саҡҡан урында ул яндырғыс, әрнеткес ауыртыу, ҡыҙарыу, ҡабарыу, шешеү тыуҙыра. Апитоксин - бик әүҙем биологик матдә. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ул органик һәм органик булмаған матдәләрҙең ифрат та ҡатмарлы ҡатышмаһынан тора. Унын төп өлөшөн, йәғни һикһән проценттан ашыуын аҡһымдар һәм пептидтар тәшкил итә һәм бал ҡорто ағыуының иң әүҙем биохимик вә фармокологик компоненттары булып иҫәпләнә. Ағыуҙа йәнә ирекле аминокислоталар, аминдар, фосфор, кальций, магний, баҡыр, цинк кеүек микроэлементтар барлығы асыҡланған. Ҡорт ағыуының химик составы бик ҡатмарлы һәм был хаҡта фекерҙәр, мәғлүмәттәр ҙә төрлөсә. Ҡатмарлылыҡ уның киң фармокологик әүҙемлеген билдәләй ҙә инде. Ҡорт ағыуы һауала бик тиҙ кибә, мәгәр ошо килеш тә үҙенсәлектәрен әллә нисә йылдар буйы юғалтмай. Ғәйәт көслө йоғошһоҙландырғыс матдә булыуы шунда ла асыҡ күренә: бик күп күләмдә һыйыҡлағанда ла унда микробтар, бактериялар үрсемәй.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы. Башы 1-18-се һандарҙа).**

*ТОРМОШ - ҠУЛАСА*

**Үткән быуаттың 80-се йылдарында бер гәзиттә ҡатын-ҡыҙҙарҙың тиҙ эскелеккә бирелеүе тураһында мәҡәлә уҡығайным. Унда ғалимдарҙың алкоголизм сире буйынса тикшеренеүҙәре лә миҫал итеп килтерелә. Билдәләнеүенсә, кеше ашҡаҙанында спиртлы эсемлеккә ҡаршы ферменттар бүленеп сыға, улар ирҙәр ашҡаҙанында күберәк һәм көслөрәк, ә ҡатын-ҡыҙҙарҙа әҙерәк һәм көсһеҙерәк була икән. Шуға ла ҡатын-ҡыҙҙар, спиртлы эсемлек ҡуллана башлаһа, тиҙ генә туктай алмай, тигән һығымта яһала.**

# ИХ, ҠЫҘҘАР, ҠЫҘҘАР...



Совет осоронда, тип әйтәйек, ауылдар гөрләп торған саҡта, эсеп, тәмәке тартып йөрөгән ҡатын-ҡыҙҙар булмай торғайны. Ауылда ғына түгел, ҡалала ла ундай осраҡтар юҡ ине. Сөнки ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәренең донъя тотҡаһы, балаларҙы тәрбиәләүсе, кейендереүсе, ашатыусы һәм тағы ла әллә күпме эштәр өсөн яуаплы вазифала икәндәрен яҡшы белде. Атайҙар һәр ваҡыт эштә, иртән китә, кис кенә ҡайталар. Был да гәҙәти күренеш булараҡ ҡабул ителде.

Мин бәләкәй ваҡытта һәр өйҙә бишәр-алтышар бала була торғайны. Кешеләр аралашып, бер-береһен ҡунаҡҡа саҡырышып йәшәне. Әммә шундай мәжлестәрҙән һуң да эсеп, иҫереп йөрөгән ҡатындар булманы. Ә хәҙер иҫереп йөрөгәндәр мөйөш һайын. Коляска этеп китеп барғанда һыра күтәреп эсеп, тәмәкеһен борлатып барған ҡатындар күбәйгәндән-күбәйә.

Ни өсөн шундай көнгә ҡалдыҡ, ни өсөн әсәйҙәр балалары өсөн үрнәк була алмайҙар? Ни өсөн үҙ балаларын ташлап китеүсе әсәйҙәр һаны арта? Минең бер танышымдың улы ике балалы ҡатынға өйләнде. Икеөс йыл йәшәгән арала уларҙың тағы ике балаһы донъяға килде. Бәләкәй улдарына 1 йәш тә 8 ай тигәндә был ҡатын, тәүге иренән булған балаларын да алып, үҙенең тыуған яғына ҡайтып китте. Һуңынан ишетеүем буйынса, ул балаларын ата-әсәһенә ҡалдырып сығып китә һәм, урлашҡан өсөн, колонияға барып эләгә. Әсә кешенең енел уйлылығы арҡаһында нисә кешенең яҙмышы насар яҡҡа үҙгәрә, нисә бала етем ҡала.

Мин үсмерҙәр колонияһында эшләгән ваҡытта малайҙарҙың 70 процент тирәһе тулы булмаған ғаиләнән булып, тәртип боҙған, урлаған өсөн һәм наркотик арҡаһында килеп эләгәләр ине унда. 2000 - 2010 йылдарға тиклем колония-ҡасабаға ир заттары күберәк эләкте. Артабан ҡатын-ҡыҙҙар күпләп килә башланы. Авария яһап ултырғандар тураһында һүҙ ҙә юҡ. Үҙҙәре аңлы рәүештә эш боҙоп, кейәүгә лә сыҡмаған 18-19 йәшлек ҡыҙҙарҙың насар юлға баҫыуы үкенесле. Колонияға ауырлы көйө йә имсәк балаларын күтәреп килгән ҡатындар ҙа юҡ түгел. Йүнһеҙ әсә арҡаһында бейек ҡойма, сәнскеле тимер сымдар менән уратып алынған төрмә эсендә йөрөгән балаларҙы күреп, йән әсей. Ындай әсәләр иреккә сыҡҡандан һуң яҡшы тормош менән йәшәп китә, тип әйтеп тә булмай бит.

Икенсе яҡтан алып ҡарағанда, һуңғы йылдарҙа күп үҙгәрештәр күҙәтелә. Ҡатын-ҡыҙҙар тормошта, йәмғиәттә, эштә, көндәлектә ирҙәр урынын ала бара. Минең күҙәтеүҙәрем буйынса, был ҡайһы бер ирҙәргә оҡшай. Ни өсөн мин генә аҡса табам тип йөрөргә тейеш әле, быны бит ҡатыным да эшләй ала, тигән уйҙа улар. Бәлки, шуғалыр, күп кенә ҡатындар хәҙер Себер яҡтарына вахтаға ла, сит илдәргә лә эшкә сығып китәләр. Ә ирҙәре өй һаҡлай.

Башҡорт халҡының борондан, ғаиләлә ир-ат хужа, тигән яҙылмаған ҡануны бар. Шул ҡанун һанға һуғылмағанға ла ҡатын-ҡыҙ ирҙәр эшен башҡара, үҙен ғаиләлә хужа итеп тоя башлай. Тәмәке тартырға, эсергә, теләгән ваҡытта өйҙән сығып китергә, теләгән ваҡытта ҡайтып инергә була, тип һығымталай. Ә эскелек бер ваҡытта ла яҡшыға алып барғаны юҡ.

Аҙаҡҡы йылдарҙа колонияға наркотик менән мутлашыусыларҙың күпләп килеүе күҙәтелә. Нимә сәбәһен, шуны урырһың, тигән әйтем бар бит. Шуның кеүек, балалар ғаиләгә ҡырын эштәрҙе лә үҙ күҙҙәре менән күреп, белеп, күңелдәренә, фиғелдәренә һеңдерәләр. Ә балалар беҙҙең киләсәк. Шул турала онотмаһаҡ икән.

**Булат БАЙМОРАТОВ.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

*МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ*

# ҒӘФҮ ИТӘ БЕЛӘҺЕҢМЕ?



**Халыҡ мәҡәлдәрендә, әҙәби әҫәрҙәрҙә, дини тәғлимәттәрҙә, бөйөк аҡыл эйәләре әйткән һүҙҙәрҙә кемдер берәү рәнйетһә лә, уны ғәфү итеү мөһим, тиелә. Әммә...**

Һәр урында ғәҙеллек эҙләп йөрөүселәр өсөн ғәфү итеүнеү үтеп сыҡҡыһыҙ шырлыҡ кеүек тойола торғандыр. Сөнки насарлыҡ эшләгән, күңелеңде киткән берәүҙең ғәҙел яҙаһын алмай йөрөп ятыуы барыбер ҙә дөрөҫ түгел һымаҡ. Ул кеше лә һин кисергәндә кисерһен, ауырлыҡтар күрһен ине, тип уйлап, иҫәп тигеҙләнеүен теләйбеҙ. Әле генә һинең күңелеңде уйламай, ауыр һүҙ әйтеп, бысраҡ ғына ғына ятып китеүсене ғәфү итеү үҙенә хыянат итеүгә тиң кеүек. Әммә ғәҙеллек көсәп, бар асыуыңды күңелеңә туплап йөрөү ҙә һаулыҡ өсөн хәүефле. Күптәр быны белә, әммә асыуын килтергән кешенең ҡылығын ҡабат-ҡабат иҫенә төшөрөп, көйөгән яңыртып тора. Кемгәлер ҡарата асыу тотоу, йөрәк, мейе йә үпкәләр кеүек үк, яйлап ҡына кешенең айырылғыһыҙ бер тән ағзаһына әүерелә. Асыуҙы күңелдә ни тиклем оҙаҡ йөрөтһәк, шул тиклем ғәҙелерәк хөкөм булыр, үс алыу барыһын да тигеҙләр, тип көтәбеҙ. Кешене асыуландырған хәл-ваҡиға үткәндәрҙә ҡалған һәм үс алыу менән уны кире төҙәтеп булмауына төшөнөп етә алмайбыҙ.

Ғәфү итеү - үткәндәрҙе үҙгәртергә өмөтләнеп, иҫтәлектәргә бирелмәүҙе аңлата. Эйе, ҡапыл ҡубып, донъя емергән дауыл ғәҙел түгел, әммә нисек кенә ауыр булмаһын, ошо емерек ҡалала йәшәргә тура килә. Асыуланыуҙан файҙа юҡ, уның ярҙамында емерек йорттарҙы төҙөкләндереп булмай. Быны һеҙ үҙ ҡулығыҙ менән аҡарып сығырға тейеш. Кешене ғәфү итеү шулай уҡ төҙөкләндереү буйынса үҙ өҫтөнә ҙур яуаплылыҡ алыуҙы аңлата. Был йән тыныслығы алыу өсөн яһалған тәүге аҙым.

Ғәфү итеү һеҙҙе рәнйеткән кешеләрҙең гәйебен йомшартмай. Ғәфү иттем дә, ул кешене ярата башланым, тигәнде лә аңлатмай был. Иң мөһиме, улар ҡалдырған ауыр яра бер ҡасан да уналмаҫын аңларға кәрәк. Ошо ябай ғына хаҡиҡәтте аңлағандан һуң, яраны үҙегеҙҙән башҡа береһе лә ямап, уңалтмауына төшөнөрһөгөҙ. Шул саҡ тормош һеҙҙең өсөн артабан дауам итеүен күрерһегеҙ. Тимәк, һеҙ үҙ яҙмышығыҙға үҙегеҙ хужа, һеҙ ғәҙел. Ғәфү итеү - күңел яралары һеҙҙең киләсәккә хужа булмауын аңлау. Һеҙ ҡурҡып артҡа сигенмәйһегеҙ. Киреһенсә, бар көсөгөҙҙө туплап, артабан атлайһығыҙ.

✓ *Тарихтың ошондай ҡатмарлы һәм аяуһыҙ саҡтарында халҡыбыҙ үҙен-үҙе һаҡлап ҡалыу ғына түгел, бер өлөшө Аттила менән көнбайышҡа табан ҡуҙғалып, боронғо мадьярҙар, хәҙерге венгрҙар йәшәгән дәүләттең бер өлөшөн хасил итә.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# АТАЙ-ОЛАТАЙҘАРЫБЫҘ...

## киләсәкте алдан күргән

**Күренекле шағир, яҙыусы, драматург һәм публицист, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ғәзим Шафиҡов 2007 йылда, Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығын байрам иткән көндәрҙә алып килгәйне редакциябыҙға ошо мәҡәләһен. Ошо тарихи датаны, уның әһәмиәтен тағы бер тапҡыр күҙҙән үткәрәйек әле, тип, Ғәзим Ғәзиз улының яҙмаһын ҡабатлап баҫырға булдыҡ.**




### Йәшәйбеҙме, юҡмы?

Халҡыбыҙ тарихын өйрәнгән саҡта, иң тәүҙә, ундағы яҙмышыбыҙ өсөн хәл иткес роль уйнаған мөһим һәм ҡатмарлы мәлдәргә туҡталып китеү кәрәктер. Ул йылдарҙан ҡылыстар сыңлауы, һөңгөләр шартлап һынған, уҡтар шыйылдап осҡан тауыштар ишетелә. Ырыуҙар орандары яңғырай... Тарихтың тап шундай сая йылдарында башҡорт халҡы ауыр һынау үткән: уның рухы, физик, психологик һәм әхлаҡи ныҡлығы һыналған. Артабанғы йылдарға һынылышты ла халҡыбыҙ тап ошондай һынауҙарҙа алған. Тап шундай ауыр һынауҙар аша үткәндә тарҡау ырыуҙарҙан бер халыҡ булып ойошоу ихтыяжын да аңлаған халҡыбыҙ.

Тарихтан аныҡ билдәле тәүге һынау осоро - ярты донъяны Һундар империяһы яулап алған IV быуат. Һундар батшаһы Аттила көнбайышҡа ҡуҙғалған осорҙо тарихсылар "халыҡтарҙың бөйөк күсенеү дәүере" тип атай. Был ҡеүәтле империя күпме көслө дәүләттәрҙе, ғәйрәтле халыҡтарҙы һәм ҡәбиләләрҙе ер йөҙөнән юя, тарих сүплегенә һепереп түгә! Тарихтың ошондай ҡатмарлы һәм аяуһыҙ саҡтарында халҡыбыҙ үҙен-үҙе һаҡлап ҡалыу ғына түгел, бер өлөшө Аттила менән көнбайышҡа табан ҡуҙғалып, боронғо мадьярҙар, хәҙерге венгрҙар йәшәгән дәүләттең бер өлөшөн хасил итә. Дипломатик һәм стратегик планда башҡорт ырыуҙары тарихи фиҙаҡәрлек күрһәтеп, артабан йәшәү өсөн хоҡуҡ та яулай.

Икенсе һынау осоро - Сыңғыҙ хан дәүере. Сыңғыҙ хан юлында осраған һәр бер ҡаршылыҡты, ул халыҡ булһынмы, дәүләтме, бер ни урынына ла күрмәй, тапап үтеп, тәүге етди ҡаршылыҡты башҡорттарҙа осрата. Башҡорттар Сыңғыҙ хан ғәскәрен 14 йыл буйына Урал менән Каспий араһынан үткәрмәй тота, аҙаҡ был ҡаршы тороу килешеү менән тамамлана. Һөҙөмтәлә, Батый хан ғәскәре Башҡортостанды урап үтә һәм Болғар ханлығын ҡыйрата, артабан көнбайышҡа табан китә һәм Европаны яулай. Монголдар сафында күп кенә башҡорт яугирҙары һуғыша. Был хаҡта тәүҙә ошо осор тарихын өйрәнеүсе Лев Гумилев яҙып сыға.

Өсөнсө һынау - Аҡһаҡ Тимер менән Туҡтамыш хандың ҡапма-ҡаршы тороу осоро. Был саҡта ла халҡыбыҙ алдында "Йәшәйбеҙме, юҡмы?" тигән һорау килеп тыуа. XVI быуатта Рус дәүләтенә ҡушылырҙан алда ла башҡорттар шундай һорау алдында тороп ҡала. Бөгөн башҡорт халҡы үҙ республикаһында, үҙ дәүләтселегендә йәшәй икән, атай-олатайҙарыбыҙ был аҙымға барып, дөрөҫ эшләгән. "Йәшәйбеҙме, юҡмы?" тигән һорау тарихта беҙҙең алда бик күп тапҡыр ҡуйыла. Шул уҡ Салауат яуы алдынан да, Рәсәйгә Наполеон, Гитлер ябырылып килгәндә лә...

1917 йылғы Октябрь инҡилабы алдынан да башҡорт халҡы шундай һорау алдында ҡала. Рәсәйҙә ҡыҙыл инҡилап башлаған көстәр Юденич, Врангель, Корнилов һәм башҡалар тарафынан Мәскәүҙә ҡамалып, хәлдәре ҡыл осонда ҡалған саҡта Ленин Башҡорт ғәскәрен иҫенә төшөрә һәм уны йәлеп итер өсөн Башҡорт Автономияһы хаҡындағы Килешеүгә ҡул ҡуйырға мәжбүр була. Константин Федин рус революцияһын Петроградты һаҡларға килгән башҡорт һыбайлылары ҡотҡарҙы, тип юҡҡа ғына яҙмай. Был һуғыштарҙа комбриг Муса Мортазин яугирҙары 26 тапҡыр яуға инеп, 26 тапҡыр еңеп сыға.

**(Дауамы бар).**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ҠОЛЛОҠҠА ЭЛӘККӘН...

## һәм суҡындырылған



Хәрби коллегия Фәндәр академияһының кәнсәләренән, "Бетковтың ҡатыны Ентавлета Тредьяковскийҙа хеҙмәтсеме һәм ул уға ниндәй акттар буйынса хужа?" тигән һорауға яуап талап итә. Быға яуап итеп, Фәндәр академияһы Коллегияға Тредьяковскийҙың үҙ ҡулдары менән яҙған кире ҡағыуын ебәрә: "Башҡорт Мәдем Бетков ялғанлай... Миндә 1742 йылдан алып бер башҡорт ҡатыны йәшәй, уны минең ҡатыныма хеҙмәт итергә тип, ҡайным Филип Иванов бирҙе... 1740 йылдан уны беҙ суҡындырып, Наталья Андреева тип атаныҡ... Башҡорт гренадеры уны, Ҡаҙан губернаһынан офицерҙар алып килгән, тип бер аҙ ялғанлай. Эш улай булманы... Сөнки был ҡатын хәрбиҙәр тарафынан Һамар ҡалаһы эргәһендә баш күтәргән башҡорт-бурҙары араһынан ҡулға алына. Башҡорттарҙың күпселеге шунда язалана, ҡатындары һуңынан Һамарға килтерелә һәм минең ҡайныма бирелә. Шулай уҡ башҡа баш күтәреүселәрҙең ҡатындары, ҡыҙҙары һәм улдары, баш күтәреүселәргә яза рәүешендә, указ буйынса таратылып бирелде...

Был ҡатын Башҡортостанда саҡта Мөхәммәт дине буйынса ошо гренадерҙың хәләл ефете тип һаналһа ла, хәҙер инде ул христиан динле һәм уны басурман ҡатыны тип таныу, динһеҙ менән йәрәштереү ҡағиҙәләре бер ҡайҙа ла яҙылмаған. Икенсе яҡтан, беҙҙәге Наталья Андреева ул гренадерҙың ҡатыны булмауы ла мөмкин, сөнки ул быны йәрен ҡотҡарыу өсөн түгел, ә бында башҡорт ҡатыны табыу ауыр булған өсөн эшләйҙер, тигән шик тә бар. Ә минең ҡайным, указ буйынса был ҡатындың законлы хужаһы булғас... уны телгә алынған гренадерға биргеһе килмәй...

Был мәғлүмәтте мин, профессор Василий Тредьяковский, үҙ ҡулдарым менән яҙҙым. 1746 йылдың октябре, 13-сө көн".

Хәрби коллегия Бетковтан хәҙер инде Наталья Андреева тип йөрөтөлгән ҡатын ысынлап та уның ҡатыны икәнлеген раҫлауҙы талап итә. Был талапҡа Бетковтың етәкселәре бергә хеҙмәт иткән арҡаҙаштарының шаһитлығын - "суҡындырылғандан һуң Наталья Андреева тип аталған ҡатын Бетковтың ҡатыны" тигән күрһәтмәләрен килтерә.

1747 йылдың июнендә обер-комендант Игнатьев Хәрби коллегияла, "Тредьяковский беҙҙәге гренадер грек динен ҡабул итһә, уға ҡатынын бирәсәге хаҡында вәғәҙә иткәйне, әммә был ваҡытта Бетков Петр Петров булып йөрөүгә ҡарамаҫтан, Игнатьевтан килгән вәкилгә: "Наталья Андрееваны бирмәйем, ул минең крепостнойым", - тип белдерә", тип хәбәр итә.

Ләкин был тарих бәхетле тамамлана. Хәрби коллегия, Тредьяковскийҙың ҡаршылашыуына ҡарамаҫтан, 1947 йылдың 29 июнендә, гренадер Петровтың ҡатыны Наталья Андрееваны бер һүҙһеҙ иренә ҡайтарып бирергә, тигән ҡарар сығара. Был ҡарарҙы кисекмәҫтән үтәү Фәндәр академияһына йөкмәтелә.

Ниһайәт, 20 августа Фәндәр академияһы Коллегияға, Андреева иренә ҡайтарып бирелде, тип хәбәр итә. Билдәле рус шағиры В. Тредьяковскийҙың ир менән ҡатынды айырыуҙан тартынмай, "суҡындырылған милке"нә йәбешеп ятыуы миҫалынан сығып, башҡа алпауыттарҙың үҙҙәрен нисек тотошон күҙалларға мөмкин.

**Борис Тарасовтың "Россия крепостная. История народного рабства" китабынан.**
**(Аҙағы. Башы 16-сы һанда).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



**Сергей РУДЕНКО**

# БАШҠОРТТАР

## Йорт производствоһы

Башҡа кәсептәр тураһында һөйләрҙән алда, башҡорттарҙың йәнлек һәм хайуан тиреһен эшкәртеү үҙенсәлектәренә туҡталырға кәрәк. И.Г. Георгиҙың һүҙҙәренә ҡарағанда, башҡорттар "йомшаҡ ваҡ-төйәк тирене әсегән һөттә тотоп алғандан һуң, хайуандарҙың баш мейеһен һөртәләр һәм аҡбур менән ышҡыйҙар". Ысынлап та, был башҡорттар араһында киң таралған ысул булған. Һарыҡ бәрәсе һәм быҙауҙарҙың тиреһен киптергәндәр һәм ҡул менән йомшартҡандар. Ҙурыраҡ тиреләрҙе, мәҫәлән, һарыҡтың тиреһенең йомшаҡ яғын тупаҫ бысаҡ менән артыҡ майҙан таҙартып, һуңынан киптергәндәр. Кипкән тирегә йәш ҡорот һөртөп, урап ҡуйғандар. Төньяҡ-көнсығыш башҡорттары тирегә эркет һыуы һөрткән. Ошо рәүешле әсетеп киптерелгән тирене кирге тип аталған махсус ҡоролма менән эшкәрткәндәр.



Кирге - ағас ырғаҡҡа саңғы һынығы, иҫке бысаҡ йәки берәй үтмәҫ тимер киҫәге нығытылып яһалған **(һүрәт)**. Йомшартылған тирене ҡайһы берҙә аҡбур менән ағартҡандар. Тирене ошо рәүешле эшкәртеү башлыса Башҡортостандың көньяҡ өлөшөндә һәм Урал аръяғында күҙәтелгән. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары тирене татар йәки урыҫтарға эшкәртергә биргән. Эшкәртелгән тиренән кейем теккәндәр. П.С. Паллас һүҙҙәренә ҡарағанда, XVIII быуаттың аҙағында башҡорттар тун тегеү өсөн тәғәйенләнгән һарыҡ тиреһен "ямғырға, башҡа яуым-төшөмдәргә бирешмәһен өсөн" төтөндә ыҫлаған.



Быҙау, ҡырҡылған һарыҡ, кәзә тиреләренән кейем-һалымдан тыш, йөнө тыш яҡҡа ҡаратып муҡсалар тегелгән. Ул сарма тип йөрөтөлгән **(һүрәт)**. Был муҡсалар ярайһы ғына ҙур булған һәм төрлө әйберҙәр һаҡлау, күсереп йөрөтөү өсөн ҡулланылған. Муҡса уға беркетелгән махсус ҡайыш менән бәйләп ҡуйылған. Икенсе, ҡалынраҡ ҡайыш менән ул эйәргә беркетелгән. Сарма күсмә тормош алып барған башҡорттарҙа, Көньяҡ Уралда һәм уның көнсығыш һыртында осраған.

Ваҡ тиреләрҙе эшкәртеү өсөн еңелерәк ысулдар һайланһа ла, тире эшкәртеү ҡатмарлы эш һаналған. И.Г. Георги хеҙмәттәрендә был турала бер аҙ мәғлүмәт бар, ә И.И. Лепехин иһә тире эшкәртеү тураһында ентекләберәк яҙа. "Сей тирене төрлө яғынан мөмкин булған тиклем тарттырып, ергә бәләкәй ағас ҡаҙыҡтар менән беркетеп, ҡояшта киптерергә һалалар. Кипкән тирене яҙға тиклем һаҡлайҙар. Яҙ махсус ыҫлау урынына һалалар. Тире ыҫлау ҡоролмаһы түбәндәгесә яһала. Баҙ ҡаҙыла һәм баҙҙан ер аҫтынан ике аршин самаһы оҙонлоҡта тишек эшләнә, уның ауыҙы ерҙең өҫтөнә сығып тора. Баҙҙың ауыҙын төбө булмаған ҡабыҡ ҡумта менән ҡаплайҙар, нигеҙен ер менән күмәләр. Тирене элеп ҡуйыр өсөн ҡумта һәм баҙ ауыҙына еп һуҙалар йәки һайғауҙар һалалар. Махсус ҡаҙылған тишекте серегән ағас менән тултырып, уға ут тоҡандарылар һәм ауыҙын томалап ҡуялар. Төтөн канал буйлап баҙға тула һәм тире оҙайлы ваҡыт төтөндә ыҫланып тора. Тиренең ҡалынлығана ҡарап, был эш өс аҙнаға тиклем һуҙыла. Ошо рәүешле эшкәртелгән тиренән аяҡ кейемдәре генә түгел, һауыт-һаба ла тегелә". П.С. Палластың һүҙҙәренә ҡарағанда, бындай тире ыҫлай торған ҡоролмалар Мейәс йылғаһы буйында йәшәгән башҡорттарҙың барыһында ла булған. XX быуаттың башында иһә Урал аръяғында ғына һаҡланып ҡалған.

**(Дауамы бар).**

✓ Балалар - мөхәббәтле заттар, "атай" һәм "әсәй" һүҙҙәрен әйтеү улар өсөн бәхет. Һәм шәхсән мин үҙем бер ҡасан да уларҙың ата-әсәләренә яман һүҙ тейҙермәйем. Ул балаларҙың ҡайырылған булһа ла, осор ҡанаттары бар әле.



БЕҘҘЕҢ ӘҢГӘМӘ

# ЕТЕМ-ЕҪЕРҘӘРҘЕҢ...

## яҙмыштарын дөрөҫ юҫыҡҡа көйләйбеҙ

**Етәксе кеше - оркестрҙың һәр тактын, моңон тойоп эшләгән дирижер кеүек, тиҙәр. Ә бына етемлек әсеһен татыған балаларҙы тәрбиәләп аяҡҡа баҫтырыу етәксенән дә, уның ҡулы аҫтында эшләгән тәрбиәселәрҙән дә ниндәй ҙур сабырлыҡ, күңел йылыһы талап итеүен күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ. Бына инде 20 йылдан ашыу ғүмерен ошо эшкә бағышлаған педагог, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге Ғаилә тәрбиәһенә булышлыҡ итеү үҙәге директоры, тәрбиәләнеүселәре өсөн икенсе әсәйгә әүерелгән Фәнисә Малик ҡыҙы БӘҘРЕТДИНОВА менән еңел булмаған хеҙмәтенең нескәлектәре хаҡында әңгәмәләштек.**

**Ни өсөн педагог һөнәрен һайланығыҙ? Балалар йорто - ҡәҙимге уҡыу йорто түгел, үҙе бер айырым донъя, унда эшкә килергә нисек йөрьәт иттегеҙ?**

- Мин үҙем Әлшәй районы ҡыҙы, Ибрай ауылында 8 балалы ғаиләлә тыуғанмын. Мин 2-се синыфты тамамлағас, ғаиләбеҙ беҙгә лайыҡлы белем биреү ниәте менән әсәйемдең тыуған ауылы Ҡармышҡа күсеп килә. Ҙур донъя шунда асылды беҙгә. Мәктәптең базаһында пионер лагеры гөрләп торған, ауыл мәҙәниәте йортонда бик затлы шәхестәр - Зәкиә апай һәм Баязит ағай Йәнгировтар эшләгән ваҡыттар ине. 3-сө синыфҡа уҡырға төшкәс, тәү тапҡыр уҡытыусыларыма ғашиҡ булдым мин. Шул ваҡытта минең кескәй генә күңелемдә педагогикаға һөйөү яралғандыр, моғайын.

Мәктәптән һуң Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында, башҡорт-рус бүлегендә белем алдым. Беҙҙең төркөмөбөҙ бик көслө, төркөмдәштәрем бар яҡлап та килгән шәхестәр ине. Юғары уҡыу йортон тамамлағас, мин Нуриман районының Иҫке Күл ауылы мәктәбендә уҡытыусы булып эш башланым. Бер йыл эшләгәс тә директор урынбаҫары итеп тәғәйенләнеләр, унан һуң директор булып киттем. Ун ете йыл ғүмерем шул мәктәпкә бағышланды. Йәш булыуыма ҡарамаҫтан, мине шулай үҫтергәндәре өсөн коллективҡа әле лә ҙур рәхмәтлемен.

**Эшегеҙҙең нескәлектәренә нисек төшөндөгөҙ? Һеҙҙең тәрбиәселәр коллективы нисек формалашты? Башҡорт мөхите менән нисек таныштыраһығыҙ?**

- Балалар йорто - кеше аяғы баҫмаған утрау кеүек. Унда эшләргә генә түгел, йәшәргә, һәр баланың аянысլы яҙмышын йөрәк аша үткәрергә кәрәк. Был шарттарҙа бөтәһе лә эшләй алмай. Тәүге эш көнөмдә миңә тиклем директор булып эшләп киткән кешенең телефон номерын һорап алып, уға шылтыраттым. Иң беренсе сиратта үҙем менән таныштырҙым, ун йыллыҡ хеҙмәте өсөн рәхмәт әйттем һәм был шарттарҙа нисек эшләргә, нисек түҙемлек һаҡларға тип кәңәш һораным. Балалар йортон йөрөп, ҡарап сыҡҡандан һуң, береһенән-береһе бәләкәй, күҙгә мөлдөрәп ҡарап торған сабыйҙарҙы күреп, күңелем тулып, иланым...

Шәһит Хоҙайбирҙин аслыҡ йылдарында, Граждандар һуғышы осоронда етем ҡалған башҡорт балалары өсөн беҙҙең балалар йортон асҡан. Тәүҙә ул мәктәпкәсә йәштәгеләр өсөн генә тәғәйенләнгән булһа, бөтә райондарҙан бер ғаиләнән генә бишәр-алтышар бала килә башлағас, бер туғандарҙы айырмаҫ өсөн бер нисә балалар йорттарын берләштерәләр. Мине шул милли башланғыслы учреждениела башҡорт мөхитен тергеҙергә ебәрҙеләр. Сөнки уның уставында тәрбиәселәр әҙәби башҡорт телен белергә тейеш тип билдәләнгән, ә ғәмәлдә аралашыу тик рус са ғына булған. Шуға күрә үҙ бурысым өҫтөндә ентекле эш башланым. Мин килгән осорҙа балалар менән ҡаты мөғәмәләлә булған, уҫал ҡарашлы урынбаҫар эшләй ине. Миңә лә ул үҙенең ошо уҫал алымдарын тәҡдим итте. Әммә мин уларҙан баш тарттым, тормошта бит ҡурҡытып, әрләп, бер кемде лә ҡулда тотоп булмай. Был балаларҙың яҙмыштары хаҡында уҡыһаң, уларға уҫаллыҡ күрһәтеү, ҡысҡырыу мөмкин дә түгел, шуға күрә яйлап ҡына балалар күңеленә яңы юл һала башланым.

Яҡшы кеше булып үҫһен өсөн баланың күҙ алдында, аралашыу мөхитендә матур өлгөләр булырға тейеш. Коллектив ағзаларына ла эште яғымлы телмәрҙән, үҙеңде килешле итеп тотоуҙан башларға кәрәк икәнен әйтеп торам. Яңыраҡ ҡына күңелемдә уйылып ҡалған бер хәл булды. Эшкә бер йәш ҡыҙҙы ҡабул иткәйнем, баҡтиһәң, был ҡыҙ йәшерен генә вейп ҡуллана икән. Шуны ял көндәрендәге дежурлыҡ ваҡытында беҙҙең оло төркөмдәге бер егетебеҙ күреп ҡалған да, миңә инеп: "Фәнисә Маликовна, ул апай һеҙҙең кеше түгел", - тип ипле генә итеп һөйләп бирҙе. Был һүҙҙәр беҙҙең коллективтағы эш алымына, мөхитенә бер ишара була ла инде.

Осрашыуға килгән рухлы ветеран апайҙарҙың тәүге һорауы: "Ни өсөн балалар башҡортса һөйләшмәй?" - була. "Сөнки хәҙер беҙҙә башҡорт балалары юҡ, шуға ҡыуанырға кәрәк", - тием яуап итеп. Әммә ләкин статусыбыҙ үҙгәреүенә, башҡа милләт вәкилдәре күп булыуға ҡарамаҫтан, электән һаҡланып килгән йола бар - балалар беҙгә "апай" тиеп өндәшә, "һаумыһығыҙ" тип сәләм бирә. Беҙ бит Башҡортостанда йәшәйбеҙ, шуға күрә балаларыбыҙҙы милли йолаларыбыҙға, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙгә, йырбейеүгә лә йәлеп итәбеҙ.



**Әйтеүегеҙсә, һеҙ етәкләгән учреждение "Ғаилә тәрбиәһенә булышлыҡ итеү үҙәге" тип атала. Был үтә ҙур яуаплылыҡ йөкмәткән атама, шулай түгелме?**

- Әлбиттә, шулай. 2021 йылда беҙҙең балалар йортоноң 100 йыллығын билдәләнек. Бындай дата беҙҙең илдә балалар йорттарына һаман да мохтажлыҡ бар, тигәнде аңлатһа ла, уларҙың һаны кәмегәндән-кәмей барыуы бер ни тиклем күңелдәрҙе йыуата. Беҙҙең статусыбыҙ үҙгәреүе лә шуға бер ишара тип әйтергә мөмкин. Хәҙер беҙгә тик Өфө балалары ғына урынлаштырыла, сөнки кеше үҙ тамырҙарынан өҙөлөргә тейеш түгел. Беҙҙең йорт - баланың ваҡытлыса йәшәй торған урыны, ул килеү менән беҙ уны ғаиләле итеү өҫтөндә эшләй башлайбыҙ. Былтыр, мәҫәлән, беҙ ун баланы ғаиләләргә урынлаштырһаҡ, 2026 йылда илле ете бала бындай бәхеткә өлгәште. Был беҙҙең төп эшебеҙ, сөнки бала тик ғаиләлә генә кеше булып китә ала.

Эйе, бындай ғаиләләргә урынлаштырыу хәстәрлеге элегерәк тә беҙҙең бурысҡа инә ине. Мәҫәлән, быға саҡлы патронат тәрбиә хаҡындағы закон бик яҡшы эшләп килде. Хәҙер беҙ ата-әсәлеккә кандидаттарҙы үҙебеҙ әҙерләйбеҙ, үҙебеҙ уҡытабыҙ. Ошо балалар йортонда эшләү дәүеремдә йәмғиәттең дә, хөкүмәттең дә етем балаларға ҡарата булған мөнәсәбәте яҡшыға үҙгәреүен күҙәтәм. Элек атай-әсәй етем балаларҙы ҡыҙлыҡҡа, уллыҡҡа мәжбүр булғандан, йәшереп кенә алһа, хәҙер улар беҙгә үҙҙәренең балалары була тороп та, сабыйҙарҙы бәхетле итеү маҡсатын күҙҙә тотоп, асыҡтан-асыҡ мөрәжәғәт итәләр.

Етем сабыйҙарға ғаилә йылыһын тойорға шулай уҡ Рәсәй Федерацияһының 481-се ҡарары ла ярҙам итә, унда уларҙың йәшәү шарттарын йорт шарттарына яҡынайтыу тураһында билдәләнә. Шуға ла беҙҙәге үҙәктә лә балалар төркөмдәр менән түгел, ә төрлө йәштәге һигеҙ кешелек "ғаиләләр" менән йәшәйҙәр. Ул ғаиләләрҙе төҙөүҙең үҙ принциптары бар: бер туғандар йә беҙгә килгәнсе бер-береһе менән таныштар бер ғаиләгә туплана. Һәм элек барыһы бергә ҙур ашханала ашаһалар, хәҙер һәр ғаиләгә ашханалары, йыуыныу һәм ял бүлмәләре булған бүлмәләр, тәғәйенләнгән.

Бындай йылы мөхиттә балаларҙы үҙҙәрен-үҙҙәре хеҙмәтләндерергә өйрәтәбеҙ: улар һәр ял һайын генераль йыйыштырыу ойоштора, ашхананан аҙыҡ алып килеп, үҙҙәре табын ҡоралар һ.б. Профориентация сиктәрендә һәр ваҡыт, мәҫәлән, аш-һыу буйынса оҫталыҡ дәрестәре үткәрелеп тора. Һәр ғаиләнең туҡланыу бүлмәһенән тыш, бешеренер өсөн йыһазландырылған бүлмәләре бар. Бындай рәсми булмаған шарттарҙа бала ла ниндәйҙер эшкә өйрәнә, тәрбиәселәр менән дә йылы мөнәсәбәт булдырыла.

Ғөмүмән, был донъяла ниндәй ҙә булһа һәләткә эйә булмаған бала юҡ, беҙҙә уларҙың һәләттәрен асыу мөмкинлектәре бихисап. Мәҫәлән, "Мастерица" тигән тегеү цехыбыҙ бар: унда тегенеү менән дә булалар, бисер, сигеү кеүек оҫталыҡты ла үҙләштерәләр. Балалар үҙебеҙҙә булған спорт, бейеү түңәрәктәренә лә, ҡалалағы көрәш, футбол кеүек төрлө секцияларға ла әүҙем йөрөйҙәр. Беҙҙән тәрбиәгә ике бала алған бағыусылар малайҙар өсөн оҫтахана асты. Улар үҙ ҡулдары менән бинала ремонт эшләп, станоктар ултыртып, балаларҙы үҙҙәре үк төрлө оҫталыҡ серҙәренә өйрәтәләр. Шундай әхләкле, маҡсатлы, изгелекле кешеләр менән аралашыу ҙа балалар өсөн ҙур файҙа.

**Ябай мәктәптә хәҙерге ваҡытта тәрбиә яғының аҡһауы хаҡында йыш ишетелә. Балалар йортондағыларға белем биреүҙең үҙ проблемалары барлығы, ҡатмарлы икәнен дә беләбеҙ. Ә һеҙ эшегеҙҙә ниндәй мәсьәләне беренсе урынға ҡуяһығыҙ?**

- Мин ғүмерем буйына тәрбиә һәр саҡ беренсе урында булырға тейешлегенә инанғанмын. Беҙгә төрлө-төрлө балалар килә: исемен дә яҙа белмәгән, бер көн дә мәктәпкә йөрөмәгәндәре, мөхиткә сыҡмағандары ла бар улар араһында. Мәктәп партаһы артына барып ултырғанға тиклем мотлаҡ уларҙың тәртибе менән эшләргә, күңелдәренә үтеп инергә кәрәк. Беҙҙең хеҙмәт - Хоҙай Тәғәлә алдындағы яуаплылыҡ. Килгән баланың яҙмышын дөрөҫ "яҙмаһаң", ул һинең ғүмерлек хатаң буласаҡ.

Баланың ниндәй стресс кисергәнен аңлау зарур. Ата-әсәһенән айырылыу, етемлек статусы биргәнсе, приютта булыуы уның өсөн бик ауыр. Ошо шаңҡыуҙарҙан арынып та өлгөрмәйенсә, ул беҙгә килеп эләгә - бынының тағы бер стресс. Әлбиттә, уның нәфрәте иң тәүҙә беҙгә йүнәлтелгән була, ата-әсәһенән уны тап беҙ айырған кеүек ҡабул итә улар. Әммә, ниндәй генә булһалар ҙа, улар өсөн ата-әсәләре һәр саҡ яҡшы кеше булып ҡала - етем балаларҙың шул сифаты, ысынлап та, таң ҡалдырырлыҡ.

**Ә шулай ҙа суд был балаларҙың ата-әсәләрен юҡҡа ғына ата-әсәлек хоҡуғынан мәхрүм итмәгән бит инде. Әммә бындай яза менән уларҙы төҙәтеп буламы?**

- Балалар - мөхәббәтле заттар, "атай" һәм "әсәй" һүҙҙәрен әйтеү улар өсөн бәхет. Һәм шәхсән мин үҙем бер ҡасан да уларҙың ата-әсәләренә яман һүҙ тейҙермәйем. Ул балаларҙың ҡайырылған булһа ла, осор ҡанаттары бар әле, уларҙы күтәрергә, нығытырға ғына кәрәк. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бик һирәк осраҡта ғына уларҙың ата-әсәләрен үҙгәртеп була. Минең тәжрибәмдә биш балаһы беҙгә килеп эләккән бер ғаилә шулай яҡшы яҡҡа үҙгәреп китте. Тәүҙә атаһы эскелектән арынды, эшкә урынлашып, ҡатынына ярҙам итте. Унан һуң бергәләп, ауыл еренә ҡайтып, йорт һалып, балаларын үҙҙәренә алдылар.

Бында беҙҙең учреждениеның шундай ҡағиҙә-шартын телгә әйтеп үтергә кәрәк: балаларҙы ғаиләләренән алғансы, ата-әсәләр менән профилактик эш үткәрелә. Балалар беҙҙең үҙәккә килеп эләккәндән һуң да уларҙың ата-әсәләренә үҙ тәртиптәрен үҙгәртеү өсөн алты ай һынау ваҡыты бирелә. Беҙ шулай уҡ ата-әсәһенән бөтөнләй мәхрүм ҡалған балаларға ниндәй ҙә булһа терәк-таяныс була алырлыҡ туғандарын эҙләү өҫтөндә лә эшләйбеҙ, сөнки уларҙың ҡайһы берҙәре, далалағы ҡамғаҡ кеүек, япа-яңғыҙҙар. Бына ошондай балалар беҙҙән сығып киткәндә йәнебеҙ әсенеп тороп ҡалабыҙ.

**Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был донъяла насар юлдан барыусылар бер ҡасан да бөтмәҫ, ахыры, шуға күрә балаларға ошондай**

✓ *Ошоға тиклем эшкәртеп, сәселеп, иген биреп килгән һөрөнтө ерҙәрҙең яртыһы ташландыҡ хәлендә, уларҙы ҡый үләндәре баҫып алды. Мал һаны кәмеү сәбәпле күпме көтөүлектәр, сабынлыҡтар ҡулланылмай.*



**мөмкинлектәр асыу дәүләт кимәлендә генә түгел, ғөмүмән, кешелек кимәлендәге мәсьәлә. Шул йәһәттән бөгөнгө көндә балалар йорттарының булыуы бик мөһим эш, шулай бит?**

- Тап шулай. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөнгө көндә эскелек, наркомания кеүек күренештәр бик күп. Ә насарлыҡ үҙ артынан тағы ла насарлыҡтар барлыҡҡа килтерә. Был йәһәттән беҙ дини ойошмалар: сиркәүҙәр, мәсеттәр менән дә эшләйбеҙ. Бала беҙгә килгәс тә ниндәй динде үҙ итеүе хаҡында ҡыҙыҡһынабыҙ. Бер егетебеҙ беҙгә килгәнсегә тиклем үк храмда уҡып, хорҙа йырлап йөрөй ине, ул балаға беҙ шул юлды дауам итһен өсөн яңы шарттар булдырҙыҡ. Һәр ваҡыт Ураҙа, Ҡорбан ғәйеттәре кеүек дини байрамдарҙы үткәреп торабыҙ. Балалар үҙе һайлаған йүнәлештә әхләҡи тәрбиә ала.

**Балалар һеҙҙең йорттан 16-18 йәштәрҙә сығып китеп, уҡырға ингәндән һуң да һеҙҙән йөрөп уҡыйҙармы? Ғаиләгә алынғандар, үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫҡандар менән бәйләнеш өҙөлмәйме?**

- Күбеһе туғыҙынсы синыфты тамамлағас та колледждарға китә, ун беренсе синыфҡа бик һирәктәр генә ҡала. Уҡырға ингәндә ятаҡхана ҡаралмаған булһа, бала артабан да беҙҙән йөрөп уҡый. Һәр сығарылыш алдынан консилиум йыйабыҙ: баланың психологик йәһәттән әле нығынмағанын, оло тормошҡа әҙер түгел икәнен белһәк, әлбиттә, уны үҙебеҙҙә ҡалдырабыҙ. Хатта, мәҫәлән, бала 18 йәшкә етеп тә, йәшәр ерһеҙ ҡалһа, беҙҙә йәшәү мөмкинлеге биргән программа бар. Уларға айырым бүлмә бирелә. Шулай уҡ йыраҡтан килгән ата-әсәләр балалары менән аралашһын өсөн дә айырым бүлмә булдырғанбыҙ.

Ҙурайған балалар беҙҙе хәтерләй генә түгел, ғүмерлеккә беҙҙең менән бергә ҡала, тип әйтһәң дә була. Улар һәр ваҡыт шылтыратып, хәлдәребеҙҙе һорашып торалар, рәхмәт әйтәләр, осрашыуҙарға ғаиләләре менән киләләр. Ҡунаҡҡа килгән, хәҙер инде үҫкән балаларыбыҙҙан ҡайһы бер хәлдәрҙе иҫкә алып, беҙҙең эшмәкәрлектә етешмәгән нимәләр хаҡында ла һорашам. Мәҫәлән, беҙҙең бер малайыбыҙ үҙе тәртипһеҙ ҙә түгел, әммә һәр саҡ урлаша ине. Эш контролдән сыға башлағас, был баланы Мәскәү тарафтарына махсус учреждениеға ебәрҙеләр. Беҙгә кире әйләнеп ҡайтҡанда ул ҙурайған, үҙен тотошо йәһәтенән яҡшы яҡҡа үҙгәргән, йәғни бөтөнләй икенсе кеше ине. Беҙ уның теге ҡылығы тураһында ла иҫкә алдыҡ. Уның аҡланыуға түгел, ә төплө һығымталарға нигеҙләнгән яуабы уйландырҙы.

Эйе, бына ошондай аралашыуҙарҙан һуң тыуған фекер, уйланыуҙар аша дөрөҫ тәрбиә алымдары формалаша ла инде. Етем баланы тәрбиәләүҙең әҙер генә рецебы юҡ. Ул йылдар буйы түккән хеҙмәтең, тырышлығың менән булдырылған хәҡиҡәт. Һәм беҙҙең коллектив ошо хәҡиҡәткә тоғро ҡала.

**Айһылыу ДАУЫТОВА менән Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әңгәмә ҡорҙо.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ҠАТМАРЛЫ ВАҠЫТТА ЙӘШӘҺӘК ТӘ...

## ер һәм икмәк ҡәҙерен белеү кәрәк



**Зиннур Ямалетдин улы Бикбов - бала сағы һуғыш осорона тура килгән, һуғыш һәм унан һуңғы ауыр йылдарҙың михнәттәрен, башҡа тиҫтерҙәре кеүек үк, һоҫоп "эскән" быуын вәкиле ине. Ул Йылайыр районынында күп йылдар төрлө етәксе вазифаларҙа эшләне, тормошо, ғаиләһе, хеҙмәте, замандаштары һәм үҙ заманы тураһында "Ер кешеһе" тип исемләнгән китап яҙҙы. 2020 йылдың ноябрендә 80 йәше тулған уҙаманды мәкерле ковид арабыҙҙан алып китте. Зиннур Ямалетдин улының китабынан уйлыларҙы уйландырыр өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ:**

***Быныһы - бала сағындағы бер ваҡиға тураһында:*** "Бесәнде бөтөрөп ҡайтҡас, үгәй атай менән бер көтөү эре мөгөҙлө заготскот малын Орскиға ит комбинатына ҡыуып киттек. Орскиға еткән ерҙә ике үгеҙ, һөҙөшөп, береһененең аяғын һындырҙы. Миңә бер һыныҡ икмәк тоттороп, иртәгә беҙ килгәнсе үгеҙҙе ҡара, уны тейәп алып китербеҙ, тип малды артабан ҡыуаланылар. Мин дүрт көн буйы шул үгеҙ менән бәләкәй генә йылға буйында йәшәнем. Бик ныҡ асыҡтырҙы. Өсөнсө көнөнә ике саҡрым самаһы алыҫлыҡта сым менән кәртәләнгән ерҙә кешеләр күренгеләне. Шунда табан киттем. Барһам, унда йәшелсә, ҡарбуз баҡсаһы икән. Эт менән ҡарауылсыһы йөрөй. Ҡурҡып, кире үгеҙ эргәһенә киттем дә, аслыҡҡа сыҙамай, кискеһен баҡсаға тағы барҙым. Шыуышып килеп, бер ҡарбузды тәгәрәтеп ҡойма аша сығарғайным, ҡарауылсының эте һиҙеп ҡалды һәм, өрөп, миңә ташланды. Ырғып торҙом да, шаҡ ҡатып һерәйҙем дә ҡуйҙым. Эт килеп мине еҫкәй башланы. Ҡарауылсы, минең йонсоған йөҙөмдө, йыртылып бөткән салбар-кейемемде күреп, эштең ниҙә икәнен шәйләне, буғай. Ул өлкән кеше ине. Будкаһына алып барып, бер һыныҡ икмәк, колбаса бирҙе, ҡарбуз ҡосаҡлатып ҡайтарып ебәрҙе. Ә үгәй атай һаман да килмәй. Бигерәк тә төндәрен шөрләтә. Өшөп, үгеҙ һыртына башымды һалып, таң аттырам..."

***Бындай ауырлыҡтар, ыҙа сигеүҙәр, асығыуҙар гел бергә атлаған бәғерһеҙ юлдашы була ул быуын балаларының. Шуға улар тормош, икмәк, ер ҡәҙерен белеп үҫә. Артабан - авторҙың шул турала уйланыуҙары:*** "Борон аслыҡ ваҡытында әсәйҙәр: "Икмәктең вағын төшөрмәгеҙ, ул алтындан да ҡиммәтерәк", - ти торғайны. Ә ул ҡиммәтле ризыҡты ер бирә. Ер - тыуған өй ул, уны һаҡларға бурыслыбыҙ. Ерҙе әсәйең менән тиңләштереү кәрәк. Кеше ерҙә тыуа һәм донъя ҡуйыу менән ергә әйләнеп ҡайта. Был Йыһан ҡануны, уны бер кем дә үҙгәртә алмай.

Мин үҙемде ер кешеһе, тип һанайым. Ҡайҙа ғына эшләһәм дә ергә хөрмәт менән ҡараным, уны тере күрҙем. Ысынлап та, был шулай, сөнки ерҙә беҙ күрмәгән әллә күпме микроорганизмдар, минералдар бар. Үҫемлектәр шуларҙың көсө менән үҫә. Һәр кемгә билдәле: әгәр ҙә һыйырҙы насар ҡараһаң, төрләндереп ашатмаһаң, ул һөттө аҙ бирә. Ер ҙә шулай. Әгәр ҙә яҡшы агротехника саралары ҡулланмаһаң, минералдар менән ашламаһаң, фән ҡаҙаныштарын инҡар итһәң, уңышты етерлек кимәлдә алам тимә. Колхоз-совхоздар бөтөрөлөп, хөкүмәт ерҙе арендаға алырға, фермерлыҡ менән шөғөлләнергә рөхсәт биргәс, күптәр иген сәсеүгә тотондо. Тик бер ни ҙә сығара алмай, ерҙе ҡый үләндәре менән баҫтырып, боҙоп ташлап бөттөләр, бик һирәктәре генә фермерлыҡ эшен алып китә алды. Быларҙы күреп, мин ныҡ әсенеп йөрөнөм. Картуф, йәшелсә сәсеп үҫтерә белмәгән кешеләр иген сәсеп байымаҡсы булды. Уны үҫтереү өсөн ер эшенең тәбиғи үҙенсәлектәрен белеү кәрәк, күп йылдар тупланған тәжрибә талап ителә.

***Бөгөн агрономия фәненең ҡаҙаныштары инҡар ителә. Минималь эшкәртеү технологияһына күсеп, химия (гербициттар) ҡулланып, орлоҡты уның менән эшкәртеп сәсеп, ашлыҡты зарарлы итәләр, уның менән халыҡ ағыулана, онкология ауырыуҙары күбәйә. Электән беләм - гербицидлы һаламды мал ашамай, ашаһа ла, аслыҡтан ғына. Шуға ҡарамаҫтан, өҫтән бер ниндәй ҙә контроль юҡ. Нисек теләйҙәр, ерҙе шулай мыҫҡыл итәләр. Крәҫтиән хеҙмәте менән шөғөлләнеү өсөн иң элек ерҙә тыуырға кәрәк, шунда ғына хеҙмәттең мәғәнәһен аңларға, уңышлы эшләргә мөмкин.***

Беҙҙең Башҡортостан - ундырышлы ерҙәргә генә түгел, тәбиғәткә, ер аҫты ҡаҙылмаларына ла бай төбәк. Алтын сығарылған төйәк алтындай балҡып торорға тейештер ҙә, ләкин беҙҙең ерҙә табылған алтын, көмөш, баҡыр, нефть, былар ғына түгел, йәшмә, гранит, мәрмәр кеүек, ҡиммәтле таштар ҙа ситкә китеп торған һәм шулай дауам итә. Хаҡ һүҙгә - хөкөм юҡ. Ил тарҡалып, ҡаңғырыҡтар башланғас, "приватизация в пользу народа" тип, ваучерҙар уйлап сығарып, йылдар буйына тир түгеп йыйған халыҡ байлығын өҫтәгеләр үҙҙәренең ҡулына төшөрөп алды. Ябай халыҡҡа үҙҙәренең йәшәгән алама йорттары, Хрущев заманында төҙөлгән фатирҙарҙан башҡа бер нимә лә эләкмәне.

Ата-бабаларыбыҙ элек-электән бәрәкәтле еребеҙҙең ҡәҙерен белеп, уны ҡәҙерләп йәшәгән. Тик үткән осорҙа ямғырҙарҙың аҙ яуыуы, сиҙәм ерҙәр һөрөлөп, тупраҡтың йылға буйҙарына ағып төшөп, ятыуҙарҙы тултырыуы арҡаһында һыуҙың кәмеүе яр ситендәге ҡамыштарҙың, ағастарҙың ҡороуына килтерҙе. Ауыл урамдарында үләндең заты ла ҡалманы. Был - иҫ киткес хәл. Ошоларҙың барыһы ла беҙҙең быуын ғүмере эсендә булды.

***Ошоға тиклем эшкәртеп, сәселеп, иген биреп килгән һөрөнтө ерҙәрҙең яртыһы ташландыҡ хәлендә, уларҙы ҡый үләндәре баҫып алды. Мал һаны кәмеү сәбәпле күпме көтөүлектәр, сабынлыҡтар ҡулланылмай. Ауыл халҡының шәхси хужалыҡтарҙа малын ҡыҫҡартыуы ла аңлашылмай.***

Ошо хәлде күреүе бигерәк тә беҙҙең быуын кешеләренә бик ауыр. Ауыл хужалығы тармағында агросәнәғәт комплексты төҙөп, эште юлға һалыуы беҙгә еңел бирелмәне. Ни хәтлем байлыҡ булдырылғайны. Ауыл кешеһененең күҙе асылып, тормошо яҡшыра башлағайны, донъяның аҫтын өҫкә әйләндерҙеләр һәм һаман да бөтә ауырлыҡ ябай халыҡ өҫтөнә төшә.

Һуңғы осорҙа донъя ҙур көсөргәнеш кисерә, шул иҫәптән Рәсәй ҙә. Халыҡ күңелендә ҡурҡыу, хафаланыу, бошоноуға бирелеү һәм киләсәктең билдәһеҙлегенән аптырау тойғолары көсәйә. Быны нимә менән бөтөрөн белеп булмай. Беҙ, өлкән быуын кешеләре, үҙебеҙҙең тормошто йәшәп үткәрҙек инде, йәш быуын өсөн борсолабыҙ. Сәйәси хәлдәргә бәйле, сит илдәр менән мөнәсәбәттәр ҡуйырып, санкция иғлан ителгәс тә, илебеҙҙә үҙебеҙҙең тауарға, аҙыҡ-түлеккә, ауыл хужалығына иғтибар артыр, тигән ышаныс тыуҙы. Ауыл хужалығынан тыш йәшәү мөмкин түгеллеген аңлау өсөн әллә ни ҙур аҡыл кәрәкмәй бит.

Ҡатмарлы ваҡытта йәшәһәк тә, киләсәкте яҡшыға юрарға кәрәк, тип уйлайым. Ә ҡасан заманы - еңел, донъя көтөүе рәхәт булған һуң? Ат, үгеҙ егеп ер һөргән, иген сәскән ваҡытта еңел булдымы икән? Атай-әсәйҙәребеҙ шул ауырлыҡтарҙы еңеп сығыу өсөн көрәшмәнеме, аҙ тир түктеме ни? Заман башҡа - заң башҡа. Коллектив хужалыҡтарҙың тарҡалыуынан күптәр байып ҡалды. Хужалыҡтар тарҡалды, ә уның урынына алмаш юҡ. Бар кеше лә фермер йәки эшҡыуар булып китә алмай. Шуға күрә лә, "ваҡыт ҡатмарлы, донъя ауыр", тип йөрөүселәр барлыҡҡа килде лә инде. ***Мин әлеге заман тураһында, үтә лә ауыр ваҡыт, тип түгел, ә буталсыҡлы, тип әйтер инем. Бындай хәлдә һәр кем үҙ урынын тиҙ генә таба алмай шул.*** Элек тә ҡайһы берәүҙәр эшкә сығып эшләмәй, хужаларҙы әрләп, буталып йөрөнө. Беҙ ундайҙарға эш хаҡын сәғәт менән ҡуйып, ул ялҡауҙың ғаиләһен уйлап, минималь аҡса түләй торғайныҡ. Тормош гел аҡтан йә ҡаранан ғына тормай. Кем тырыша, хеҙмәт ярата, ул производствола ла алдынғылар рәтендә булды, абруй ҡаҙанды, эш хаҡын да күберәк алды. Егәрлененең өйө лә бейегерәк, ҡапҡаһы ла күркәм, үҙе лә ерҙә ныҡлы баҫып тора. Был бигерәк тә ауыл халҡы тормошонда ап-асыҡ күренә.

***Хәҙерге ваҡытта, бигерәк тә ауылдарҙа, эш юҡ, тип йөрөүселәр бар. Минеңсә, был дөрөҫ түгел. Эш булмаһа, хәлеңдән килгәнсе күберәк мал тотоп йәшә, шуның файҙаһын күр. Хәҙер сабынлыҡтар, көтөүлектәр етерлек. Техникаң булмаһа, ҡул салғыһы менән бесән әҙерлә. Халыҡ ғүмер буйына эш араһында, ял ваҡыттарын ҡулланып, ҡул салғыһы менән бер-ике һыйырына, 5-6 баш һарығына бесән әҙерләп көн итте.*** Мин Һабырҙа эшләгәндә, бесән сабырға рөхсәт булғас ҡына, урмандағы бәләкәй яландарҙа, ағас төптәрен салғы менән сабып, бесән әҙерләй торғайнылар. Балалары менән, хатта имсәк балаларын алып, сәңгелдәген ҡайын ботағына элеп ҡуйып, бесән әҙерләгән ҡатын-ҡыҙҙарҙы күрергә тура килде. Хәҙер был эш онотолдо. Бик булмаһа, күберәк итеп картуф, йәшелсә сәсеп тә аҡса эшләргә мөмкин.

Элегерәк беҙҙең Башҡортостанға Кавказ тарафтарынан килеп, төҙөлөш менән булыша торғайнылар. Улар эшкә бик тырыштар. "Беҙ уйһыу ерҙән ер алып, йөкмәп, ташлы тау башына ташып, үҙебеҙгә кәрәкле ризыҡты үҫтерәбеҙ, ә һеҙ ерҙе тапап йөрөйһөгөҙ, үҫтереп ашай белмәйһегеҙ", - тигәндәре иҫтә ҡалған. Ерҙә ятҡан алтынды эйелеп алырға йыбанабыҙ. "Тырышҡан - ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан", тип бушҡа әйтмәйҙәр, эшләргә, тырышырға кәрәк, өҫтә ултырғандарға ышанырға ярамай. Улар үҙҙәренең кеҫәләрен ҡалынайталар. Ауыл малын көтөү өсөн көтөүсе таба алмайҙар, ә шул уҡ ваҡытта бер өйөр, типһә, тимер өҙөрҙәй ирҙәр, "эш юҡ", тип йөрөй.

Нисек кенә булмаһын, кешенең тормошо һәм киләсәге үҙенән тора. Заманға һыктанырға ярамай, хәрәкәт итергә кәрәк. Хәрәкәттә - бәрәкәт, тип бушҡа әйтмәйҙәр. Вайымһыҙ булырға ярамай, шул ваҡытта бәрәкәте лә килер", - "Ер кешеһе" китабын Зиннур Ямалетдин улы ошо уйланыуҙары менән тамамлай.

**Рәсүл БАЙГИЛДИН әҙерләне.**

***✓ Әсәйем һуңлап килгән ҡунаҡты өйгә, табынға индерергә тейеш һымаҡ тойолдо миңә. Әммә ул инәйҙе үҙе артынан саҡырып, аласыҡ яғына әйҙәне. Ниңәлер, әсәйемдең былай ҙа аҡ йөҙө тағы ла ағарып киткәндәй күренде миңә.***

# ҺАУА ЙӘШӘГӘН АУЫЛ

Лилиә ҺАҠМАР

(Хикмәтле хикәйә)



–Бөгөн ауыл советында ултырышта теге оҙаҡ йылдар бер кем килмәгән, бер кем йәшәмәгән йорттарҙы емерергә кәрәк, тигәндәр, эйе! - Һәр икеһе сөкөр-сөкөр һөйләшеп, һәүетемсә генә сәй эсеп ултырған инәй-апайҙар, өҫтәлдең тәҙрә яҡ ситендә ултырған Разия апайҙың был хәбәрен ишетеп, ашауҙан туктап, уға текләнеләр. Беләм, Разия апай ярата ул хәбәрҙе матур итеп, еренә еткереп, тәмләп һөйләргә. Ҡайһы берәүгә был да оҡшамай.

- Йә, шунан, емерһәләр ни була? Алама булып, ауылды йәмһеҙләп, йыйын эскесе ояһына әйләнгән иҫке йорт нимәгә? Ризыҡ тәмен ебәреп ултыра шунда... - тип Разия апайҙы тыймаҡ булыпмы, әллә мин бар икәнде онотмағыҙ, типме, Шәмсиә апай икенсе яҡҡа әйләнеп, сәйен шурпылдатып һура башланы. Уның янындағы Бибикамал апай, күршеһенә ризаһыҙ ғына күҙ ташлап, әйҙә, эсә бир сәйеңде, тигәндәй, алдындағы тәмле бәлеш киҫәген Шәмсиә апай яғына этә бирҙе һәм:

- Һөйлә, һөйлә, Разия күрше, нимә тигәндәр инде? - тип, ҡалған ҡунаҡтарҙы ҡыҙыҡ хәбәр тыңларға өндәне. Разия апай Шәмсиә апайға үпкәсел ҡараш ташланы ла, тулҡынланыуын тыя алмай, күҙҙәрен сылт-сылт йомоп, ултырған ерендә таушанып алды. Ниңә башланым икән тигән үкенес тә сағыла биреп ҡуйҙы йылы, ихлас ҡарашында...

- Нимә тип ни: райондан да әйткәндәр икән. Буш йорттар ун йылдан ашыу тормаһын, емерегеҙ, тигәндәр.

- Ыҫта, ул йорттарҙың хужаһы юҡтыр шул. Төп хужаһы булмаһа ни, балалары бар, ана, аҡса эшләп булмай ауылда, тип, ҡалаға сығып киткән күбеһе... - тип уны тағы ла бүлде теге Шәмсиә апай. Башҡалар ҡыҙығып тыңлағанды күргән Разия апай был юлы туктап торманы. Теҙҙе генә.

- Бына беҙҙең урамда ғына өс йорт эйәһеҙ тора. Инде емерелеп бөтөп баралар. Бер кемгә лә кәрәкмәй улар. Аҫҡы урамда Әптерәй менән Зиләраның йорто ла буш. Нисәмә йыл гүр эйәһе булғандарына? - тип әйтеүе булды, аятҡа йыйылған табын "гөж" итеп ҡалды.

- Үрге урамда ла бар ундай йорттар. Емереп, урынына емеш баҡсаһы ултыртһаң, күпме файҙа? - тигән сәскәле яулыҡлы апайға тағы әллә кемдәр ҡушылды. "Беҙ риза! Үҙем үлһәм, ана шул силсәүиткә яҙыу ҡалдырам әле, бер кемем юҡ, хәҙер элекке кеүек йәш уҡытыусы килеп йәшәр тиер инең, мәктәпте лә яптылар. Алығыҙ йортомдо. Емерһәләр ҙә ярай, тиермен...", "Берәй закон сығарһындар атыу, тота килеп емереп, ҡом түләүле буламы силсәүит?", "Балалары беҙгә йорт кәрәкмәй тип отказ яҙһындар...", "Ҡасан емерәләр икән бынау күршенең йортон? Буш тора бит. Исмаһам, мунсалыҡ йә кәртә тоторлоҡ бүрәнә алып ҡалыр инем әле..." тиештеләр аяттағылар кемуҙарҙан.

...Минең ни "әллә кемдәр" тигәнемдең сәбәбе шул: мин - Гөлбикә, мәктәпте тамамлағас та, уҡырға тип, ҡалаға сығып киткәйнем. Шунан бирле йылына бер тапҡыр ике-өс көнгә генә ҡайтып йөрөнөм тыуған йортҡа. Әле әсәйем ауырыҡһына башлағас, ике айға бер ҡайта башланым. Бик күп ауылдаштарҙы күреп белһәм дә, исемдәрен онотҡанмын. Үҙҙәренән һорашыуы уңайһыҙ. Былай ҙа бер хәбәр башлаһаң, "Шуны ла белмәйһеңме" тип оятҡа ҡалдырырға әҙер торалар. Бер үпкәм юҡ үҙҙәренә, тормош бит, үҙҙәре генә миңә үпкәләмәһен.

Бына әле лә, мин ҡаланан ҡайтып инеү менән әсәйем "Аятҡа күршеләрҙе саҡырайыҡ" тип, өмөтлө ҡарашын төбәне. Их, белһә икән, иртәнән ҡара кискәсә хөкүмәт эшендә эшләп, яңғыҙың ғына бала үҫтереү ыҙаларын! Бер генә төн булһа ла тыныста йоҡлап, аҙ ғына ял итеп, бер тапҡыр тау башына тәбиғәткә сығып әйләнергә ине лә...

- Ярай, әсәй, ҡасан саҡырайыҡ? Миңә бер көндән кире юлға, - тинем

- Алай икән дә... Шылтырат хужаңа, тағы бер көн ял бирһен!

Белә шул әсәйем, ҡунаҡҡа әҙерләнеү өсөн ваҡыт кәрәк. Хужанан бер көн генә өҫтәп һорарға тура килде. Отпускы иҫәбенә. Башҡа сара юҡ. 80 йәште үткән ғәзиз әсәйемдең үтенесен кире ҡағып булмай. Кем белә, бәлки, башҡа шулай күршеләрен, таныштарын ҡунаҡҡа саҡыра ла алмаҫ...

Кисә көнө буйы, хатта төнгө өскә тиклем әҙерләнем төрлө тәмлекәстәр. Ит бар, һалма бар, һалдың - бешерҙең. Тик аятта барыһы ла ҡатын-ҡыҙ, сәй ярата. Ҡамыр ризығынан башҡа табын буш була... Өлгөрҙөм шикелле: бәлештәрем дә өс төрлө, май икмәк тә бар, хатта "ҡош теле" тигәне лә... Ашап бөтмәһәләр ни, күстәнәскә апҡайтырҙар.

...Табын ҡыҙа ғына. Колхоз йыйылышымы ни. Инде ниндәй йортта ҡасан кем йәшәгән дә, хәҙер ҡайҙа сығып киткәнен, был йортто боҙорға ярайমы, юҡмы, балалары уҫалмы, йыуашмы икәнен дә барлай башланылар. Тиҙҙән, моғайын, был аят-советтың ҡарары ла әҙер булыр, ахырыһы: ниндәй йортто ҡалдырырға, ниндәйен һүтергә...

Бәй, бәй, самауыр тынған да, һыуы ла насар аға башланы. Инәй-апайҙар шулай һөйләшә торғансы, самауыр яңыртып инәйем әле, тип, инде генә самауыр ҡолағына тотонғайным, тәҙрәгә күҙем төштө. Урам салт күренеп тора. Тау яғынан бер оло йәштәге, ҡара бушлат кейгән инәй, һәлмәк кенә атлап, беҙҙең ҡапҡа яғына ыңғайланы... Әлеге лә баяғы Разия апай, минең тәҙрәгә ҡарағанды күреп, башын борҙо ла:

- Аһ, аһ, бынау әбейҙе һис танымайымсы? Кемгә килә икән? - тип ҡуйҙы. Башҡалар, уның хәбәре бөтмәҫ, тигәндәй, урамдан үтеүсене ҡарап, тикшереп торманы. Табындағы хәбәрҙәр ҡыҙығыраҡ бит.

...Әсәйем ниңәлер оҙаҡланы. Көн кисләп бара, тауыҡтарға ем һибеп кенә инәйем, тип, сыҡҡайны ла. Әллә бер-бер хәл булдымы, тип уйлай-уйлай тышҡа сыҡтым. Әсәйем дә күренде кәртә ҡапҡаһы янында. Самауырҙы йорт янындағы йәйге таҡта аласыҡ янындағы оло тигеҙ ташҡа ултырттым да, һыу алырға тип, кире йорт соланына табан атланым. Һыу алып сығып килгәнемдә, ҡапҡа яғындағы баҡса мөйөшөндә, бер кеше пәйҙә булды. Ниңәлер йөрәгемде шом баҫты, һалҡын ел иҫкәндәй, ҡалтыранып ҡуйҙым. Кем булыр икән? Оҙон ҡара бушлат кейгән, башына зәңгәр яулыҡ ябынған, сиған ҡатынына ла оҡшамаған... Әсәйем, ҡунаҡҡа берәй кемдең килмәүе хаҡында өндәшмәгәйне. Әллә алдан әйткән дә, үҙе саҡырғанын онотҡан микән? Ни тиһәң дә 80 йәш. Хәтере самалы. Ул арала мин танымаған инәй тупһаға яҡынлашты.

Күкрәктән сыҡҡан моңло бер тауыш менән инәй: "Һаумы, ҡыҙым!" - тине лә кәртә яғына ҡараны. Ул да әсәйемде шәйләгән икән. Мин: "Һаумыһығыҙ! Әйҙә, инегеҙ өйгә!" - тип һыулы биҙрәне сайпылтмаҫҡа тырышып, самауыр янына ашыҡтым. Әсәйем беләлер әле үҙен. Бая тәҙрәнән күренгән кешенең тап ошо инәй булыуына шигем ҡалманы.

Әсәйемдең килеп еткәнен сабыр ғына ҡарап, үҙеме, әллә башҡа берәү таҙа итеп юнып биргән муйыл таяғына таянып көтөп торҙо инәй. Үҙе шат йылмая. Бик күптән килмәгән, ахыры. Әсәйемдең күҙҙәре насар күрә хәҙер. Яҡыныраҡ килмәйенсә, бер кемде лә танымай. Шуға бер-ике аҙым ҡалғас, инәйгә бер аҙ нығ итеп текләп торҙо. Оҙон ғүмере буйы күргән-белгән меңләгән кешене барлап, алдында торған ҡатынды шуларҙың береһенә оҡшатырға тырышыуы. Ниһайәт, шулай оҙаҡ тороуҙы килештермәй, ҡулдарын күлдәк итәгенә һыпырып, әлегә таный алмаған инәйгә ҡулдарын һуҙҙы ла: "Һаумы! Әйҙә, әйҙә, үт бындараҡ!" - тине. Теге инәй ниңәлер ҡул бирергә ашыҡманы:

- Һаумы, Рәшиҙәм! Ҡояшбикәм! Һаумы! Мине танымаһаң да һис үпкәм юҡ, оҙаҡ килә алманым янына, - тип әкрен генә атлай башланы. Әсәйем һуңлап килгән ҡунаҡты өйгә, табынға индерергә тейеш һымаҡ тойолдо миңә. Әммә ул инәйҙе үҙе артынан саҡырып, аласыҡ яғына әйҙәне. Ниңәлер, әсәйемдең былай ҙа аҡ йөҙө тағы ла ағарып киткәндәй, ҙур күҙҙәре тағы ла ҙурыраҡ асылғандай күренде миңә. Һаман да таный алмағанға күрә, уны аласыҡҡа саҡыралыр? Өндәшмәй атлауынан әсәйемдең ниндәй көсөргәнеш аша хәтер һандығын аҡтарыуы һиҙелеп тора ине.

"Ҡояшбикәм!" ти бит әле. Әсәйем элек һөйләгәйне, "Рә" һүҙе "Ҡояш" тигәнде аңлата, ауылда тик бер генә кеше мине шулай атаны, тине. Бына ошо инәй булған икән дә ул кеше...

Мин ҡуҙ алырға тип аласыҡҡа ингәндә әсәйем тәпәш урындыҡҡа яҡындағы бар һый-ниғмәттәрҙе теҙеп, теге инәйгә сәй эсерергә йыйына ине. Усаҡ алдында ҡайнап ултырған баҡырса ла, сәй сәйнүге лә әҙер. Табын ахырында ят кешене индереп, аят йәмен ебәрмәйем, тигәндер. Ысынлап та, саҡырылмаған, берәй йомош менән генә ингәндер был инәй. Минең мейес янында өйөрөлөп сөйөрөлгәнде күргәс: "Был ҡыҙ ҡайҙан килгән, кем балаһы?" - тиеүенә әсәйем: "Минең ҡыҙым ул, иң кеçеһе, уны иҫләмәйһеңдер", - тип яуапланы ҡоро ғына. Әсәйемдең бик һөйләшкеһе килмәһә лә инәйҙең хәбәре йылға һымаҡ ағылды ғына...

- Ә-ә-әй, минең дә бар ине бит шундай сағым, Ҡояшбикәм, бар ине. Йәш инем, сая инем. Атайым, әсәйем әйткәнен ҡолағыма ла элмәнем... Хоҙай шуның өсөн яҙаланы мине. Яҙаланы. Туғандарыңды күрмәй, тыуған йортоңдан алыҫ китеп, ғүмерең буйы яңғыҙ йәшә, тине. Ҡояшбикәм, һин генә аңлай торғайның хәлемде, һин генә... Бына бөгөн дә ярҙамыңа өмөтләнеп килдем. Килтерҙеләр.... Ишетәһеңме? Минең ер йөҙөндәге берҙән-бер һәм ғәзиз тыуған йортомдо емерергә, юҡ итергә уйлайҙар. Шуны ишетеп килдем, - тине лә инәй кеçәһенән ҡулъяулыҡ сығарҙы. Мин тышҡа йүнәлдем.

Самауырҙы итек ҡунысы менән борҡоттом да, ҡуҙы алынып, баҙлап киткәнсе көтөп торам. Аласыҡ ишеге асыҡ. Әсәйем инәйҙе йыуатып булаша. Инәй һулҡылдай-һулҡылдай илап, үҙенекен теҙә... Сит кешеләр хәбәрен йәшенеп тыңлау ғәҙәтем булмаһа ла, был юлы ирекһеҙҙән ишеттем уларҙың һөйләшкәнен.

"Беләһеңме, Көмөшбикә, мин йәшәгән ауыл янына һуғыш килде. Снарядтар беҙ йәшәгән йортто ла емерҙе. Өс бала, әсәйем урамда ҡалдыҡ. Атай һуғышта. Көҙ етеп килгән осор. Өшөйбөҙ. Асбыҙ. Беҙҙе күрше ауылдағы ағас аласыҡҡа индерҙеләр. Ваҡытлыса йәшәргә. Әсәйем мине көн һайын усаҡҡа сыбыҡ-сабыҡ килтер, тип, урманға ебәрә. Апайым әсәйемә йорт эштәрендә булыша, ҡустым бәләкәй, саҡ атлай башлаған. Ауыл янындағы урманда ҡурҡыныс, бер үҙем, тиҙ генә йыйған сатыр ботаҡтарҙы йөкмәйем дә, ауыл яғына елдерәм. Аяҡ кейеме юҡ, табандарым ҡанап бөтә. Ә бер көндө төпкәрәк инеп киткәнмен. Аҙаштым. Ярҙам һорап ҡысҡырырға ҡурҡам. Яҡында дошмандар отряды бар тигәйнеләр. Инде бар өмөтөм юйылып, йыуан бер ағас төбөнә ултырҙым да, шым ғына илай башланым. Көн кисләй. Шулай бүреләр генә ашар инде мине, тим. Шул саҡ артымда ботаҡ һынған тауыш ишетелде. Бар туғандарым, әсәйем менән бәхилләшеп өлгөрҙөм. Теге тауыш тынды ла ике, өс аҙым артта кемдеңдер: "Тор!" - тигән һаҡ ҡына өндәшеүе ишетелде. Ҡараңғылыҡ тауыштың эйәһе кем икәнен шәйләргә бирмәй. Шулай ҙа әйләнеп ҡараным. Ҡаршымда ике кеше. Мине эҙләргә сыҡҡандар, ауыл кешеләре, мылтыҡтарын да алғандар, тип ҡыуанам. Теге икәү үҙҙәре артынан әйҙәнеләр. Оҙаҡ ҡына атлағас, бер асыҡ яланға килеп сыҡтыҡ. Әле тегендә, әле бында кескәй усаҡтар яна. Һәр усаҡ тирәләй өсәр, дүртәр кеше ултыра. Барыһы ла ир-егет. Ҡурҡышымдан телһеҙ ҡалдым. Миңә йылы сәй, икмәк бирҙеләр. Эй шул икмәктең тәмлелеге! Мине тапҡан егеттең береһе янымдан китмәй. Барыһы ла үҙҙәренең телендә һөйләй, ә мин сәйер тойолһа ла, барыбер аңлайым. Барыһы ла мине яҡын күреп, үҙ һеңлеһе һымаҡ һөйләшкәс, ҡурҡыуым бөттө. Тирә-яҡ яҡтырғас та һине ауылыңа алып барырбыҙ, тинеләр..."

**(Дауамы бар).**

*КӨЛКӨФӨ*

# ӘТӘС БУЛЫП ҠЫСҠЫРҒАЙНЫ...

Ҡатын минә ваҡыты менән, һин бигерәк ҡыҙыҡһың, тип әйтеп ҡуя. Бәлки, шулайҙыр ҙа, кем белә инде. Ә шулай ҙа күрше минән ҡалышмай, буғай. Шуны алдан әйтеп ҡуйым. Күрше хәбәрҙе матур һөйләй. Берәй йомошо төшә-ҡалһа, тураһын ярып әйтмәй. Өйрөлтә-сөйрөлтә, шунан ғына әйтеп ҡуя. Тукта әле, миҫал өсөн бер ҡыҙыҡ хәлде һөйләп үтәйем.

Ул көндө мин утын ярырға булдым. Эйе, эйе, бер ҡайҙа ла бармайым, бер ҡайҙан да ҡайтмайым. Бары тик утын ғына ярам. Ошондай ныҡлы ҡарарға килгәс, нисектер, үҙемә лә күңелле булып китте. Хатта әле эшләнмәгән эш нисектер эшләнгән һымаҡ булып ҡалды. Ысынлап та, уны нишләп һуҙып йөрөргә. Былай ҙа аҙна-ун көн ятты был утын. Ярырға икән ярырға! Хәҙер ярып ташлайым мин уны. Ә балалар бөгөн баҡсала ер ҡаҙырҙар. Эстән генә күңелле көйҙө көйләй-көйләй, иң ситтә ятҡан түмәрҙе рәтләп ултырттым да кирелә биргәйнем генә...

- Күрше, һин ҡайҙа?

Бындай шомло шыбырлауҙан минең генә түгел, һинең дә йөрәгең табаныңа төшөп китер ине, ибет. Бына әле хатта түмәрҙең дә ҡото осто, буғай. Ул бер аҙ аушая биреп, аушая биреп, аушая биреп торҙо ла ҡолап та китте. Дөп-дөп типкән йөрәк тынысланып та өлгөрмәне, әлеге лә баяғы шомло һорау тағы ҡабатланды.

- Күрше, нинә өндәшмәйһең, һин ҡайҙа?

Әлегә мәлдә мин уға яуап бирерлек хәлдә түгелмен шул. Һеҙ, кем шулай өндәшә, тиһегеҙме? Күрше өндәшә! Ә үҙе тахта кәртәләү аша ғына баҫып тора! Бына шундай кешене нисек ҡыҙыҡ тип әйтмәйһең инде! Тын алыш бер аҙ ипкә килгәс, ҡалтыраған аяҡтар бер аҙ тынысланса төшкәс, ҡулдан төшөп киткән балтаны кире алғас, мөмкин тиклем тыныс тауыш менән шыбырлайым.

- Сәләм-сәләм, күрше, - шунан бер аҙ үкенгән тауыш менән әйтеп ҡуям,- әлеге мәлдә мин өйҙә түгел шул.

Күршенең башын тырнағаны хатта был яҡҡа ишетелеп тора.

- Ә ҡайҙа?

- Йылға буйында!

- Унда нишләйең?

- Нишләйең, тип ней...кер сайҡайым!

Күрше бер аҙға шымып ҡала. Шунан кеткелдәп көлөп ебәрә.

- Алдашма, һин өйҙәһең.

Аптыраған тауыш менән һораған булам.

- Ҡайҙан белдең?

- Тауышың яҡындан сыға! Һәм бөгөн һин утын яраһың!

Был юлы ысынлап аптыраған тауыш менән һорай ҡуям.

- Ҡайҙан белдең?

- Баянан бирле балта тотоп, тегеләй-былай сабып йөрөйһөң бит.

Шулай инде, ауыл ерендә бер нәмәне лә йәшереп эшләп булмай. Бына әле лә ҡайраҡ эҙләп күп булһа бер-ике тапҡыр урап үткәнмендер урам эсен. Бына шуны әллә ҡайҙан күреп торған күрше. Хәҙер бына ауыҙ тултырып, тегеләй-былай сабып йөрөйһөң, тип торған була. Улайға китһә, мин дә уның бөгөн балыҡҡа йыйынғанын беләм. Сөнки ул иртә тандан бирле ҡармаҡ сыбыҡтарын рәтләй. Ә ике малайы картуф баҡсаһындағы



тиреҫ өйөмөндә селәү ҡаҙып мәж була. Күршенең йомошо нимәлә икән?

- Һайрап ебәр, күрше, ниндәй ҡайғы төштә башыңа?

Минең ипле һөйләшеүгә күрше иркен тын алып ҡуя.

- Ярҙам кәрәк, ағай. Кәртәләү аша һөйләшеп булмай. Хәҙер инәм, ағай.

Ҡайҙан ғына ағай булайым инде мин уға? Икебеҙ ҙә бер йылғы. Йомошо мөһимдер инде. Шуға ағайҙан һалдыра "ҡустым". Сөскөрөп тә өлгөрмәнем, иплә кенә баҫып, ян-яғына ҡарана-ҡарана күрше килеп инде. Ярай, уның иплән баҫып килеүенә аптырамайым. Берәй эш боҙорға уйлаһа, гел шулайта ул. Ә ҡулына ниндәй "биҙрә" тотоп алған? Етмәһә, уны өләсәһенең шау сәскәле яулығы менән ҡаплап ҡуйған. Әллә бер биҙрә һөт тотоп инеп килә ята инде күрше? Аллам һаҡлаһын, һөт боҙорға ҡушып ҡуймаһын тағы. Һаҡлыҡ менән генә "биҙрәһен" ергә ҡуйҙы ла үҙе түмәр өҫтөнә сүгәләнә күрше. Һүҙҙе ниҙән башларға белмәй, тамаҡ ҡырып алды.

- Теге, ней, күрше... һин донъя көтөргә бигерәк әүәҫһең, шуға ҡыуанып бөтә алмайым мин.

Дәәә, мәйтәм, бик уратып башланы был хәбәрен. Ҡасан һәм нимәгә алып килеп төрттөрөр икән. Шул арала күрше һүҙен дауам итә.

- Һин тормошто, унан бигерәк ҡошҡортто яратып донъя көтәң. Шуға ваҡыты менән көнләшеп ҡуям мин.

Үәт әйтте һүҙ! Имеш, мин ҡошҡорт яратам. Имеш, ул көнләшә. Бындай түҙға яҙмаған һүҙҙәрҙе мин генә түгел, хатта ем сүпләп йөрөгән әтәс тә, тауыҡтар ҙа аптыраны, буғай. Аптырауҙан улар хатта ашауҙарынан туҡтанылар. Тауыҡтар бер килке, атаҡ-атаҡ, тип һөйләшеп-көлөшөп алдылар ҙа тағы ем сүпләргә керешеп киттеләр. Әтәс бындай иҫ киткес ныҡлыҡты үҙендә генә ҡалдырырға көс тапманы. Ул бер ялпыныуҙа кәртәләүгә менеп баҫты ла бар донъяға яр һалды.

- Көлдөрөп үтерә әҙҙылааааар!

Шунан талғын ғына осоп төштө лә башын юғары тотоп, беҙҙең эргәнән ситкәрәк тая һалды. Әтәс тороп торһон, "ҡустымды" тыңлайыҡ әле.

- Иҫ китәрлек егәрлеһең бит һин, ағай, бер эште башлаһаң...

Ул фекерен әйтеп бөтмәй. Ә түмәр өйөмөнә күҙ ташлап ҡуя. Тимәк, уның үтенесе минең ошо утын ярыуға бәйле, тип уйлап ҡуям мин.

- Һин ныҡыш бит, ағай, хәҙер һин был утынды көнө буйы яраһың.

Минең өндәшмәй генә эйәк ҡағып ҡуям. Шул мәл күршенең гөрләп торған тауышы күпкә һүрелә төшә.

- Ә мин бөгөн улдарым менән балыҡҡа барырға йыйынғайным.

Күкрәк тултырып тын ала ла өмөтһөҙ тауыш менән уфтанып ҡуя.

- Балыҡ үрләй.

Шунан уң ҡулын "биҙрә" яғына төртөп күрһәтеп көрһөнөп ҡуя.

- Ҡатын эш ҡушты.

Тимәк, ошо "биҙрәне" ҡарау бурысын минә йөкмәтергә уйлай "ҡустым".

Шул мәл күрше түмәр өҫтөнән ырғып килеп тора.

- Кискә хәтлем генә, ағай, кискә хәтлем генә. Минән - бер таба балыҡ.

Шул арала күршенән елдәр иҫә.

Ә шулай ҙа нимә икән был "биҙрәлә"? Һаҡлыҡ менән генә шау сәскәле яулыҡты күтәрә төшәм. Ҡара әле, биҙрә тигәнем ситлек икән. Ә уның эсендә... тутыйғош ултыра, тиһегеҙме? Эйе, тап өҫтөнә баҫтығыҙ. Тутыйғош ултыра! Үҙегеҙ беләһегеҙ, ауыл ерендә бындай ҡошсоҡто һатып алыусылар һәм ҡараусылар бик һирәк. Бәләкәй ҡыҙын бигерәк ярата шул күрше. Шуныһы илап-мыжып алдырған инде.

Бына шулай, тик торғанда үҙемә өҫтәмә эш алып ҡалдым мин. Ярай, мәйтәм, ҡарауҙың бер ҡыйынлығы юҡ. Ашарына бар, эсеренә бар. Ситлектә ултыра. Мин утын ярырмын, ә ул ултырыр ситлек эсендәге бәүелсәгендә бәүелйеп. Әйткәндәй, һөйләшә беләме икән? Минең уйҙы белгән һымаҡ, тутыйғош баш осондағы өлпәһен тырпайтып ебәрҙе лә аяҡтарын алмаш-тилмәш баҫып, тамаҡ төбө менән үҙ һөнәрен күрһәтә һалды.

- Кеша маладис! Кеша маладис!

Ҡара әле, апаруҡ ҡына һупалай икән был ҡошсоҡ. Мин яйлап утын яра башланым. Ә эстән күңелдә бер ҡорт кимерә - тутыйғошҡа яңы һүҙҙәр өйрәтер кәрәк! Күрше лә "ҡыуанып" китәр. Әйткәндәй, апаруҡ отҡор булып сыҡты Кеша. Ярты сәғәт самаһы ваҡыт үттеме-юҡмы, хәҙер ул һәр түмәр ярған һайын мине ошолай ҡеүәтләп ултыра ине:

- Күрше маладса! Күрше маладса!

Шул мәл өйҙән ҡатын килеп сыҡты. Бер килке минә, бер килке ярылған утын өйөмөнә ҡарап торҙо. Бәйләнерлек сәбәп таба алмағанына эсе бошоп ҡуйҙы, буғай. Әйләнгән һайын маладсанан һалдырып тороусыһы булғас, апаруҡ утын ярып ташлағанмын икән шул. Шунан ҡатындың күҙе теге ситлеккә төштө. Әлбиттә, ҡыҙыҡһыныуын еңә алманы ул. Йәйлап ҡына баҫып килде лә ҡараштарын тутыйғошҡа юнәлтте. Һе, тине лә тауыҡтары яғына юнәлде. Уларға ем һалды ла ояларына бикләп ҡуйҙы. Шунан беҙҙең эргәгә кире килде. Нимәләр әйтмәй китһә, күңеле булмаҫ ине уның.

- Үлтереп ҡуй тағы. Ҡом түләүле булырбыҙ!

Мин ҡапылдан уйға ҡалдым. Ысынлап та, йә берәй тап-фәлән әлегеп ҡуйыр башына. Бәләһенән башы аяҡ. Ҡом түләүле булыуын булмаҫбыҙ. Ә шулай ҙа тутыйғошто һау килеш тапшырыу хәйерлерәк булыр. Мин ситлекте ҡулға тотоп, тегеләй барҙым, былай барҙым. Бында ҡуйһам да оҡшамаҫ һымаҡ, тегендә элһәм дә оҡшамаҫ һымаҡ. Минең албырғанып ҡалғанды күреп, ҡатын әйтә ҡуйҙы.

- Эл индереп тауыҡ оянына.

Ысынлап та, мәйтәм, шунан ҡулай урын булмаҫ. Ултырыһын әйҙә ҡорҙаштары менән һөйләшеп-серләшеп. Мин ситлекте тауыҡ оянына индереп элдем дә тыныс күңел менән утын ярыуымды дауам иттем.

Шул арала балыҡсылар ҡайтып килде. Рәхмәттәрен яуҙырауҙыра күрше югереп килеп инде лә ситлекте ала һалып, югереп ҡайтып китте. Бер аҙҙан ҡыҙын етәкләп алған ҡатынының өйгә инеп барғанын абайлап ҡалдым. Улары ла бөгөн өйҙә булманы. Берәй ергә барғандарҙыр инде. Күп тә үтмәне, беҙгә күршенең малайҙары югереп килеп инде.

- Әсәй һеҙҙе балыҡ ашарға саҡыра. Кәнсирт тә була, тине.

Балыҡ тигәне көтөлгән хәбәр ине. Ә бына кәнсирт тигәне... Берәй әртис туғаны килде микән? Әллә үҙҙәре кәнсирт ҡурһәтә микән? Аптыраулы ҡуйып, балаларҙы алдыҡ та, саптыҡ күршеләргә. Ул ҡыҙҙырылған балыҡтың еҫе... Ул балыҡтың тәмлелеге... Ошолай матур табын аҙағына етеп килгән мәлдә, серле генә йылмайып, хужабикә өҫтәл артына тороп баҫты.

- Ә хәҙер, хөрмәтле күршеләр, кәнсирткә рәхим итегеҙ!

Әй, әттәгенәһе, ашауға әүрәп, серле кәнсирт тураһында бөтөнләй онотҡанмын да инде мин. Шул арала тантаналы рәүештә күрше буш ултырғысҡа әлеге лә баяғы ҡаплаулы "биҙрәне", әй, ситлекте алып килеп ултыртты. Һүҙҙе хужабикә дауам итте.

- Хөрмәтле ҡунаҡтар! Һеҙҙең алда Кеша сығыш яһай. Ә хәҙер уның тәүге сығышын тыңлайыҡ!

Хужабикә "шаршауҙы" асып ебәрҙе. Ситлек эсендәге тутыйғош тегеләй әйләнде, былай әйләнде. Шунан мине күреп ҡалды. Танины, буғай. Сөнки йылмайғандай итте. Мин дә уға ҡул болғаған булдым. Кеша ҡанаттарын йәйеп ебәреп, ҡағынып алды. Башындағы өлпәһен тырпайтып ебәрҙе. Аҙаҡ аяҡтарын алмаш-тилмәш баҫып, минә ҡарап ҡыуанып ҡысҡырып ебәрҙе.

- Күрше маладса! Күрше маладса!

Шул арала күрше шаршауҙы яба һалды. Бөтәһе лә ҡыуана-ҡыуана ҡул сапты. Шул уҡ ваҡытта нишләптер бөтәһе лә минә боролоп ҡараны. Әйтерһең дә, уға мин "өйрәткән". Хужабикә тантаналы тауыш менән һүҙен дауам итә.

- Ә хәҙер әртисебеҙҙең икенсе сығышын тыңлайыҡ!

Шаршау тағы асылды. Кеша бер килке беҙгә ҡарап торҙо ла башын эйә биреп ем "сүпләргә" тотоноп китте!

- Ҡыт-ҡыт-ҡыт-ҡытаҡ! Ҡыт-ҡыт-ҡыт-ҡытаҡ!

Шаршау тағы ябылды. Бөтәһе лә нишләптер минә борола төшөп, ҡул сапты. Ә минең бында ҡыҫылыш юҡ. Тауыҡтар өйрәткән уны был һөнәргә.

- Ә хәҙер һеҙҙең иғтибарға өсөнсө сығыш.

Шаршау тағы асылды. Был мәлдә тутыйғош бәүелйесегендә ултыра ине. Ул ысын әртис һымаҡ, тағы тамағын ҡырып алған булды. Шунан башын артҡа ташлап торҙо ла уны ҡапыл алға һуҙҙы һәм...

- Ки-кри-күүүк!

Әтәс булып ҡысҡырғайны, керер урын тапманым, тип бушҡа ғына йырламайҙар икән. Мин, ысынлап та, үҙемә урын таба алмай бер булдым. Ҡулды былай ыуған булдым, тегеләй ыуған булдым. Һинең арҡала ошо хәлгә төштөм, тиген һымаҡ ҡатынға күҙ ташланым. Башҡалар бер аҙға тын ҡалдылар ҙа кемуҙарҙан көлөргә тотондолар. Шул мәлдә генә минә йән инеп китте. Аҙаҡ хужабикә әйтеп ҡуйҙы.

- Эй, ошо ирҙәр бигерәк ҡыҙыҡ булалар ҙа инде. Бына бит, ней бары ярты көн эсендә ябай тутыйғоштан ниндәй бөйөк әртис эшләп ҡуйғандар.

Ә шулай ҙа беҙҙең ҡыҙыҡ булыуыбыҙҙа хужабикәләрҙең дә ҡатнашлығы бар, буғай, тип уйлап ҡуйҙым мин.

**Был һөйләүсене Әгләм ШӘРИПОВ тыңлап торҙо.**

✓ *Ҡөрьән аяттарын, ғәрәп телендәге төрлө доғаларҙы транскрипциялағанда беҙҙең алфавитыбыҙ башҡаларға ҡарағанда иң ҡулайлыһы тип һанала. Сөнки ғәрәп телендә булған өндәр барыһы ла тигәндәй беҙҙә бар.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ЙОҠЛАР АЛДЫНАН... сәтләүек аша

■ Ҡайһы бер минералдар һәм кислоталар йоҡоно яҡшырта ала, әммә иң тәүҙә бының өсөн дөрөҫ туҡланырға һәм әүҙем тормош алып барырға кәрәк, ти Америка ғалимдары. Йоҡлар алдынан бер стакан һөт эсеп, бер ус сәтләүек ашаһаң, яҡшы йоҡлайһың икән. Сәтләүектәрҙән бразилия сәтләүегенә өҫтөнлөк бирегеҙ, ул калий менән селенға бай, ә һөттә кальций бар. Насар йоҡлаусылар туҡланыу рационынан майлы ризыҡтарҙы, бигерәк тә, аҡ майҙы һәм сырҙы алып ташларға тейеш.

■ Беҙҙең халыҡ һалҡын тейеү, йүткереү кеүек сирҙәрҙә ауырыуға ла һанамай инде, шулай ҙа тамаҡ шешеү сирен аҙҙырырға ярамай, ти белгестәр. Был осраҡта шалфей үләненән яһалған төнәтмәләр тиҙ ярҙам итәсәк. Билдәле булыуынса, "шалфей" һүҙе латын теленән "ҡотолоу" тигәнде аңлата. Шалфейҙы төрлө шештәрҙә дауалау өсөн күптән ҡулланалар. Ул антиоксидант сифаттарына ла эйә.

■ 18-27 айлыҡ сабыйҙарҙы тикшереп, ғалимдар шундай фекергә килгән: организмдағы бактерияларҙың күп булыуы һәм төрлөлөгө баланың үҙен тотоуына ла йоғонто яһай. Генетик яҡтан ҡарағанда эсәктәге бактериялар максималь рәүештә төрлө икән, баланың кәйефе яҡшы була, ул башҡалар менән яҡшы аралаша, төрлө нәмә менән ҡыҙыҡһына. Белгестәр әйтеүенсә, бактериялар стресс гормондары менән бәйләнешкә инәләр, моғайын. Ошо гормондар һимереү, астма кеүек хроник ауырыуҙар менән дә бәйле. Фараздар буйынса, тирә-яҡ мөхиткә асығыраҡ булған балаларҙа ашҡаҙан-эсәк трактына йоғонто яһаусы стресс гормондары аҙыраҡ. Бактерияларҙың стресс гормондарының көсөн түбәнәйтеүе лә ихтимал. Тикшеренеүҙәрҙә 77 бала ҡатнашҡан, ғалимдар уларҙың микрофлораһын 18 төрлө характеристика буйынса тикшергән. Шуның өсөн гел хәүеф тойоһо менән йәшәүселәргә файҙалы бактериялар кимәлен күтәреү тәҡдим ителә. Микрофлора менән шизофрения, аутизм араһында бәйләнеш барлығы ла асыҡланған.

■ Күптәр дарыуҙарҙы дөрөҫ ҡабул итмәй. Бер төркөм ғалимдар 182 төрлө тикшеренеүҙәрҙең һығымталарын баҫтырып сығарған. Һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙың яртыһы табиптарҙың күрһәтмәләрен үтәмәй. Кемдер дарыуҙы тейешле курс менән эсмәй, кемдер уны ҡасан һәм күпме эсергә кәрәклеген онота. Был хаталарҙы төҙәтеү өсөн тәүҙә үҙеңдең хаталаныуыңды танырға кәрәк, ти ғалимдар. Бөгөн төрлө сығанаҡтар ниндәй дарыуҙы нисек һәм ҡасан ҡабул итеү хаҡындағы мәғлүмәт менән тулған, уларҙың араһында ҡайһыһы дөрөҫлөккә тап килеүен билдәләүе лә ауыр.

■ Австрияла йәшәүсе психолог биш йыл дауамында бер тикшеренеү үткәргән һәм ниндәй тойғо организм өсөн иң зыянлыһы булыуын асыҡлаған. Башҡаларҙың уңышына көнләшеүселәрҙә инфаркт хәүефе ике тапҡырға юғары. Көнләшеү - гормональ тайпылыштарға алып килә. Етмәһә, иң тәүҙә тестостерон бүленеп сығыу кәмей, шуға ла ир-егеттәргә был насар ғәҙәт менән дуҫлашыу уларҙың файҙаһына түгел. Үҙен ғәйепле тойған кешегә һалҡын тейеп бара, онкологик сирҙәр хәүефе ҙурая. Үҙ-үҙен йәлләүселәр бауыр сирҙәре менән яфаланыуы ихтимал. Был саҡта хәлһеҙлек гормоны күберәк бүленә, ҡанда шәкәр кимәле арта. Һарандар күбеһенсә ашҡаҙан сиренә дусар була.

*ДӨРӨҪ ҺӨЙЛӘШӘЙЕК!*

**Элегерәк, минең яҙмаларымды уҡығас, мәҙрәсә, Ислам университетын тамамлаған ҡайһы бер имамдар: "Мәҡәләләрең яҡшы, тик ни өсөн "Аллаһ" һүҙендәге "һ"ны төшөрөп ҡалдыраһың? Улай дөрөҫ булмай бит..." - тип миңә иҫкәрмә яһағылағандары бар. Уларҙың әйткәнен тотоп, күптән инде мин был изге һүҙҙе шул аҙаҡҡы хәрефһеҙ яҙмайым.**

# "АЛЛАҺ" ИСЕМЕН БОҘОП ЯҘМАЙЫҠ!



Гәзитебеҙҙең 15-се һанындағы "Дөрөҫ һөйләшәйек!" тигән рубрикала ошо темаға ҡағылышлы яҙылған мәҡәләне ҡабат-ҡабат уҡып сыҡтым. "Алла"мы, "Аллаһ"мы?" тип атала ул. Аҙаҡҡы өнө яҙа-йоҙа ғына ишетелеү сәбәпле, башҡорт телендә Аллаһ һүҙе "һ" хәрефһеҙ яҙылырға, йәғни, башҡорт теленә яраҡлаштырыу ҡағиҙәһенә тап килергә тейеш, тигән фекергә ҡуя автор. Телебеҙ именлеге һағында торған был яҙыусының уй-кисерештәрен дә аңлайым, әммә ошо мәсьәлә буйынса үҙемдең фекерем менән дә бүлешмәй булдыра алмайым.

"Аллаһ" һүҙенең аҙаҡҡы хәрефе беҙҙең туған телебеҙҙе һис кенә лә боҙмай! Дин тотоп, Аллаһы Тәғәләгә баш эйеп ғүмер иткән, изге Китапты транскрипциялар буйынса түгел, ә ғәрәби текстан уҡыусы күп мосолман ҡәрҙәштәр ҙә, махсус белемле бөтә имам-мөғәллимдәр ҙә минең менән ризалашыр тигән инаныуҙамын. Бөгөнгө беҙ ҡулланып йөрөгән рус алфавитына халҡыбыҙ тик уҙған быуаттың ҡырҡынсы йылында ғына күскән дәбаһа. Ә уға тиклем (20-се йылдан алып, ун йыл арауығында латин хәрефе менән яҙғанды иҫәпкә алмағанда) милләттәштәребеҙ ғәрәп хәрефтәре менән яҙған. Аҡмулла, Ғафури, Бабичтар ҙа тик ғәрәп яҙмаһын ҡулланған. Тик ана шул һүҙлек үҙгәргән осорҙа, рус алфавиты ярҙамында башҡорт һүҙҙәрен яҙа башлағас ҡына, шунда эшләгән бер-нисә яҙыусы тарафынан алып ташланылған был хәреф.

"Яҙа-йоҙа" ғына ишетелһә лә, мөҡәддәс был һүҙҙең аҙаҡтағы өнө һәр саҡ ишетелеп торорға тейеш. Ул бит берәй кеше, януар, йә иһә "кәрәк", "һәнәк", "балта" һымаҡ ябай предмет исеме рәтендә түгел, ә Раббыбыҙҙың иң төп исеме! Ҡасандыр ошондай темаға һүҙ сыҡҡас, дин өлкәһендә ғилемле булған бер ҡәрҙәшем: "Ишетелер-ишетелмәҫ йомоҡ хәрефтәрҙе төшөрөп ҡалдыра башлаһаҡ, "Башҡорт" тигән һүҙҙе лә "башҡор" тип әйткән һымаҡ була ла баһа", - тигәйне. Халыҡта "Аллаға, Алланы, Алланан" тип һөйләшеү киң таралған булыуына ҡарамаҫтан, "Аллаһҡа, Аллаһты, Аллаһтан" тип яҙһаҡ та телебеҙгә һис хилафлыҡ ҡылынмаҫ һәм ошо изге һүҙҙең тамыры һаҡланып ҡалыр, халҡыбыҙ ҙа быға тиҙ генә өйрәнеп алыр ине. "Трансформатор", "реабилитация", "микрофлора" һымаҡ бихисап сит телдәге исемдәрҙе ятлап ала алған халҡыбыҙ бер Аллаһ һүҙен дә ятлап ала инде ул...

Әйе, күптәребеҙ "Аллаһы Тәғәлә", "Аллаға шөкөр" тип әйтергә күнеккәнбеҙ, әммә, "Аллаһ Тәғәләгә шөкөр" тип тә әйтәләр. Ҡағыҙға яҙғанда барыбер "Аллаһ" һүҙен тулы яҙырға тейешбеҙ. Бөгөнгө көндә уҡый-яҙа белмәгән кеше юҡ. Халыҡ ҡағыҙҙа яҙылғанға ныҡ иғтибар итеүсән.

Яңы һүҙлек төҙөгәндә элекке мөғәллимдәребеҙ аша лөғәтебеҙгә ғәрәптән күскән башҡа бихисап һүҙҙәр ҙә ныҡ үҙгәртелеп килеп ингән. Мәҫәлән, ғәрәптең "ҙекер" һүҙе "зекер" булып киткән, "сауаб" - "сауап", "аҙамат" - "азамат", "ғәҙим" -"ғәзим", ә "ғаҙаб" - "ғазап"ҡа төрләндерелгән һ.б. Бөгөнгө көндә үҙебеҙҙең мөмкинлегебеҙ булыуынан файҙаланып, ошондай һүҙҙәрҙе лә, алфавитыбыҙҙағы хәрефтәр ярҙамында яҙып, дөрөҫ итеп һөйләшһәк, әлбиттә, яҡшы булыр ине лә бит... Әммә, әлеге әйтмешләй, әллә ҡасан уҡ "Башҡорт теле" китаптарына, һүҙлегенә инеп киткәс, инде уларҙы төҙәткеләп маташыу кәрәкмәйҙер ҙә. Шуға күрә лә был һүҙҙәргә мин иғтибар итмәҫкә тырышам. Шулай ҙа, Ҡөрьән уҡып ултырған мәлдә улар бик йыш осрай, иҫкә төшә.

Ҡөрьән аяттарын, ғәрәп телендәге төрлө доғаларҙы транскрипциялағанда беҙҙең алфавитыбыҙ башҡаларға ҡарағанда иң ҡулайлыһы тип һанала. Сөнки ғәрәп телендә булған өндәр барыһы ла тигәндәй беҙҙә бар. Шуға ла иғтибар итәйек әле: үҙҙәренең алфавитында кәрәкле хәрефтәре булмаған бәғзе халыҡтар ҙа ғәрәп һүҙҙәрен дөрөҫ уҡырға тырышып яталар ҙа баһа! Мәҫәлән, "Алла" тип кенә әйтеүе урыҫтар өсөн күпкә еңелерәк булыр ине, әммә улар ҙа, бына ошо изге исемде мөмкин тиклем боҙмаҫҡа тырышып, "Аллах" тип, әйтәләр һәм яҙалар. Миндә татар телендә яҙылған бер китап бар. Ҡөрьән Кәримдең тулыһынса транскрипцияһы бирелгән унда, "Ҡөрьән Кәримде уҡыу өсөн яҙмалыҡ" тип атала. Изге Ҡөрьән аяттарын, доғаларҙы дөрөҫ итеп уҡыр өсөн, татарҙа булмаған "ҫ" өнөн "сакау с", "ҙ" өнөн "сакау з", "ҡ" өнөн "каты к" тип аңлатма биргәндәр унда. Был яҙмалыҡты төҙөүсе авторҙар "ғәрәп һүҙҙәрен татар теленең фонетик ҡағиҙәләренә яраҡлаштырайыҡ, үҙебеҙгә нисек уңай, шулай әйтәйек тә ҡуяйыҡ" тимәгәндәр бит. Ә беҙ, Раббыбыҙ тарафынан бирелгән шундай кәрәкле өндәребеҙ телебеҙҙә, ә хәрефтәребеҙ алфавитыбыҙҙа була тороп та, иң бөйөк исемдән - Аллаһ исеменән "һ" хәрефен алып ташлау хаҡында һүҙ ҡуҙғатабыҙ.

Башта килтерелгән мәҡәлә авторы әйтмешләй, "телдәр, күңелдәр, зиһендәр өсөн былай ҙа үтә хәүефле заманда, телебеҙгә, уның яҙмышына, һүҙҙәренә, ҡағиҙәләренә, яңырыуына" һаҡсыл булырға кәрәклеген мин дә һис инҡар итмәйем, туған телемде яратам һәм хөрмәт итәм. Әммә, телебеҙҙе нисек кенә яратһаҡ та, башҡа ниндәй генә һүҙҙәр хаҡында бәхәс ҡорған хәлдә лә, Ҡөрьән һүҙен - изгеләрҙән изге "Аллаһ" һүҙен үҙгәртергә, "башҡортсалаштырырға" тырышмайыҡ, хөрмәтле диндәштәрем! Ошо хаҡта мөфтиәтебеҙҙең, башҡа абруйлы дин әһелдәренең фекерен дә ишетергә теләр инем...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ*

## Тын юлдарына

❖ Ҡапыл ғына тын юлдары ауыртһа, лимон, ҡурай еләге ҡайнатмаһы менән тирләгәнсе сәй эсергә. Шулай уҡ һөткә бал ҡушып эсеү файҙалы. Һөт эскәндән һуң ауыҙҙы сайҡатырға.

## Ҡурылдай

❖ Бронхит менән яфаланһаң, көн һайын диаметры 20 см булған шарҙы өрөп тултыр, тын юлдарың асылыр.

## Баш ауыртһа...

❖ Артыҡ күп эшләүҙән, стрестан баш ауыртһа: йылы һыу менән ҡойоноу файҙалы; аяҡтарҙы ашыҡ һөйәгенә тиклем ҡайнар һыуға тығып, 10 минут ултырырға; 1 стакан ҡайнар һыуға 1 балғалаҡ бөтнөк үләне ҡушып эсеү ҙә сихәтле; нашатырлы һәм камфаралы спирттарҙы тигеҙ күләмдә ҡушып еҫкәү ҙә һәйбәт дауа; баштың ныҡ ауыртҡан яғындағы ҡолаҡ эсенә сөгөлдөр йәки һуған һутына мансылған бәләкәй генә мамыҡ киҫәге ҡуйырға була.

## Оҙаҡ ятыуҙан тән боҙолғанда

❖ Микробтарҙы юҡ итеүсе ҡайын бөрөһө йә япраҡтары төнәтмәһе, һары мәтрүшкә (зверобой), шалфей, андыҙ тамыры (корень девясила высокого), ҡырылған һуған, кишер, алоэ, каланхоэ, эвкалипт, аҡ шыршы (пихта), әнис (анис) майҙары менән дауалау яҡшы.

***✓ Арбауын белһәң, ҡара йылан да ҡарышмай, тип әйтә беҙҙең халыҡ. Бик дөрөҫ әйтелгән һүҙҙәр, тип уйлайым мин. Шуға күрә тәбиғәттә тереклек иткән йыланға ҡарағанда, "йәшел йылан"ға ҡаршы арбауҙы тиҙерәк табайыҡ.***



ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

# НУХ ПӘЙҒӘМБӘР ХӨРМӘТЕНӘ...

## яткан ерҙә ҡат, йылан!

**Йылан һүҙен ишетеү менән күптәр һиҫкәнеп ҡуя. Ысынлап та, кеше өсөн тәбиғәттә көн күргән башҡа тереклектәр араһында йылан айырым урын алып тора. Уны күреү менән генә түгел, хатта күҙ алдына килтереү менән әллә нисек булып китә. Йәй көнө, бесән әйләндереп йөрөгән мәлдә, ҡапыл бакуй аҫтынан йылан килеп сыҡһа, бер метр түгел, биш метрға һикереп киткәнеңде һиҙмәй ҙә ҡалаһың. Шунан инде һәнәк оса бер яҡҡа, үҙең осаһың икенсе яҡҡа.**



Шул уҡ ваҡытта йыландың йәшәү рәүеше башҡа хайуандар тормошонан әллә ни айырылмай кеүек. Улар ҡатнаш урманды, оҙон үлән баҫҡан далаларҙы, һаҙлыҡтарҙы, йылғаларҙы һәм күлдәрҙе үҙ итә. Ғәҙәттә, йыландар бер ергә әйәләшә. Бер йылан биләмәһе алтмыш-йөҙ метрҙан артмай. Бер ғаилә дүрт гектар майҙанды биләй ала. Ҡышлау өсөн улар йәйге урындарынан биш саҡрымға тиклем күсә. Ҡыш осорон ике метрға тиклем тәрәнлектә үткәрәләр. Берәмләп йә төркөм-төркөм булып ҡышлайҙар. Күп осраҡта бер урынға унар йылан йыйыла. Әммә ҡайһы ваҡыт өс йөҙ йыланға тиклем булған төркөм дә осрап ҡуя. Яҙҙың килеүенә ҡарап, май баштарында ер өҫтөнә сығалар. Беренсе булып ата йыландар сыға, ә бер нисә көндән инә йыландар һәм балалары ер өҫтөнә күтәрелә. Йәй көндәрендә йәшәү урыны итеп төрлө хайуандар ояларын, ҡороған ҡыуаҡтарҙы һәм серек ағастарҙы һайлайҙар. Һунарға ҡояш байыған сығалар. Көндөҙ ҡояшта ҡыҙынып ятырға яраталар. Уңышлы һунарҙан һуң йыландар йәшәгән урынынан ике-өс көн сыҡмай ҙа ятырға мөмкин. Ояла тыныс ҡына ятыу улар өсөн отошлораҡ, сөнки уларҙың дошмандары күслө. Йыландарҙың дошмандары - бөркөт, өкө, ябалаҡ, бурһыҡ, төлкө һәм терпе.

Шуныһы үҙенсәлекле - йылан йыл һайын тиреһен һала. Уның һалған тиреһен минә лә күрергә насип булды. Аптырамалы хәл инде. Тире шул килеш ятып ҡалған, хатта күҙ бәбәктәренә, тештәренә хәтлем тире тотош көйө һаҡланған. Үҙенән үҙе һорау тыуа. Ә йылан үҙе ошо тире эсенән ҡайһылайтып сыға алды икән? Бәлки, был турала белгән кешеләр яҙып ебәрер?

Бына шулай, йыландың тәбиғәттәге тормошо тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына һымаҡ. Әммә уның образы кешелек тормошонда бөтөнләй икенсе урын алып тора. Был турала халыҡ әйтемдәре лә асыҡ һөйләй. Йыландың ҡараһы ла йылан, ағы ла йылан, тигән әйтем уның дошман икәнен асыҡ күрһәтеп тора. Йәнә телгән - йылан ите ашаған, тигән әйтем бик үҙенсәлекле. Йылан ите ашаған кеше башҡа хайуандарҙың телен аңлау һәләтенә эйә була икән. Ер аҫтында йылан көйшәгәнен дә белә ул - ауылдағы бар яңылыҡты белгән кешегә ҡарата ҡапыла әйтеп ҡуйыбыҙ был һүҙҙәрҙе. Һәйбәт тип йөрөгән кешебеҙ ҡапылдан ғына насарлыҡ ҡылып ташлаһа, ҡуйыныныбыҙҙа йылан аҫрап ятҡан икәнбеҙ, тип аптырап бот сабабыҙ.

Йыландың ун ике аяғы бар, тип иҫәпләй башҡорт халҡы. Әммә йылан үҙ аяҡтарын бик һирәктәргә генә күрһәтә. Шуға күрә, йылан аяғын күргән бәхетле булыр, тигән әйтем бар. Ә инде, йылан аяғын киҫкән, тигән әйтем бик тәжрибәле кешегә әйтелә.

Халыҡ ижады буйынса, йылан кешегә яҡшылыҡ та, яманлыҡ та ҡыла ала. Әммә уның кире яҡтары күберәк буғай. Шулай ҙа һүҙҙе ыңғай яҡтарынан башлап китәйек. Бына аҡ йылан менән түҙбаш йылан - ыңғай "геройҙар". Улар үлтереү генә түгел, хатта тейергә лә ярамай. Бигерәк тә аҡ йыланға теймәскә кәрәк, сөнки ул йыландарҙың батшаһы булып иҫәпләнә. Аҡ йыланды үлтергән кешене йыландар торған ерендә ашар, ти халыҡ. Аҡ йыланға аҡ яулыҡ һалһаң, ул мөгөҙөн һала. Ул кеше бәхетле була, тиgән ышаныу һаман йәшәп килә халыҡ күңелендә.

Йыландарҙың башҡа төрҙәре дошман булып иҫәпләнә. Шуға күрә йыландарҙы һәр ваҡыт үлтерергә тырышҡандар. Ат тире һеңгән сыбыртҡы менән туҡмап үлтереү иң һәйбәте булып иҫәпләнгән. Шуныһы аяныслы. Һуңғы йылдарҙа халҡыбыҙ өсөн йыландың яңы төрө бигерәк тә ҡурҡыныс булып сыҡты. "Йәшел йылан" тип атала ул.

Йылан ни тиклем оҙаҡ йәшәй, ул шул хәтлем зәһәргә әйләнә икән. Был ысынлап та шулай микән, белмәйем. Әммә халыҡ ижадында, йөҙ йыл йәшәгән йылан аждаһаға, мең йыл йәшәгәне юхаға әйләнә, тип әйтелә. Шуға күрә юха һүҙе хәйләкәр, таҫма телле кешегә төбәлгән.

Юха-йылан тора-бара матур ҡыҙға әйләнеп китә икән. Был турала "Урал батыр" эпосында ла әйтелә. Әкиәттән әҙәк килтереү урынлы булыр. "Ҡатын айыуҙың маңлайына бер сирткәйне - теге бүрегә әйләнде, ти. Бүренең маңлайына бер сирткәйне - арыҫлан булды, ти. Шунан тегә ҡатын ана шул арыҫланға атланып алды ла үҙ юлына саптырып сыҡты ла китте, ти. Был ҡатын тигәнебеҙ юха йылан булған икән. Һылыу ҡатын ҡиәфәтенә ингән ана шул юха йыландың хәйләһе арҡаһында Шүлгән, үҙенең кешелеген ғүмергә юғалтып, кейек булып ҡалған. Бер ҡараһаң - айыу, икенсе ҡараһаң - бүре йәки арыҫлан булып йөрөгән-йөрөгән дә, йөрөй торғас, бер күлгә батып үлгән, ти".

Йылан күрһәң, йылан доғаһын уҡырға кәрәк, ти халыҡ әйтеме. Шуға борон йылан арбаусылар булған. Йылан арбаусылар бик көслө кешеләр рәтендә торған. Уларҙың арбауына сыҙай алмайынса, йылан хатта һуҙылып ятып үлгән. Йылан арбау һамағының аҙағын уҡыйыҡ әле:

*Сәңкә, сәңкә, сәңкә йылан,*
*Сәңкә башлы ҡара йылан,*
*Атҡан уҡтан етеҙ йылан,*
*Ағын һыуҙан ауан йылан,*
*Аҡ мамыҡтан йомшаҡ йылан,*
*Сағыр булһаң, саҡ, йылан,*
*Саҡмаҫ булһаң, ят, йылан,*
*Нух пәйғәмбәр хөрмәтенә*
*Ятҡан ерҙә ҡат, йылан.*

Факиһа Туғыҙбаева үҙ ижадында был турала ошолай яҙып китә.

*Ҡустым! Ҡурҡма йыландан,*
*Булһа ла ул ҡап-ҡара!*
*Быуа уны нишләтәм,*
*Миңә ентекләп ҡара.*
*Алам ҡулыма ҡурай,*
*Моңло көйҙәр уйнайым;*
*Ҡурайымда уйнағанда,*
*Матур уйҙар уйлайым.*
*Йоҡлай ҙа китә йылан*
*Сағам тигән ерендә.*
*Мин ҡурай уйнағанда,*
*Уянмаҫ ул киренән.*
*Ҡустым! Ҡурҡма йыландан -*
*Көслө унан ҡурайым.*
*Моңло көй уйнай-уйнай,*
*Йыланды ла арбайым.*

Был мәҡәләне халҡыбыҙҙың тапҡыр әйтеме менән тамамлағы килә. Арбауын белһәң, ҡара йылан да ҡарышмай, тип әйтә беҙҙең халыҡ. Бик дөрөҫ әйтелгән һүҙҙәр, тип уйлайым мин. Шуға күрә тәбиғәттә тереклек иткән йыланға ҡарағанда, "йәшел йылан"ға ҡаршы арбауҙы тиҙерәк табайыҡ. Аллам һаҡлаһын, уның аждаһаға, тора-бара юхаға әйләнгәнен көтмәйек. Берүк халҡым был зәһәр йыландан арынырға үҙендә көс таба алһын, тип Аллаһы Тәғәләнән һорайыҡ.

**Шәриф ӘҒЛӘМОВ.**
**Бөрйән районы.**

**Әйткәндәй, гәзит уҡыусыларға шундай тәҡдим: "Тәбиғәт мөғжизәләре" йә "Тереклек мәктәбе" рубрикаларына тәбиғәт йәнле, тәбиғәт телен аңлаған, тәбиғәт тауышын ишетә белгән, тәбиғәттәге төрлө күренештәр, үҫемлектәр, кейек-йәнлектәр, ер-һыуыбыҙ тураһында ата-бабалар һүҙен хәтерендә һаҡлаған, тәбиғәт балаһы булған уҡыусыларыбыҙҙан мәҡәләләр көтәбеҙ.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Аҡмуйын себен турғайы

**(Мухоловка-белошейка)**



Бик ваҡ, хатта ябай турғайҙан да бәләкәйерәк, аҡлы-ҡаралы төҫө менән айырылып тора: өҫкө яғы ҡап-ҡара, түше, ҡорһағы - ап-аҡ. Ата ҡоштоң муйынында аҡ муйынса бар. Ҡанаты буйлап аҡ һыҙат үтә, маңлайында, ҡойроғоноң ике яғында ла аҡ тап була. Суҡышы бәләкәй, бик нескә генә. Тауышы - турғайҙарға хас булғанса, өҙөп-өҙөп "пик-пик" тип саҡыра.

Бик һирәк осраған төр, төбәктең Урал алды өлөшөндә генә оя ҡороп йәшәүе теркәлгән. Бөтөн донъя буйынса ҡарағанда, Францияның көнсығышынан көньяҡҡа ҡарай Көньяҡ Уралдың көнбайыш итәгенә тиклем таралған. Волга-Кама крайының көньяҡ-көнбайыш райондарында ғына йәшәй, унда ла тигеҙ таралмаған. Үҙенә йәшәү өсөн бик ҡулайлы урындарҙа, айырыуса ҡарт ағастар үҫкән урмандарҙа колониялар менән көн итә. Башҡортостандан көнсығыштараҡ, Силәбе өлкәһендә аҡмуйын себен турғайы юҡ. Ғалимдар В.Д. Ильичев, В.Е. Фомин (1988) Бәләбәй ҡалаһынан төньяҡ-көнбайышҡа 20-22 саҡрым тирәһендә был ҡоштоң ояһына тап булыуы билдәлә. Бик бейек булып үҫкән, тик инде ҡартайған йүкә, усаҡ, ҡайын, сағандан торған был урман өлөшөндә аҡмуйын себен турғайы үҙен бик яҡшы тойған булһа кәрәк. Сағаn олонондағы ояһы янында ем алып ҡайтып барған ата ҡошто ғалимдар өйрәнеү өсөн аулай. Урал арьяғында Ҡарағайлы күле янында күҙәтелгән.

Өфөнөң Ғафури исемендәге паркы ла ҡоштарға бай урын. Унда беҙ 1978 йылда йүкә олонондағы ояһында ултырған аҡмуйын себен турғайына тап булдыҡ. Оя ерҙән 6 метр бейеклегендә ине. Был ағас кеше күп йөрөгән һуҡмаҡта үҫә, ҡоштар уларға иғтибар ҙа итмәй, ярышып, бәпкәләренә ем ташый ине. Киләһе йылына ла элекке таныштарыбыҙ урынында ине. Баш ҡаланың Башҡортостан урмансылары паркында ла аҡмуйын себен турғайы йәшәй.

Ата ҡоштар инә ҡоштарҙың осоп ҡайтыу мәлендә йырлай башлай. Ояны апрель аҙағы - май башында ҡора, ул ерҙән 10 метр бейеклектә була. Оя тыштан ҡоро япраҡтар, кипкән үләндәрҙән үрелә. Эсенә кипкән үлән, ҡайһы саҡта ат ялы түшәй.

Аҡмуйын себен турғайы - Башҡортостанда һирәк ҡош. Ареалы тигеҙ түгел, Урал алдында күберәк, ҡарт ағаслы урмандарҙы ярата. Урал арьяғында иһә был ҡошто тап итеү мөмкин булмаған тиерлек хәл. Шулай ҙа яһалма оялар эшләп ҡуйғанда, ҡоштоң һанын арттырыу мөмкин булыр ине.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**



### 18 МАЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.45 Д/ф "Алексей Гуськов. Противостояние звезд". [12+]
12.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Противостояние". [16+]
0.00 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.40, 3.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Восьмой участок. Продолжение". [16+]
0.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз).**
**14.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Асыш. [6+]**
**16.00 Башкорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Д/с "Вопрос науки". [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Д/с "Города-герои". [16+]**
**21.00 Специальный репортаж. [16+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Кустәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.15 Х/ф "Ар-хи-ме-ды!" [12+]**
**1.45 Спектакль "Кьоджинские перепалки". [12+]**
**4.00 Бәхет иле. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**5.30 Территория счастья. [12+]**

### 19 МАЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Противостояние". [16+]
0.00 Д/ф "Григорович. Юрий Грозный". [12+]
1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.15, 3.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Восьмой участок. Продолжение". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Призрак уездного театра". [12+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.00, 3.15 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**16.45 Республика LIVE. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Формула здоровья. [12+]**
**18.15 Материнство и детство. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**21.00 Креативный код. [12+]**
**22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**23.00 "Башкорт йыры-2026". [12+]**
**23.45 Навигатор истории. [12+]**
**0.00 Х/ф "Вечное свидание". [12+]**
**1.30 Спектакль "Ночь, как вся жизнь". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 20 МАЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Противостояние". [16+]
0.00 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.15, 3.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Восьмой участок. Продолжение". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Призрак уездного театра". [12+]**
**11.00 Специальный репортаж. [16+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Формула здоровья. [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 "Экологично". [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**16.45 Автограф. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Дуҫтар. [16+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Специальный репортаж. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2026". [12+]**
**0.00 Х/ф "Вселенский заговор". [12+]**
**1.30 Спектакль "Когда цветут цветы". [12+]**
**2.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**3.00 Колесо времени. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 21 МАЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.45, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Противостояние". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.15, 3.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Восьмой участок. Продолжение". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Призрак уездного театра". [12+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Дознание. [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Сулпылар. [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Навигатор истории. [12+]**
**16.15 Уралым. [12+]**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Креативный код. [12+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Материнство и детство. [12+]**
**20.30 Формула здоровья. [12+]**
**20.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Позвоните Мышкину". [12+]**
**1.30 Спектакль "Близнецы". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 22 МАЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 18.40 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.20, 14.15 "Время покажет". [16+]
16.15 Давай поженимся! [16+]
17.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Что? Где? Когда?" [16+]
22.55 Премьера. "Команды". [16+]
23.55 Х/ф Премьера. "Книга решений". [16+]
1.45 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Поймай меня, если сможешь". [12+]
23.35 Х/ф "Без колебаний". [12+]
3.20 Х/ф "Подруги". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Призрак уездного театра". [12+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Тирмәкәй. [6+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**16.45 Дознание. [16+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**18.00 Башкорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 Формула здоровья. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Башкорт йыры-2026". [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Дуҫтар. [16+]**
**23.30 "Курай-шоу". [12+]**
**0.00 Х/ф "Верный". [16+]**
**1.15 Спектакль "Люди на том берегу". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 23 МАЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Достояние республики". К 170-летию Третьяковской галереи. [12+]
11.10 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Наше всё. Сделано в России". [12+]
13.05 Т/с "Шифр". [16+]
17.05 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.55 Х/ф "Лунатики". [18+]
1.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Аншлаг и Компания". [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Запасная жена". [16+]
0.40 Х/ф "Крайняя необходимость". [12+]
4.28 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15 Автограф. [12+]**
**8.45 "Аль-Фатиха". [12+]**
**9.15 Сәләм представляет... [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 МузКәрәҙ. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 Репортаж о победителе конкурса "Лучшая сельская школа" (гимназия села Чекмагуш). [6+]**
**11.30 Экологично. [6+]**
**11.45 "Ат уйнатып". [6+]**
**12.00 "Елкән". [6+]**
**12.30, 4.45 Навигатор истории. [12+]**
**12.45 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**17.45 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.15, 4.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**

**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Байык-2026". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 5.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.30 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 "Башкорт йыры-2026". [12+]**
**0.45 Х/ф "Связь времен". [16+]**
**2.30 Спектакль "Ак калфак". [12+]**
**5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

### 24 МАЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.10 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Будем жить!" [16+]
13.10 "Видели видео?" [0+]
14.20 Х/ф "Финал". [12+]
16.05 Д/ф "Больше, чем золото". [0+]
17.00 "Команды". [16+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 "До Ре". [12+]
21.00 "Время".
23.00 "Большая игра". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.30, 2.40 Х/ф "Алла в поисках Аллы". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.50, 1.40 Д/с "Рассказы из русской истории". [12+]
12.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Весёлые ребята". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.19 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45, 16.00, 20.30 Автограф. [12+]**
**8.30 "Курай даны". [12+]**
**8.45 Кустәнәс. [12+]**
**9.15, 4.30 "Мама". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Сулпылар. [6+]**
**12.00 "Ат уйнатып". [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 Ап-асык. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**14.45 Дорога к храму. [6+]**
**15.15 Честно говоря. [12+]**
**16.15 Д/с "Трудности перевода". [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.45 Спектакль "Я вернусь". [12+]**
**19.30 Полезные новости. [12+]**
**19.45, 4.45 Әләҗес. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**23.00 Концерт Азата Бикчурина. [12+]**
**0.45 Х/ф "Обет молчания". [16+]**
**2.45 Спектакль "Мы с тобой одной крови". [12+]**
**5.30 Дуҫтар. [16+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Май (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 18 (1) дүшәмбе | 3:35 | 5:05 | 13:30 | 18:41 | 21:19 | 22:49 |
| 19 (2) шишәмбе | 3:33 | 5:03 | 13:30 | 18:42 | 21:21 | 22:51 |
| 20 (3) шаршамбы | 3:32 | 5:02 | 13:30 | 18:43 | 21:23 | 22:53 |
| 21 (4) кесе йома | 3:30 | 5:00 | 13:30 | 18:44 | 21:24 | 22:54 |
| 22 (5) йома | 3:29 | 4:59 | 13:30 | 18:45 | 21:26 | 22:56 |
| 23 (6) шәмбе | 3:27 | 4:57 | 13:30 | 18:46 | 21:28 | 22:58 |
| 24 (7) йәкшәмбе | 3:26 | 4:56 | 13:30 | 18:47 | 21:29 | 22:59 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

✔ *Тәбиғәткә сығыр алдынан кейгән кейемдәрегеҙҙе эфирлы май һөртөлгән ябай валик менән таҙаларға кәрәк. Эвкалипт, лимон, бөтнөк, ала миләүшә һәм ҡытай лимоннигы эфирлы майҙары талпанды ҡурҡытырға яраҡлы.*



ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

# ТАЛПАНДАН ҺАҠЛАН!



**Көндәр йылыныу менән тәбиғәттә талпан да әүҙемләшә. Был башлыса апрель-октябрь айҙарына тура килә. Иң әүҙем ваҡыттары - май, июнь айҙары. Тап ошо мәлдә урманда талпан ҡаҙалыуы ихтималлығы ҙурая. Талпан энцефалит һәм боррелиоз ауырыуҙарын йоҡтороуы менән хәүефле.**

Талпан башлыса үләндә һәм ҡыуаҡлыҡтарҙа була. Ҡағиҙә буларaҡ, ул 1 метрҙан бейегерәк ҡыуаҡ-ағастарға менмәй. Батҡылыраҡ, дымлы, япраҡлы ағастар үҫкән ерҙәрҙе ярата, бындай урындарҙан кешеләр ҙә күберәк йөрөй. Улар шулай уҡ элекке баҫыуҙар, һөрөлгән ерҙәр, бесән яткан урын, шишмә һәм йылға ярҙарында күп. Талпан ул ултырған ботаҡҡа тейгәндә кейемгә йәбешеп өлгөрә. Тәбиғәттә үләнгә ял итергә ултырыу хәүефле, был осраҡта талпан ерҙән дә менәсәк. Шулай уҡ ул йышыраҡ аяҡ кейемenә, салбар балағының осона йәбешә. Талпан ҡояшлы, ҡоро көндәрҙә бигерәк әүҙемлек күрһәтә. Һыуыҡ көндәрҙә, ҡырау төшкән мәлдәрҙә, ямғырҙа улар пассив.

Талпандан һаҡланыу өсөн ҡырға сыҡҡанда дөрөҫ кейенергә кәрәк. Салбар балағының осон асыҡ ҡалдырмағыҙ. Күренеп торған асыҡ тән өлөштәре булмаһын. Икенсенән, һәр 2 сәғәт һайын кейемде һәм тәнде ентекләп ҡарарға кәрәк. Тәндең ҡайһылыр өлөшөнә ҡаҙалыр алдынан талпан ярты сәғәттән 2 сәғәткә тиклем үҙенә ҡулайлыраҡ урын эҙләп йөрөүе ихтимал. Ошо ваҡыт эсендә уны тотоп өлгөрөргә мөмкин.

Талпан йорт малына ҡаҙалып та ҡайта. Бесәй, эттәрҙә лә була. Был осорҙа мал ҡарағанда айырыуса һаҡ булырға кәрәк. Талпандар 2 мм ҙурлыҡтан башлана, инә талпан бер нисә тапҡыр эрерәк була. Тәне арҡа-ҡорһаҡ йүнәлешендә йәйенке. Ҡан һурып туйған талпандың тәне шар формаһын ала һәм ныҡ ҙурая. Төҫө асыҡ һарынан ҡара көрән төҫкә тиклем.

Алда әйтелгән ауырыу талпан тешләүе һәм уның тәнен иҙгәнсе тотоу аша йоға. Ауырыу киҫкен башлана, талпан ҡаҙалғандан 7-12 көн үткәс, температура нығ күтәрелә, баш ауырта, тән һыҙлай, күңел болғана. Юғары температура һәм организмдың дөйөм хәлһеҙлеге һөҙөмтәһендә ауырый башлағандың 2-4-се көндәренә геморрагик сабыртма, теш ҡаҙналары ҡанауы, танау ҡанауы күҙәтелә. Тәүге билдәләр күренеү менән табип ярҙамына мөрәжәғәт итергә кәрәк!

Тәбиғәт ҡосағында ял иткәндә талпан ҡаҙалыуҙан һаҡланыу өсөн бер шәп ысул бар. Тәбиғәткә сығыр алдынан кейгән кейемдәрегеҙҙе эфирлы май һөртөлгән ябай валик менән таҙаларға кәрәк. Эвкалипт, лимон, бөтнөк (мята), ала миләүшә (лаванда) һәм ҡытай лимонниги эфирлы майҙары талпанды ҡурҡытырға яраҡлы. Эвкалипт һәм лимонник эфирлы майҙарын бергә ҡушып, бөтә төрлө бөжәктәрҙе ҡыуыу өсөн ҡулланырға була. Ә бына лимон майы талпан, бөрсә һәм хатта беттәрҙе бөтөрөүҙә файҙалы. Бөтнөк майы бөжәктәр өсөн ағыулы һанала һәм уларҙы ҡыуыусы тәбиғи матдә булып тора. Бөтәһе лә яраткан ала миләүшә еҫенә талпандар түҙә алмай, себен-серәкәй ҙә был еҫтән ҡаса. Ҡытай лимонниги майының еҫе аңҡып тора, ул бөрсә һәм талпандарҙан һаҡланырға ярҙам иткән тәбиғи матдә. Эфирлы майҙарҙы һыу менән бутап ҡулланырға ла мөмкин. Тик эҫе көндәрҙә, аллергия ҡуҙғыуын иҫкәртеп, эфирлы майҙарҙы тән тиреһенә һипмәҫкә кәңәш ителә.

Әйткәндәй, миҙгел башынан республикала 1347 кеше талпандан зыян күргән. Уларҙың 35,4 проценты - балалар. Роспотребнадзорҙың республика идаралығы хәбәр итеүенсә, был уҙған йылғы күрһәткестәрҙән бер меңгә тиерлек аҙыраҡ (2025 йылдың ошо уҡ осоронда 2356 кеше). Роспотребнадзор белгестәре халыҡҡа һаҡланыу саралaрын күрергә кәрәклеге тураһында иҫкә төшөрә. Ялан-ҡырҙарға сыҡҡанда репеллленттар һәм инсектоакарицидтар ҡулланырға, шулай уҡ махсус кейем кейергә кәрәк. Талпан вируслы энцефалитынан һаҡланыуҙың иң ышаныслы ысулы - вакцинация.

БАҠСА

# ХӘЙЛӘЛӘРЕ ЛӘ БАР



❖ Көндәр һыуынғанда теплицаға биҙрәләр менән ҡайнар һыу индереп ҡуйырға, тимер өҫтөнә йылытылған кирбестәр түшәргә була.

❖ Үңдырышлылыҡты күтәреү өсөн баҡсаға төрлө һеркәләндереүсе бөжәктәрҙе йәлеп итергә кәрәк. Был маҡсатта алһыу һәм аҡ туҡранбаш, һолобаш, бажат сәсергә була. Шулай уҡ аҡ гәрсис һәм кишер сәскәләре лә бөжәктәрҙе үҙенә тарта.

❖ Миҙгелдә бер-нисә тапҡыр емеш биргән сортлы еләктәр йәйҙең икенсе яртыһында күберәк уңыш килтерһен өсөн яҙғыһын уның сәскә сыға торған һабаҡтарын һындырып алалар.

❖ Ҡыяр эргәһенә укроп сәсергә кәңәш ителә.

❖ Картуф йәки томат тирәләй сәселгән сөгөлдөр фитофторозға бирешмәҫкә булышлыҡ итә.

❖ Ултыртылған һәр кәбеҫтә үҫентеһе эргәһенә кесерткән һабағы ҡаҙап сыҡҡан осраҡта, кәбеҫтә тиҙерәк тамыр йәйеп үҫеп китәсәк.

❖ Кәбеҫтә күбәләге һәм кеблән ҡотолоу өсөн кәбеҫтә түптәре араһына укроп, кориандр, сельдерей, бәрхәт сәскәһе, Бәйғәмбәр тырнағы сәсәләр, әрем үләнен йолҡоп һалалар.

❖ Картуф сәскән ваҡытта һәр ояға күмер ҡушып һалыу - ашлама ла, ҡаты ҡорттан да һаҡлай.

❖ Һарымһаҡ уңдырышлы булһын, түме яҡшырһын өсөн июнь айының тәүге яртыһында башта 10 литр һыуға 2 ҡалаҡ тоҙ һалып иҙеп һибәләр, ә аҙаҡтан таҙа һыу.

❖ Кишер насар үҫһә, 10 литр һыуға 1 ҡалаҡ тоҙ һалынған иретмә һибергә.

❖ Ҡыярға һыу күп кәрәк, бигерәк тә сәскә атҡан һәм уңыш биргән осорҙа даими рәүештә күп итеп һыу һибеп торорға кәрәк. Әммә ҡыяр сәскә ата башлаған ваҡытта һыуҙы һирәк һибеп, аҙаҡ яңынан йышайтҡанда, ҡыяр үҫемлектәре тиҙерәк сығыр.Көндәр эҫе торғанда ҡыярға һыуҙы күп һиберғә һәм йыш ҡына һирпеп торорға кәңәш ителә. 30 градус һәм унан да юғарыраҡ эҫелә ҡыяр һеркәһе үлә, шуға күрә, теплицаға һыу һалынған һауыттар ҡуйып сығыу мотлаҡ. Һауа торошо үтә түбән булһа, йә көндөҙгө һәм төндәге температура араһында айырма ҙур икән, ҡыярҙың түме боҙола. Шулай уҡ был үҫемлекә ел үтә өрөп тороу ҙа килешмәй.

❖ Әгәр йәй башында уҡ бер-нисә борос сығып, артабан үҫемлек сәскә атмай башлаһа, был боростарҙы өҙөп алырға кәрәк. Артабан үҫемлек икеләтә көс менән сәскә ата башлар һәм яҡшы уңыш бирер. Борос тамырҙары һауа һулаһын өсөн үҫемлек төбөндәге тупраҡ ҡатлауы ҡатмаҫлыҡ итеп йыш ҡына йомшартып торорға кәңәш ителә.

**Сәриә ҒАРИПОВА әҙерләне.**
**(Аҙағы. Башы 18-се һанда).**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**15 май "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова, А. Абушахманов, инсц. А. Ишбулдина), драма. 16+
**21 май "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадырова, А. Абушахманов), мелодрама. 16+

### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**15 май "Всегда один"** (А. Поярков, Э. Шрайнер), трагифарс. Камер залда үтә. 19:00. 16+
**15 май "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим, М. Күлбаев), иҫтәлектәр. Ҙур залда үтә. 12+
**16 май "Гарнир по-французски"** (М. Камолетти, А. Шрайнер), комедия. 18:00. 16+
**17 май "Батыр йөрәк"** (Р. Хәкимов), әкиәт. 11:00. 0+
**17 май "Ҡара һыуҙар"** (М.Кәрим, И. Ҡаҙаҡбаев), төш аралаш өн. 18:00. 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**15 май "Вот так репка!"**, рус халыҡ әкиәте. 18:00. 0+
**16 май "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). 12:00 һәм 15:00. 0+
**17 май "Три поросенка"** (Д.Гараева). 12:00 һәм 15:00. 0+
**19 мая "Красная шапочка"** (Ш. Перро әкиәте буйынса, А. Волков). 16:00. 0+
**20 май "Путь Победы"** (Д. Ғәрәева, К. Баязитова). 12:00. 6+
**20 май "Тьма египетская"** (М. Булгаков). 19:00. 16+
**21 май "Шесть чувств"** (Н. Беззубова, А.Верхоземский). 11:00. 0+
**21 май "В последний путь под рок-н-ролл"** (В.Денисов). 19:00. 16+

### Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**19 май "Зөлфиә Ҡудашеваға - 70!"** Юбилей кисәһе. 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**16 май "Сказка о рыбаке и рыбке"** (А.Пушкин), әкиәт. 0+
**19 май "Көтөлмәгәндә булған хәл"** (Э. Йәһүҙин), комедия. 16+
**21 май "Йәшәгән, ти..."** (Г. Хугаев), притча. 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**15 май "Ятҡа бирер йәрем юк!"** (В. Красногоров), комедия. 16+
**16 май "Нисек кейәүгә сығырға?"** (Н. Ғәйетбаев), комедия. 12+
**17 май "Насретдиндың алтын ишәге"** (Ш. Казиев), музыкаль әкиәт. 12:00. 0+
**21 май "Хәйбүш түрә, урынбаҫар Мәстүрә!"** (Н.Асанбаев), комедия. 16+

### Сибай концерт-театр берекмәһе

**21 май Әнүәр Нурғәлиевтың** концерты. 6+

### БР Милли музейы

**15 май "Үҙ ағасыңды ултырт"** оҫталыҡ дәресе.15:00. 6+
**16 май "Өфө - контрастар ҡалаһы"** фотокүргәҙмәһен асыу. 16:00. 6+
**16 май "Музей төнө - 2026"** музей акцияһы. 18:00 - 22:00. 6+
**18 май "Ашыҡ"** башҡорт халыҡ уйыны. 12:00. 6+
**19 май "Музей на кончиках пальцев"** обзор экскурсия. 15:00. 6+
**20 май "Башҡортостанда ҡортсолоҡ: фән һәм традициялар"** музей ҡунаҡханаһы. 12:00. 6+
**21 май "Тайна древнего амулета"** оҫталыҡ дәресе. 12:00. 6+

БАЛА САҠ ИЛЕ

# ЙОЛА-КӘСЕПТӘР АША ЛА...

## илһөйәрлек тәрбиәләнә

**Өфө районы Шамон ауылының "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһында балалар күңелендә, хәтерендә оҙаҡҡа иҫтә ҡала торған "Башҡорт хазинаһы- дебет шәл" исемле фольклор байрамы үтте.**

Балалар ябай ғына күренгән кәзә малының кеше тормошондағы әһәмиәте тураһында бик ҙур белем алды был көндә. Ә был белемде уларға Шамон ауылының ағинәйҙәре еткерҙе. Улар балаларға кәзәне тарап та, кәзә дебетен эшкәртеп, иләп тә, шәл бәйләп тә күрһәтте. Бер үк ваҡытта эш барышын шаян таҡмаҡтары менән йәмләне.

Артабан иһә тамашаға балалар үҙҙәре ҡушылды: дебет шәл тураһында шиғырҙар һөйләнеләр, йомаҡтар сисеп, зирәклектәрен дә иҫбатланылар. "Көтөүсе" малайҙар кәзә-һарыҡ роленә ингән балаларҙы бейетеп, күңелдәрҙе елкендерҙе. Шунан ҡыҙ балалар дебет шәл менән бейеүгә төшөп, байрамды сағыу күренешкә әйләндерҙе.

Балалар баҡсаһы тәрбиәселәре һәм әсәйҙәр ҙә тамаша ҡылып ҡына ултырманы. Улар "Кәзә һауыу" тигән шаян бейеү башҡарҙы. Аҙаҡ иһә ҡыҙ балалар, тәрбиәселәр һәм әсәйҙәр, ағинәйҙәр йомшаҡ, күпереп торған башҡорт дебет шәлен мода подиумына күтәрҙе.

Шулай итеп, тәрбиәләнеүселәрен халыҡ кәсептәре, ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштырып, туған телгә, туған халҡының йәшәйешенә, тарихына ҡыҙыҡһыныу, илһөйәрлек тәрбиәләү алымы тип баһаларға була "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһы коллективының был байрамын. Һәр хәлдә, ауылдың ағинәйҙәре һәм ата-әсәләре шундай һығымта яһаны.



МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# ТЕАТРЫБЫҘ БАҺАЛАНДЫ

**Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының Елена Коллегованың пьесаһы буйынса хәҙерге замандың киҫкен һәм әһәмиәтле темаларына - бурысҡа, яуаплылыҡҡа һәм ысын патриотизмға арналған "Кеше булып ҡалырға" спектакле тураһында хәбәр иткәйнек инде.**

Был спектакль 20-26 апрелдә Павел Луспекаев исемендәге Луганск академия рус драма театры ойошторған халыҡ-ара фестивалдең дипломына лайыҡ булды. Реаль хәл-ваҡиғаларға нигеҙләнгән, Махсус хәрби оперцияла ҡатнашҡан Луганск актерҙары тураһындағы спектакль илһөйәрлек тәрбиәләүҙә мөһим темаларҙы күтәрә. Сәхнә менән тормош араһындағы сиктәрҙе юйып, тамашасыны Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусының ысын тарихы менән таныштыра.

# "БЕР ХАЛЫҠТЫҢ ТАРИХЫ"

**Рәсәй халыҡтары берҙәмлеге йылында Фәйзи Ғәскәров исемендәге Халыҡ бейеүҙәре дәүләт ансамблендә яңы ҙур проект өҫтөндә эш башланды. Коллектив бер акттан торған "Бер халыҡтың тарихы" хореография спектаклен әҙерләй.**

Спектакль өҫтөндә ғалим-консультанттар ҙа эшләй. Улар араһында археолог Дим Ғиззәтов һәм тарихсы Салауат Хәмиҙуллин, драматург Зөһрә Бураҡаева, Евразия күсмә мәҙәниәттәр музейы директоры Николай Григорьев бар. "Был спектаклдә боронғо замандарҙан башлап башҡорт ере йылъяҙмаһы йәнләндерелә. Уның сюжеты башҡорт ырыу-ҡәбиләләре тормошоноң тарихи осорҙарын, берҙәм этностың барлыҡҡа килеүе өсөн көрәш этаптарын үҙ эсенә ала", - тип хәбәр иттеләр коллективтың матбуғат хеҙмәтенән.

Проект Рәсәй Мәҙәниәт министрлығының 2026 йылғы гранты аҡсаһына тормошҡа ашырыла. Проект етәксеһе һәм либретто авторы - Ф.Ғәскәров исемендәге Халыҡ бейеүҙәре ансамбле директоры һәм художество етәксеһе Нәзир Байегетов. Спектакль өсөн музыка авторы - Раил Мөрсәлимов, сценарий авторы - Рената Нәсибуллина. Ҡуйыусы балетмейстерҙар - Константин Диденко, Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Нәзир Байегетов, Илнур Әйүпов, Рәмизә Мөхәмәтшина, Ш.Бабич исемендәге йәштәр премияһы лауреаты Айбулат Баһауетдинов.

Коллективтың яңы проекты ансамблдең репертуарын байытып ҡына ҡалмаҫ, Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең хореография сәнғәте тарихында мөһим ваҡиғаға әүерелер, тип ышаналар ансамблдә.

# ЯУГИРҘАРҒА ҠУРАЙ ЕБӘРҘЕЛӘР

**Өфө ирекмәне Илшат Әхмәтов Махсус хәрби операция зонаһына 3D-принтерҙа баҫылған ҡурайҙар ебәргән. Посылканы ул республиканың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Кирилл Первов аша тапшырған.**

Белеме буйынса Илшат - иҫәпләү машиналары инженеры һәм иҡтисадсы. Яңы йыл байрамдарында ул программала "эскиз" һыҙған һәм бер нисә сәғәттән ысын ҡурайҙы ҡулына алған. Принтерҙа баҫылған тәүге уйын ҡоралы уның дуҫы, ҡурайсы Арыҫлан Оморҙаҡовтың да күңеленә ятҡан. Пластиктан яһалған инструменттың яңғырашы һәм уңайлы булыуы оҡшаған уға. Баҫылған ҡурай еңел генә, өс өлөштән тора, уны тышлыҡҡа һалып ҡуйырға мөмкин. Үҙенсәлекле ҡурайҙы Башҡортостан Республикаһының Милли халыҡ уйын ҡоралдары оркестры музыканттары ла һынап ҡараған.

"Беҙ ҡурайҙарҙы 177-се гуманитар ылау менән ебәрәбеҙ һәм уларҙы Башҡортостан полкының исемле батальонына тапшырабыҙ. Матди ярҙамдан тыш, яҡташтарыбыҙҙы рухи яҡтан да дәртләндереү мөһим. Алғы һыҙыҡта төрлө уйын ҡоралдарында уйнаған һәм йырлаған һәләтле егеттәр күп. Еңеү көнөндә үк яугирҙар ятҡан көйҙәрен уйнай ала", - тине Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Кирилл Первов.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# УЙҘАР ГОНАҺЫ КӨСЛӨРӘК

Бай байлығын итә: ай һайын ҡатын ала, ауыл һайын йорт һала.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙ ҡулдары менән булдырмай тороп, камиллыҡтың ни икәнен кеше белмәҫ.

**(Гарриет Мартино).**

Бәхетһеҙҙәрҙе аҡыл да ташлап китә...

**(Овидий Назон).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Күңеле аҙғын бер ҡатын йәшәгән, әммә уны был ҡылығы һәр саҡ борсоған: үҙе теләмәһә лә, ниндәйҙер яуыз көс уны шундай алама уйҙар уйларға этәрә һымаҡ тойолған уға. Ул бик йыш ғашиҡ булған, әммә уның был гонаһы уйҙарында ғына булғас, иренә хыянат итәм тип уйламаған. Шулай бер саҡ ул Хоҙайға мөрәжәғәт итеп:**

**- Аллам, ни өсөн мин күңелем сафлыҡҡа сарсай тороп, шундай аҙғын уйҙарға тартылам? Мин барыбер гонаһлымы?- тигән.**

**- Уйҙар гонаһы ҡылыҡтар гонаһынан көслөрәк, сөнки ҡылыҡ бер тапҡыр ғына булырға мөмкин, ә уйҙарҙың иге-сиге юҡ. Шуға ла уйҙар гонаһының да иге-сиге юҡ. - тигән Хоҙай. - Ҡылыҡ - инде ҡылынған ғәмәл, ә уй - ҡылынмаған ғәмәл. Әгәр ҙә ярамаған ҡылыҡ өсөн төрлө ғазаптар рәүешендә яза бирелһә, уйҙарға, ул тормошҡа ашмай тороп, яза бирелмәй.**

**- Улай булғас, мин оҙаҡ ғазапланасаҡмынмы ошондай гонаһлы уйҙарым арҡаһында? - тигән ҡатын.**

**- Мейеңдәге уйҙарыңды тормошҡа ашырмай һәм уның өсөн яза алмай тороп, һин ғазапланыуҙан туҡтамаясаҡһың, - тигән Хоҙай.**

**Ысынлап та, ҡартлыҡта ла күңеле тыныслыҡ тапмаған ҡатындың. Тамам хәлдән яҙғас, фәхишәләр йортона илткән юлдың бер яҡ ситенә сығып ултырған да, үткән бер кешегә үҙенең тарихын ҡысҡырып һөйләргә тотонған. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың кемеһелер уның һөйләгәнен тыңлап, юлынан боролоп, тормошон үҙгәртергә ҡарар иткән. Кемдер аҡылдан яҙған ҡарсыҡтан мыҫҡыл итеп көлгән. Был тарихты ишеткән аҡыл эйәһе башҡаларҙы аҙғын юлдан дүндереү өсөн риүәйәт уйлап сығарған...**

**Шулай итеп, уйҙар - беҙҙең дуҫ һәм дошман. Уйҙар - ул беҙҙең осош та, түбәнгә ҡолап төшөү ҙә. Уйҙар беҙҙе ожмахҡа ла, тамуҡҡа ла илтеүсе. Ҡылыҡтар күренеп тора, ә уйҙар йәшерелгән. Уйҙарҙа гонаһ ҡылыу еңел. Сөнки уны берәү ҙә күрмәй, уның өсөн берәү ҙә һине ғәйепләмәй. Ләкин Хоҙайҙан бер ниҙе лә йәшереп булмай. Кеше ҡылыҡтары менән дә, уйы менән дә ҡылған гонаһтары өсөн үҙ ғазаптары менән түләй барыбер..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.
1 582218 911006 26019

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
**"Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды.**
**Тел.: 8 (347) 226-99-48.**
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 14.05.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 14.05.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 15.05.2026 й.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2677
Заказ - 843

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.